*Рабиндранат Тагорҙың шундай һүҙҙәре бар: "Яҙ үтте, йәй үткәне лә һиҙелмәне, улар артынса ҡыш килде. Мин үҙ йырымды йырларға ла өлгөрмәнем. Йыр башлайым, тип, музыка ҡоралын ҡабат-ҡабат көйләнем, әммә йырымды ослап ҡуя алманым..." Бына шулай, үҙеңдән һуң ҡалдырыр мираҫыңды иртәгә түгел, бөгөндән хәстәрләү кәрәк. Ул мираҫ һин был донъянан киткәс тә йәшәүен дауам итерлек булһын.*

*Робин ШАРМА.*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6 - 12 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №6 (372)



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Миллилеген юғалтмаһын кеше,**

йәки III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы тураһында



4

**Ҡалып итексегә лә...**

үҙебеҙгә лә хуш икән



6

**Ҡулдан килмәҫлек эш булмай,**



8-9 уны эшләй алмаған кешеләр генә була...

**Атайлыҡ ҡаһарманлығы...**

улдарҙы ла ҡаһарман итә



12

14 ТВ-программа


*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ИЛ ҒӘМЛЕ ИР-УҘАМАН

## Президентыбыҙ Мортаза Рәхимовтың тыуған көнө айҡанлы



Борон-борон замандан бирле үҙенең Урал батырының исеме менән аталған тауҙарҙа бер-нисә ырыу көн күргән. Изге рух менән һуғарылған был тауҙар үҙенә күңел матурлығы эҙләүсе башҡа ҡәбиләләрҙе тартып торған, күрәһең. Әллә ҡайҙарҙан башҡа ырыуҙар килгән. Тора-бара бөтә ҡәбиләләр башҡорт халҡы тип атала башлаған... Баш ҡорт - баш ҡәбилә, тигәнде аңлата. Ни өсөн ул башҡаларға баш булған икән? Ҡәбиләләр үҙҙәре һайланымы был атаманы, әллә Урал тауҙарының ҡөҙрәтен тойоп, бында гел тыуып торған изге кешеләргә табынып, улар янына меңәр саҡрым алыҫлыҡтан килгән ырыу-халыҡтар биргәнме был исемде беҙгә?

Нимәһе ғәжәп: башҡорттоң далала йәшәүсеһенең дә, урман-тауҙарҙа көн күреүсе ырыуҙарының да төп һыҙаттары бер - тоғролоҡ, эскерһеҙлек, ҡунаҡсыллыҡ, матди байлыҡтан рухи байлыҡты өҫтөн күреү һәм әҙәм балаһына әҙәмсә мөнәсәбәт күрһәтеү. Ырыуындың һәр кешеһенең фекере менән иҫәпләшеү, әҙәмдәрҙе ҡол итеп йәберләмәү, ҡатын-ҡыҙҙарға ихтирамлы булыу. Башҡа илдәрҙең байлыҡтарын талап, үҙҙәренә етеш тормош ҡорған, быуаттар буйы бер туҡтауһыҙ һуғыш ҡуптарған Европа, ата-бабалары индеецтарҙы миллионлап һуйған, иң ҡурҡыныс геноцид күрһәткән, ә аҙаҡтан Африканан ҡолдар ташыған американдар ҙа беҙҙе демократия ҡанундарына өйрәтмәксе. Ә бит башҡортҡа бер кемдән дә өйрәнергә түгел. Маҡтанып, кәңәш биреп йөрөү ҙә беҙгә хас һыҙат түгел. Һәүетемсә, үҙ белдегебеҙ менән йәшәргә.

Ил уҙаманы... Беҙҙең тарихта оялырлыҡ бер осор ҙа юҡ. Беҙҙең тарихта аяуһыҙ тирандар ҙа, боронғо Рим башлыҡтары кеүек әшәкелек ҡылыусылар ҙа, берәй ханым матурлығына алданып, үҙ халҡына енәйәт ҡылыусы ла булмаған. Беҙҙең тарих - ул ғәйрәтле батырҙар, йөрәккә ил ғәмен һеңдереүсе сәсәндәр, халҡым, тип йән аямаған ил уҙамандарының тарихы. Ниндәй ҡөҙрәтле, изге көс ебәрә һуң беҙҙең халыҡҡа ошондай шәхестәрҙе?

Ил уҙаманы... Заманабыҙҙың иң ҡатмарлы ваҡытында беҙҙең халыҡты, республиканы Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов етәкләне. Башҡортто башҡорт итеп раҫларға, республиканы ысын мәғәнәһендә Республика итеп күрһәтергә кәрәк ваҡытта етәкләне ул ил-йортобоҙҙо. Милли республиканың етәксеһе булараҡ, ниндәй киҫкенлектәргә, ҡаршылыҡтарға осрағанын, йәмһеҙ ғәйепләүҙәрҙе һәм нахаҡ һүҙҙәрҙе нисек кисереүен ул үҙе генә беләләр. Ә ниндәй уңыштарға өлгәшеүен инде барыһы ла белә. Белә, күрә, ишетә, һоҡлана. Һәм көнләшә... Көнләшеп кенә ҡалмай, оло мәкерлектәр ҡороусылар ҙа байтаҡ. Был мәкерҙәрҙең ҡаралығын күрһә лә, Президентыбыҙҙың йөҙө һаман да яҡты сырайлы, ихлас. Ошондай замандарҙа рух ныҡлығын күрһәтеү - баһалап бөткөһөҙ ҡаһарманлыҡ инде ул.

Иҡтисади һәм сәйәси уңыштарҙы атап киткәндә, социаль, мәғариф һәм мәҙәниәттең юғары кимәлен барлағанда, Президентыбыҙға ихлас рәхмәттәр әйткәндә, беҙ, башҡорттар, Мортаза Ғөбәйҙулла улының тағы бер оло ҡаҙанышын тулыһынса баһалап бөтмәйбеҙ кеүек. Ул башҡорттарға, шулай уҡ республикала йәшәгән башҡа милләттәргә лә, үҙ асылын ҡайтарҙы. Һәр милләттең төп билдәһе - тел. Телебеҙ хәҙер дәреслектәге генә тел түгел, дәүләт теле, Өфө һәм башҡа ҡалаларҙың урамдары теле, матур журналдар һәм газеталар теле, мәҙәни сараларҙың теле, иҫ китмәле матур баҫмалар, китаптар теле ул хәҙер. Башҡорт теле башҡорттарға ҡайтты.

Асыҡ йөҙлө, ихлас, иҫ китмәле эшһөйәр, ҡайһы осраҡта сабырлыҡ, ҡайһы осраҡта рух ныҡлығы күрһәтергә мәжбүр Президентыбыҙ беҙҙе лә сабырлыҡҡа, ихласлыҡҡа, тоғролоҡҡа һәм эшкә яуаплы ҡарарға өйрәтте. Нисәмә егет-ҡыҙҙарыбыҙ үҙ уңғанлығына, яуаплылығына тейешле баһа алып, юғары урындарҙы биләй башланы. Бик ныҡ лайыҡлылары, әлбиттә. Сөнки хөкүмәт урындарында ла, башҡа яуаплы урындарҙа ла, ижади эштәрҙә лә, ғөмүмән, бар өлкәлә лә: "Президентыбыҙ кеүек эшләргә кәрәк!" - тип тотона хәҙер улар эшкә. Башҡа илдәрҙә, Рәсәй төбәктәрендә етәкселеккә ышаныһыҙлыҡ артҡан ваҡытта, Мортаза Ғөбәйҙулла улы өлгөһө беҙҙе уңғанлыҡҡа, үҙ эшеңде яратырға, үҙ булмышыңа хыянат итмәҫкә өйрәтә. Һәр матур эш, һәр өлкәләге уңыш Президент тарафынан баһаланып бара - ошонан кеше күңеле үҫә. Күңел үҫтереүсе ил уҙаманы ул, Мортаза Ғөбәйҙулла улы...

Президентыбыҙҙың бейек буйы, баһадир кәүҙәһе, олоғайған йәшендә лә матур күренеүе - ул үҙе үк милли ғорурлыҡ түгелме ни?! Башҡа етәкселәр араһында Урал тауҙарындай мөһабәт булып тороуы ғына ла бөтә республика кешеләре өсөн бер күркәм күренеш бит ул! Башҡортто донъя кимәленә күтәрә торған башлыҡтың буйын бер нисек тә башҡаса күҙаллап булмай. Оло эштә ваҡлыҡ булмай шул ул...

Ҡунаҡ ҡаршылағанда, рәхим ит, тип ҡаршылайҙар төрки халыҡтарында. Беҙҙең Президентыбыҙҙың фамилияһы Рәхимов - үҙе үк толерантлыҡ билдәһе. Ә исеме?! Президентыбыҙ тыуған осорҙа халҡыбыҙ араһында ла төрлө сит-ят исемдәр модаға инеп китә. Әммә Ғөбәйҙулла атлы ир үҙ улына башҡорттоң бик һирәк, бик матур исемен ҡуша: Мортаза! Ябай эш, ябай тормош өсөн тыумағанын һиҙеп, эпик яңғырашлы был исемде һайланы микән атай кеше?..

**Ихлас һүҙ күп булмай, тиҙәр. Тыуған көнөгөҙҙә һеҙгә ихлас ҡотлау һүҙҙәрен еткерәбеҙ, хөрмәтле Мортаза Ғөбәйҙулла улы. Халҡыбыҙҙың ошондай кимәлдәге шәхестәре бар икән, тимәк, ул яҡты яҙмышлы халыҡ. Халҡыбыҙға яҡты яҙмыш бүләк итеүсе ил уҙаманы һеҙ, Мортаза Ғөбәйҙулла улы!**

**Зөһрә БУРАҠАЕВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ИР ДАНЫ ИЛЕНӘ ҠАЙТЫР

**Гәзитебеҙ биттәрендә халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдарының береһе, донъя фәнендә күренекле шәрҡиәтсе булараҡ танылыу тапҡан Ә.-З. Вәлидиҙең исемен йыш күрергә була: беҙ уның тормош сәхифәләрен, хәтирәләрен, бөгөнгө әҫәрҙәренең хәҙер ҙә фәһемле булған өлөштәрен ҡаттан-ҡат уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итеп торабыҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы осорҙа уның яҡты исемен ҡаралатырға, изге рухына быс-раҡ ягырға ынтылыусылар ҙа табылып тора. Әммә улар - ваҡ һәм әшәке заттар нәселенән, ҡылған яманлыҡтары барыбер үҙҙәренә кире ҡайтыр.**

Ошо көндәрҙә олуғ шәхесебеҙҙең изге һәм сауаплы эштәре, халыҡтар хәтерендә ҡалған исеме онотолмауына тағы ла бер тапҡыр шаһит булдыҡ: Төрки мәҙәниәтен һәм сәнғәтен берлектә үҫтереү буйынса халыҡ-ара ойошма (ТӨРКСОЙ) 2010 йылды Әхмәтзәки Вәлиди йылы тип иғлан итте. Ошо ҡыуанысла хәбәрҙе беҙгә "Башинформ" мәғлүмәт агентлығында уҙғарылған матбуғат конференцияһы барышында ТӨРКСОЙ-ҙың генераль сәркәтибе Дюсен Касеинов еткерҙе. Ул уҙған йыл аҙағында төрки телле илдәрҙең мәҙәниәт министрҙары советы тарафынан күренекле тюрколог Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы ошондай ҡарар ҡабул ителеүе хаҡында белдерҙе.

Заманында иркен һәм азат тормоштан, үҙ аллы дәүләтселек ҡороуҙан мәхрүм ителгән Рәсәй төркиҙәренең тинһеҙ көрәшенә етәкселек иткән, һунынан Евразия һәм бөтә донъя фәнендә төрки донъяһының боронғо тарихын өр-яңынан асыуға өлгәшкән ғалимды бөгөн бар төрки халыҡтары хөрмәт итә. "Үҫеп килеүсе йәш быуынға ошо шәхестең төрки донъяһы алдындағы хеҙмәттәрен күрһәтеү - беҙҙең бурысыбыҙ", - ти ТӨРКСОЙ етәксеһе.

Ошо халыҡ-ара ойошма ағзалары булған Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Төркмәнстан, Үзбәкстан һәм Төркиә илдәрендә Ә.-З. Вәлидиҙең мираҫын өйрәнеүгә арналған ғилми-ғәмәли конференциялар, башҡа мәҙәни саралар уҙғарыу күҙаллана. Башҡортостанда шулай уҡ сит илдәрҙән килеүсе ҡунаҡтар ҡатнашлығында ошондай күркәм саралар үткәреләсәк. 2010 йылдың майында Истанбулда Башҡортостан фәне һәм мәҙәниәте көндәре уҙасаҡ. Ә.-З. Вәлиди йылы сиктәрендә Башҡортостан Хөкүмәте һәм ТӨРКСОЙ булышлығында ғалимдың тормошон һәм хеҙмәттәрен сағылдырған ҙур каталог нәшер ителәсәк. Истанбул университетында Вәлидигә бюст ҡуйыу шулай уҡ уның исемен мәңгеләштереү йәһәтенән бик урынлы буласаҡ. Былар барыһы ла ошондай олуғ шәхесте тыуҙырған Башҡортостанға ҡарата төрки донъяһында ҡыҙыҡһыныу һәм хөрмәт тойғоһо арта барыуын да күрһәтә.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

ЙЫЛ ЙОМҒАҒЫ

# ЯҠТЫ УЙҘАР МЕНӘН УҠЫ -

## яҡтыға сорналырһың...



**Көҙ буйы баш ҡалала ла, республика райондары буйлап та сабыулап йөрөп, төрлө осрашыуҙар, саралар үткәреп, гәзиткә яҙылыу кампанияһын тормошҡа ашырғандан һуң, әле бына сәйәхәттәребеҙҙә ишеткән фекерҙәрҙе бер епкә теҙеп, уңыштабыштарыбыҙҙы барлап, эшебеҙгә йомғаҡ яһап ултырыуыбыҙ. Әммә һиллек тигәне гәзитселәрҙең төшөнә генә инә торған уңайлыҡ, уны бит аяғы һәм... тынғыһыҙлығы йәшәтә, аҫырай. Бына тағы 1 февралдән 2010 йылдың икенсе ярты йыллығына үткән йылдағы хаҡтар менән гәзитебеҙгә яҙылыу башланды. Тимәк, тағы юлға...**

Юлға сығып китмәҫ, тағы ла башкөллө эшкә суммаҫ элек, ҡайһы бер йомғаҡтар менән уҡыусыларыбыҙҙы ла таныштырайыҡ әле, тинек. Был юлы ла ҡыуандырҙы уҡыусыларыбыҙ: гәзитебеҙ тиражы 800 данаға артты. Әлбиттә, тағы ла баймаҡтар алда бара - үҙҙәре генә 600-ләп дана "Киске Өфө" алдыра улар. Унан ҡала -Бөрйән, Әбйәлил, Белорет, Учалы, Сибай, Күгәрсен, Ейәнсура, Ғафури райондарында үҙ итәләр гәзитебеҙҙе. Быйыл Яңауыл, Тәтешле, Йәрмәкәй, Саҡмағош, Борай, Илеш, Бәләбәй, Бишбүләк, Дүртөйлө райондарында ла уҡыусыларыбыҙ барлыҡҡа килде. Улар күберәк башҡорт теле уҡытыусылары икәнен дә беләбеҙ, сөнки көҙөн беҙ улар менән дә осрашыуҙар үткәреп, уҡыу әсбабы урынына файҙаланырлыҡ гәзитебеҙ менән таныштырып ҡайтҡайныҡ. Рәхмәтебеҙ сикһеҙ ошондай бай матбуғат баҫмалары баҙарында тап беҙҙең "Киске Өфө" гәзитен дуҫы, кәңәшсеһе, мәғлүмәт һыуынын һандырыусы сығанағы итеп һайлаған уҡыусыларыбыҙға. Быға яуап итеп, әлбиттә, һәр уҡыусыбыҙ аҙна һайын беҙҙең йөрәк йылыһына төрөлгән гәзитебеҙ һандарын ҡулына аласаҡ. Яҡты уйҙар менән уҡығыҙ гәзитебеҙҙе - үҙегеҙ ҙә яҡтылыҡҡа сорналырһығыҙ.

**Бүләк алыу өмөтө менән квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән иң оптимист уҡыусыларыбыҙҙы ла ҡыуандырабыҙ. Был юлы бәхет йылмайғандар ошолар:**

Баймаҡ районы Ғүмәр ауылынан 7 бала тәрбиәләүсе **Әнисә һәм Марс Мырҙабаевтар** беҙҙең төп бүләгебеҙгә - **төҫлө телевизорға** лайыҡ булды. Сибай ҡалаһынан **Фирүзә Хәсәноваға** - **ДВД-плеер**, Бөрйән районы Кейекбай ауылынан **Заһира Сирбаеваға** - **кеҫә телефоны**, Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылынан **Нурия Ҡунысбаеваға** - **блендер** бүләк итәбеҙ. **Электр үтектәре** Салауат районы Мөрсәлим ауылынан Минзәлә Ҡорбанғәлиева, Хәйбулла районы Сиҙәм ауылынан Флүрә Аслаева, Дыуан районы Иҫке Хәлилдән Рәшиҙә Ғәйнуллина, Баймаҡ районы Төркмән ауылынан Мәфтүхә Әхмәтова, Ишмырҙанан Ғәтиәт Йәнбәков, Бөрйән районы Килдеғол ауылынан Сәғиҙә Иҫҡужина, Учалы районы Миндәк ауылынан Тәслимә Фәтхетдинова, Әбйәлил районы Байым ауылынан Римма Таһирова, Өфөнән Рәйсә Әсәҙуллинаға, **электр сәйнүктәр** Бөрйән районы Байназар ауылынан Зәкирә Сәғәҙиева, Баймаҡ районы Билал ауылынан Гөлдәр Әлибаева, Учалы ҡалаһынан Әнисә Ғилажева, Мәләүез ҡалаһынан Нәзифә Ильясова, Шишмә районы Түбәнге Хәжәт ауылынан Ғәлийән Төхвәтуллин, Ғафури районы Сәйетбаба ауылынан Зәйтүнә Шәмситова, Әлшәй районы Ҡармыш ауылынан Арыҫлановтар, Ейәнсура районынан "Ромашка" приюты өлөшөнә тейҙе.

**Гәзиткә яҙылыу тураһында квитанциялары беренселәрҙән булып килгән 250-ләп кешегә дини календарҙар ебәрҙек тә инде.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**"Киске Өфө"нө үҙе лә уҡып, уның халыҡты тәрбиәләүҙәге, рухын күтәреүҙәге әһәмиәтен аңлап, башҡаларға ла аңлатҡан һәм бик әүҙем таратҡан почта хеҙмәткәрҙәренең барыһына ла рәхмәтлебеҙ. Уларға шундай тәҡдим: бына 2010 йылдың икенсе яртыһына тағы ла гәзиткә яҙылыу башланды. Әйҙәгеҙ, был юлы почта хеҙмәткәрҙәре араһында ойошторайыҡ был бәйгене һәм "Киске Өфө" гәзите бүләктәрен алып ҡалайыҡ. Әлегә беҙ 60-тан ашыу "Киске Өфө" гәзитенә яҙҙырған Бөрйән районы почта хеҙмәткәре Рәмилә Вәлиеваға, Ғафури районы Сәйетбаба ауылы почта хеҙмәткәре Сания Фәттәховаға, шулай уҡ иң тынғыһыҙ почта хеҙмәткәрҙәрен туплаған коллектив - Баймаҡ почтамтына (етәксеһе Зилә Хисмәтуллина) үҙ бүләктәребеҙҙе юллайбыҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**




**Саҡмағош районы башҡорт теле уҡытыусылары.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Татарстан Республикаһы Президенты итеп һайланыуы айҡанлы Рөстәм Миңнехановҡа ҡотлау телеграммаһы ебәрҙе.

✔Ғабдрахман Ҡадиров исемендәге Өфө спорт клубынан Николай Красников менән Дмитрий Буланкин Красногорскийҙа үткән боҙҙа мотоуҙыш буйынса 32-се команда донъя чемпионатында Рәсәй йыйылма командаһы составында сығыш яһап, алтын миҙалдар яуланы. Шулай итеп, Рәсәй йыйылма командаһы 16-сы тапҡыр донъя чемпионы булды. Башҡортостан Республикаһы Президенты еңеүселәргә ҡотлау телеграммаһы ебәрҙе.

✔Быйыл "Мәғариф" милли проекты сиктәрендәге федераль грантҡа Башҡортостандың 37 уҡытыусыһы лайыҡ буласаҡ. Быйылдан башлап гранттың күләме 200 мең һумға тиклем арттырылған һәм лайыҡлыларҙың һаны ҡырҡа кәметелгән. Проектты тормошҡа ашырған тәүге дүрт йылда 1466 һәләтле педагог (шул иҫәптән 2009 йылда - 377 уҡытыусы) инновацион мәғариф программалары өсөн 100-әр мең һумлыҡ грант эйәһе булғайны.

✔Былтыр Башҡортостанда 55700 бала тыуған. Был 2008 йыл менән сағыштырғанда 1207 балаға күберәк. 2009 йылда бер йәшкә тиклемге 391 бала вафат булған (2008 йылда - 505), йәғни республикала тыуған һәр мең балаға 7 бала үлеме тура килә. Рәсәй буйынса был күрһәткес - 8,1. Былтыр Архангел һәм Федоровка райондарында бер йәшкә тиклемге бер сабый үлеме лә теркәлмәгән.

✔"Роспотребнадзор"ҙың БР буйынса идаралығы былтыр 1077 партия сифатһыҙ һәм зыянлы 6,5 тонна аҙыҡ-түлекте һатыуҙан алдырған. Улар: ҡош ите, минераль һыу, икмәк һәм кондитер әйберҙәр, ит һәм ит продукттары. Шулай уҡ ситтән индерелгән 330 литр араҡы продукцияһы ла ярамаһыҙ тип табылған. Тикшереүҙәр барышында ете млн һумлыҡ аҙыҡ-түлек булмаған сифатһыҙ тауар ҙа тартып алынған.

✔Ғинуарҙың һуңғы аҙнаһында республикала киҫкен вирус-респиратор сирҙәре менән 17729 кеше ауырыған, уларҙың 70,3 проценты - 14 йәшкә тиклемге балалар. Ауырыусылар һаны арта бара. Киҙеү эпидемия төҫөн алмаһа ла, һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәрҙәре халыҡты һаҡ булырға өндәй.

АҘНА ШАҢДАУЫ

# МӘҒӘНӘҺЕҘ ҺӘМ АЯУҺЫҘ БУНТМЫ,

## йәки Ниңә Сергей Миронов Рәсәй хөкүмәтен һәм уның башлығын тәнҡитләй?

**Тынысланған һымаҡ инек. Илдә һиллек урынлашып, бөтәһе лә алдан уҡ уйлап ҡуйылған кеүек шыма ғына бара ине. Кем ҡасан президент була, ә кем - премьер-министр, кем ҡайһы йүнәлештә эшләй, ә ҡайһы өлкәләргә бөтөнләй ҡыҫылмай, кем кемде тәнҡитләй, ә кемде маҡтай - бөтәһе лә анығ, бөтәһе лә билдәле. Илдә именлек һәм дә тыныслыҡ. Хәс тә Брежнев осороңдағы кеүегерәк. Илдә иреклек һәм дә иркенлек, ни теләйһең, шуны ҡылаһың, ҡайҙа теләйһең, шунда бараһың. Көнделе ҡырып торған ҡайһы бер айырым етешһеҙлектәр бар, әлбиттә. Уларһыҙ булмайҙыр. Мәҫәлән, ҡайһы берәүҙәргә ризыҡ етмәй, икенселәргә иһә - аҡса, өсөнсөләргә - торлаҡ, дүртенселәргә - эш, бишенселәргә - азатлыҡ... Әммә, дөйөм алғанда, илебеҙҙә тыныс һымаҡ ине...**

Тәүҙә Рәсәй Федерацияһының көнбайыштағы төбәге баш күтәрҙе. Калининград өлкәһе, йәғни. Ул субъекттың үҙенсәлеген беләһегеҙҙер, моғайын. Утрау һымаҡ ул. Бер яҡтан - Польша, икенсе яҡтан - Белоруссия, өсөнсөһөнән - Литва, дүртенсеһенән - Балтик диңгеҙе. Рәсәйҙең көнбайыштағы анклавы, тиҙәр уны. Берәүҙәр ғорурлыҡ менән әйтә. Йәнәһе, Калининград Рәсәйҙең Көнбайыш Европалағы форпосты. Яу килһә лә, ул беренселәрҙән булып ҡаршы алаҫаҡ. Яу менән күтәрелһәк тә, ул алда. Авангардта, тимәк. Әлегә "форпост"ыбыҙ һәм "авангард"ыбыҙҙың хәле бигүк шәптән түгел. Әлбиттә, Европа - барыбер Европа булып ҡала. Ундағы халыҡ "лада" һәм "калина"-ларҙы түгел, ә "мерседес"тарҙа һәм "бмв"ларҙа ғына йөрөй. Европала бит сиктәр асыҡ. Калининград халҡы шунын менән файҙаланып, ваҡытында Германиянан тотонолған "иномарка" ларҙы ташып ҡалды. Теге яҡҡа багажниктарҙа һәм бензобактарҙа арзанлы бензин ташынылар, ә унан үҙебеҙгә тағы ла арзаныраҡ "мерседес"тар ҡайтарҙылар. Йөрөлгән, таушалған булһа, ни булған? Һыҙырылғанын буярбыҙ, туҙғанын алмаштырырбыҙ. Йөрөмәгәнен йөрөтәрбеҙ. Шулайтып, үҙҙәренә бөләкәй генә "гешефт" (немец теләндә - эш, эшҡыуар) ойошторол, сағыштырмаса тыныс һәм сағыштырмаса етеш тормошта йәшәгән кешеләр нишләп баш күтәреп маташа икән һуң?

2009 йылдың ноябрендә өлкә думаһы ултырышында өлкә хөкүмәте тәҡдиме менән 2010 йылдан транспорт һалымын арттырыу буйынса ҡарар ҡабул ителә (Хәтерләйһегеҙҙер, беҙҙә Башҡортостан Хөкүмәте тырышлығы менән был һалымдың күләме элеккесә ҡалды). Калининградта иһә был һалымдың ставкаһы уртаса 25 процентҡа күтәрелә. Ә был өлкә халҡы, өҫтә әйтеп үтеүемсә, шәхси автомобилдарҙа бай. Бында миллионға (938 мең) яҡын кеше йәшәй, ә автомобилдәрҙең һаны - 350 мең тирәһе. Һис шикһеҙ, был һалымды арттырыу буйынса эш халыҡ араһында ризаһыҙлыҡ тыуҙырасағын фаразларға булыр ине. Һөҙөмтәлә 30 гинуар көндө Калининградтың үҙәк майҙандарының береһенә 10 меңдән 12 меңгә тиклем кеше йыйыла. Быға тиклем, 28 ғинуар көнө өлкә думаһы транспорт һалымы ставкаларын яңынан түбәнәйтеп, 2008 йылда ҡабул ителгән кимәлгә төшөрөп өлгөрә өлгөрөүҙән. Халыҡты ғына туктатып булмай. Бер нәмә аңлашылмай - нисек итеп иҡтисади проблемаларҙы хәл итеү йәһәтенән йыйылған митинг ҡапыл ғына сәйәси акцияға әүерелеп китә ул? Үҙәк гәзиттәрҙең ҡайһы берҙәре митинг ваҡытында яңғыраған һәм күтәрелгән лозунгларҙың ентекле исемлеген дә бирҙе. Улар араһында "Рәсәй һәм Калининград өлкәһе хөкүмәтерен - отставкаға!" тигәне лә бар! Тағы ла ғәжәпләндергәне шул: был акцияны ойоштороусылар - Коммунистар партияһы, ЛДПР һуңғы йылдарҙа митингыларға һәм башҡа сәйәси сараларға 10 мең түгел, ун кешене лә сығара алмай аптырана торғайны. Тимәк, эш кешеләрҙең сәйәси ҡараштарында ғына түгел? Тимәк, Калининград халҡы, ысынлап та, һуңғы сиккә барып еткән булып сыға? Әллә, ысынлап та, Көнбайыштан "төҫлө" революциялар ойоштороусы Джордж Соростың "оҙон ҡулы" һуҙыламы Рәсәйҙең "форпост"ына?

Александр Сергеевич Пушкиндың "Капитан ҡыҙы" тигән повесындағы "Мәғәнәһеҙ һәм аяуһыҙ урыҫ бунтын күреүҙән Аллам һаҡлаһын!" тигән фекере күптәргә таныштыр. Бәхтиһән, уның кинерәк, повестың һуңғы редакцияһына инмәгән варианты ла бар икән. Ул былайыраҡ яңғырай: "Мәғәнәһеҙ һәм аяуһыҙ урыҫ бунтын күреүҙән Аллам һаҡлаһын! Беҙҙә мөмкин булмаған түңкәрелештәр ойошторорға уйлаусылар - йә йәштәр һәм беҙҙең халыкты белмәйҙәр, йә шул хәтлем ҡаты йөрәклеләр, уларға кеше башы һуҡыр тин, үҙ муйындары ла тинлек кенә." Быныһы һүҙ араһында ғына. Ҡыҙыҡ өсөн генә. Александр Сергеевич ҡайһылай алдан күрә белеп яҙған тип әйтер өсөн генә. Калининградтағы ваҡиғалар менән бөйөк Пушкиндың һүҙҙәре бер нисек тә бәйле түгел дә баһа. Артабан бәйән итә торған хәл менән дә.

Рәсәй халҡы Калининградтағы митингыла яңғыраған ҡыйыу саҡырыуҙарҙы аңлап-баһалап тә өлгөрмәне, илебеҙҙә яңы ғауға ҡупты. Был юлы Үҙәктә. Мәскәүҙә, тимәк. Иң ҙур аудиторияһы булған телеканалда бит әле. Теләһә кем менән түгел, ә... Хәйер, әйҙәгеҙ баштан.

1 февралдән 2-һенә ҡараған төндә 1-се телеканалда журналист Владимир Познер үҙенең "Познер" тип аталған тапшырыуында (ниндәй "тыйнаҡ" атама, эйе бит?) Рәсәй Федерацияһының Федерация Советы Рәйесе Сергей Миронов менән әңгәмә ойоштора. Тапшырыу барышында Сергей Миронов былайыраҡ тип әйтә: "Мәҫәлән, 2004 йылғы һайлауҙар булғанда һәм Владимир Путин "Берҙәм Рәсәй"-ҙең лидеры булмағанда, мин, ысынлап та, Владимир Путин яҡлы булыуым хаҡында белдергәйнем. Уның тышҡы сәйәсәт һәм шул иҫәптән ҡайһы бер эске сәйәсәт буйынса ҡарарҙарын беҙҙең партия яҡлаңы. Әммә беҙ Владимир Путин индергән ҡаҙна проекты менән ҡәтғи рәүештә риза түгелбеҙ, шуға ла беҙ уға ҡаршы тауыш бирҙек. Беҙ Владимир Путин тәҡдим иткән көрсөккә ҡаршы саралар менән риза түгелбеҙ, һәм шуға ла көрсөккә ҡаршы үҙебеҙҙең планыбыҙҙы тәҡдим иттек. Шуға ла беҙ Владимир Путиндың һәр төрлө яҡлайбыҙ, тигән һүҙ - ул күптән иҫкергән мәғлүмәт. Ә инде Владимир Путин беҙҙең өсөн оппозицияла булған һәм идеология йәһәтенән ниндәйҙер шикле консерватизм аңҡып торған "Берҙәм Рәсәй" партияһын етәкләгәс, беҙҙең арала ҡапма-ҡаршылыҡтар тыуып ҡына тора". Бына һиңә - мә! Кем яуап бирә ала - был нимә? "Чапайлыҡмы"? Йәғни, "ҡылыс менән уңлы-һуллы һелтәнеүме"?

Быға тиклем Сергей Миронов, айырыуса Владимир Путин Рәсәй Президенты булған осорҙа, бөтөнләй икенсе һүҙ һөйләй ине бит. Мәҫәлән, Президент срогын ете йылға тиклем арттырыу тураһында иң тәүҙә ул тәҡдим итте, буғай. Әйткәндәй, Владимир Владимирович та Сергей Михайловичтың яҙмышында бик ҙур урын биләп тора. Мироновтың хәтирәләренә ҡарағанда, ул Путин менән 1994 йылда таныша. Тимәк, быйыл уларҙың танышлығына 16 йыл тула. Ул саҡта Владимир Владимирович Санкт-Петербургтың мэры А.А. Собчактың беренсе урынбаҫары була. Ә Сергей Миронов иһә "мәҙәни баш ҡала"быҙҙың Закондар сығарыу Йыйылышы депутаты итеп һайлана. Ошо мәлдән уның тормошо киҫкен рәүештә үҙгәрә. Быға әллә Сергей Мироновтың Һауа-десант ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеп ҡайтыуы (йәғни, көслө характерлы булыуы, ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға өйрәнеүе), әллә бер юлы биш юғары белемгә эйә булыуы, әллә илебеҙҙең Президенты менән таныш булыуы ярҙам итә инде? Ул тәүҙә Санкт-Петербургта "үҫә" - Закондар сығарыу Йыйылышы рәйесенең урынбаҫары, беренсе урынбаҫары, шунан инде рәйесе булып эшләй. 2001 йылда уны Санкт-Петербург депутаттары Совет Федерацияһында ҡаланың вәкиле итеп һайлап ҡуя. Күп ваҡыт та үтмәй, Сергей Миронов - Федерация Советының Рәйесе. Ошо вазифаны биләгәс, Сергей Михайлович Миронов Президент Владимир Владимирович Путин менән осраша. Шул саҡ Путин уның Һауа-Десант ғәскәрҙәрендә хеҙмәт иткәнен хәтерләй һәм: "Устав буйынса хеҙмәт итһән, дан үә шөһрәт яуларһың!" - тип фатиха бирә. Һүҙ юҡ, Сергей Миронов Президенттың һүҙҙәрен дөрөҫ аңлаған.

Иң ҡыҙығы - "Берҙәм Рәсәй" партияһының ҡайһы бер функционерҙарының Мироновтың һүҙҙәренә реакцияһы. Ваҡытында Башҡортостан Президентын партиянан "ҡыуып" маташҡан Исаев, Володин һәм Воробьев был юлы Мироновты Совет Федерацияһынан ҡыуып сығарырға тәҡдим итте. Улар хатта яҙмышын хәл иткән кешене тәнҡитләү - кәмендә тәртипһеҙлек һәм намыҫһыҙлыҡ тип атаны. Миронов ыжламаны ла. Күрәһең, был икеүҙең дуҫлығын ниндәйҙер белдереүҙәр менән генә боҙоп булмайҙыр.

Әллә... Миронов, ысынлап та, баш күтәрергә йыйынамы? Әллә уның менән булған ғауғаны махсус рәүештә, Калининград ваҡиғаларын ситкәрәк шылдырып, онотторо маҡсатында ҡупайттылармы?

**Таһир ИШКИНИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Февраль һәм март айҙарында Башҡортостанда "Ихата чемпиондары лигаһы. Ҡышҡы старт" Бөтә Рәсәй ярыштары үтәсәк. Уйын программаһына саңғы, туплы хоккей, тимераяҡта шыуыу, компьютер спорты, картинг һәм башҡа мауыҡтырғыс һинауҙар инған. Ул ярыштарҙа 12-16 йәшлек үҫмерҙәр ҡатнашасаҡ.

✔Былтыр көҙ республикабыҙҙан 11247 егет Рәсәй Хәрби Көстәренә хеҙмәткә оҙатылған. Республика медицина комиссияһы рәйесе Роберт Йыһангиров әйтеүенсә, барлығы 40691 егет медицина тикшереүе үткән, уларҙың 3228-е - хәрби хеҙмәткә ваҡытлыса ярамһыҙ, 320-һе - ярамһыҙ тип табылған. 2001 йылда республикабыҙҙа 46 мең саҡырылыусы иҫәпкә ҡуйылһа, быйыл уларҙың һаны 25 мең кеше тәшкил иткән.

✔8-11 февралдә Белорет районынында спорт туризмы буйынса Башҡортостандың асыҡ чемпионаты үтә. 28 февралдә Өфөнөң Конгресс-холл бинаһында заманса бейеүҙәр буйынса Башҡортостандың I чемпионаты үтәсәк.

✔Былтыр Башҡортостанда эшкәртеү тармағындағы етештереүсәнлек индексы 2008 йыл кимәленә ҡарата 94,5 процент тәшкил иткән. Тире эшкәртеү, тиренән төрлө әйберҙәр һәм аяҡ кейемдәре, транспорт саралары һәм ҡорамалдары етештереү арткан. Кризисҡа ҡарамаҫтан, яңы сәнәғәт продукцияһы төрө - күркә ите етештереү үҙләштерелгән. "Нефаз" базаһында AGCO Corporation компанияһы менән берлектә иген урыу комбайны етештереү ойошторолған.

✔Бөгөн БР Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм буйынса министрлығы республиканың Милли спорт көрәше буйынса федерация менән берлектә Башҡортостан Республикаһы Президенты кубогына милли спорт көрәше буйынса I асыҡ республика турниры үткәрә. "Динамо" стадионында үткән ярыштар Республика йылына арнала һәм унда республика ҡалалары һәм райондарынан 200-ләп көрәшсе ҡатнаша. Көрәшселәр биш ауырлыҡ категорияһында - 65, 75, 90 кг һәм 100 кг-ға тиклемге, 100 кг-дан артыҡ ауырлыҡта ярышасаҡ.

✔Һөйәҫкәрҙәрҙең Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арналған "Еңеүгә салют!" республика конкурсының икенсе этабы Бөрәлә булып үтте. Унда иң яҡшылар тип баһаланған коллективтар апрелдә Өфөлә буласаҡ гала-концертта сығыш яһаясаҡ. Был конкурс республикала ғына түгел, бөтә Рәсәй буйынса бара.

ХОККЕЙ

САЛАВАТ ЮЛАЕВ хоккейный клуб

## "САЛАУАТ ЮЛАЕВ" - БЕРЕНСЕ!

**Һуңғы ике уйынын "Салауат Юлаев" сит ҡалаларҙа үткәрҙе. Тәүҙә ул Омскиҙа "Авангард", унан Тольяттиҙа "Лада" командалары менән көс һынашты. Башҡортостан көйәрмәндәрен "Авангард"ты 3:1, ә "Лада"ны 5:2 иҫәбенә еңеүе менән ҡыуандырҙы.**

Омскиҙа командалар осрашыуҙы ярайһы уҡ көслө һөжүмдәр менән башланы. Әле бер, әле икенсе ҡапҡа алдында йыш ҡына ҡойон уйнаны. Әммә аҡрынлап юлаевсылар инициативаны үҙ ҡулына алды һәм 12-се минутта Андрей Таратухин иҫәпте асты. Ә икенсе осорҙа Константин Кольцов һуҡҡан шайбаны майҙан хужалары ҡапҡасыһы тотоп ҡала алманы. Уйындың яҙмышы өсөнсө осорҙа хәл ителде. Руслан Нуретдинов индергән гол матурлығы, кире ҡаға алмаҫлығы менән көйәрмәндәрҙе һоҡландырҙы.

Майҙан хужалары бары тик уйын тамамланып килгәндә генә бер яуап шайба индерә алды. Өфө егеттәре шулай Омскиҙан еңеү (3:1) менән ҡайтты.

* * *

Тольятти ҡалаһында майҙан хужалары юлаевсыларға әллә ни ҡаршылыҡ күрһәтә алманы. Бында иҫәпте Олег Твердовский асты. Икенсе осорҙа уҡ ҡунаҡтарҙың еңәсәге асыҡ ине инде. Үҙ ҡапҡаһына өс гол индереп, үҙҙәре бер шайба менән яуап ҡайтара алмаған майҙан хужаларының ҡунаҡтарҙы ҡыуып етә алырын бер кем дә күҙ алдына килтерә алманы.

Матч 5:2 иҫәбе менән юлаевсылар файҙаһына тамамланды.

Был юлаевсыларҙың бер ыңғайҙан етенсе еңеүе булды. Улар Санкт-Петербургтың СКА командаһын ҡыуып етеп, уҙып та китте. Хәҙер "Салауат Юлаев" 114 мәрәй менән - 1-се, ә "СКА" 113 мәрәй менән 2-се урында бара.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

МИЛЛӘТ ҠОР ЙЫЯ

# МИЛЛИЛЕГЕН ЮҒАЛТМАҺЫН КЕШЕ,

## йәки III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы тураһында



Башҡортостан Республикаһының Хөкүмәт йортонда III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын уҙғарыу буйынса ойоштороу комитетының тәүге ултырышы үтте. Ултырышта ҡатнашыусыларға Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитеты тәҡдиме буйынса III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын 2010 йылдың 11-12 июнендә уҙғарыу тураһында иғлан ителде. Хөкүмәт ҡарарына ярашлы, баш ҡалабыҙҙың "Нефтселәр" мәҙәниәт һарайында милли-мәҙәни үҙәктәр урынлаштырыласаҡ, һәм оло башҡорт форумы тап ошо бинала уҙғарыласаҡ. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитеты тарафынан III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына делегаттар һайлау һәм рәсми делегациялар составы тураһында Положение әҙерләнгән. Ҡоролтайға барлығы 771 кеше делегат итеп ебәреләсәк. Делегат мотлаҡ башҡорт милләтле булып, уға 18 йәш тулған булырға тейеш. Форумға Башҡортостан райондары һәм ҡалаларынан һәр 2 мең башҡорттан 1 делегат, Рәсәй Федерацияһы төбәктәренән 3 мең кешенән 1 делегат һайланыу ҡаралған. Делегаттар альтернатив нигеҙҙә урындағы ҡоролтайҙар ойошторған конференцияларҙа март-апрель айҙарында һайланасаҡ, кандидатуралар исемлеген 1 мартҡа тиклем индереү талап ителә. Шулай уҡ Рәсәй субъекттарынан, донъяның башҡа илдәренән ҡунаҡтар килеүе көтөлә.

11 июндә форумдың пленар ултырышы һәм секциялар эштәре, ә Конгресс-холда Йәштәр ҡоролтайы уҙасаҡ. 12 июндә йомғаҡлау ултырышында форумдың төп документтарын ҡабул итеү һәм Бөтә донъя башҡорттары (конгресы) Башҡарма комитетының яңы составын һайлау ҡаралған. Шул уҡ көндә Рәсәй төбәктәренән, сит илдәрҙән килгән делегациялар Ишембай районына барып, Торатауҙа "Ырыуҙар ташы" мемориаль комплексын асыу тантанаһында ҡатнашасаҡ.

### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Азамат ҒӘЛИН, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) Башҡарма комитеты рәйесе:**

2010 йылда Башҡортостандың үҙгәртеп ҡоролған Рәсәй составында тулы хоҡуҡлы һәм үҙ дәүләтселеге булған республика сифатында һаҡланып ҡалып, яңы сәйәси шарттарҙа йәшәй башлауына 20 йыл, беренсе Башҡорт автономияһын ойоштороусы арҙаҡлы шәхесебеҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тулыу һәм III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын уҙғарыу кеүек тарихи ваҡиғаларҙың тап килеүе осраҡлы түгелдер. Быларҙы үҙенә күрә бер тарихи билдә итеп ҡарау дөрөҫ булыр. Хәҙерге йәшәйешебеҙ, ижтимағи-сәйәси хәлебеҙ, республикабыҙҙа барған процестар нигеҙендә тарихи ваҡиғалар ята, ошо күсәгилешлек һөҙөмтәһендә Башҡортостан бөгөн бөтә донъя аренаһына сыҡты. Әйткәндәй, Төрки мәҙәниәтен һәм сәнғәтен берлектә үҫтереү буйынса халыҡ-ара ойошма (ТӨРКСОЙ) 2010 йылды Әхмәт-Зәки Вәлиди йылы тип иғлан итте. 1917-1920 йылдарҙа Ә.-З. Вәлиди һәм уның арҡаҙаштары федерализм һәм автономия өсөн тиңһеҙ көрәшкә сыҡмаһа, Башҡортостан республикаһы ла булмаҫ ине, ә үҙған быуаттың 90-сы йылдарында халҡыбыҙ улдары суверенитет лозунгыһын күтәрмәһә, бөгөн башҡорттарҙың Бөтә донъя ҡоролтайын уҙғарыу тураһында һүҙ ҙә алып бара алмаҫ инек.

Башҡорттарҙың Бөтә донъя ҡоролтайы сираттағы сараларҙың береһе генә түгел. Уның төп сәйәси маҡсаты Башҡортостандың конституцион нигеҙҙәрен нығытыуға йүнәлтелгән. Беҙ халҡыбыҙ киләсәген билдәләй торған бурыс-гәмәлдәребеҙҙе барлағанда хәҙерге халыҡ-ара процестарҙы иҫәпкә алырға тейешбеҙ. Глобалләшеү һөҙөмтәһендә айырым милли үҙелек (идентичность) бөтөнләйгә иҫәпкә алынмай башлай, атап әйткәндә, традицион милләт төшөнсәһе юҡҡа сыға бара. Һөҙөмтәлә бөтә бәйләнештәр ихтисади мөнәсәбәттәргә буйһондоролоп, халыҡтар транснациональ корпорациялар диктаты аҫтына эләгә. 90-сы йылдарҙа Рәсәйҙә таркалыу хәүефенән тап милли республикаларҙың ҡотҡарып ҡалыуын тарихсылар абруйлы ғалимдар бар. Рәсәй составында үҙ дәүләтселеге булған республикалар илебеҙҙе федератив дәүләт булараҡ нығытып тороусы ҡеүәтле көс булып торҙо. Бөгөн глобалләшеү процестары Рәсәйгә лә үтеп инә бара, һәм яңы шарттарҙа уның бөйондороҡһоҙ ил буларак үҙелек сифаттарын милли республикалар һаҡлап ҡаласаҡ.

Рәсәй властары АҠШ һәм Европа илдәренең хәрби союзы булараҡ, НАТО-ның ил сиктәрен ҡамап алыуына хәүефләнмәй ҡалмайбыт. Ҡасандыр Маргарет Тэтчерҙың: "Рәсәйҙең шул тиклем ҙур территорияны биләүе ғәҙел түгел", - тип әйткәне глобаль йоғонтоға ынтылыусы хәҙерге Көнбайыш сәйәсмәндәренең аңында юҡ, тип раҫлап буламы? Халыҡ-ара корпорациялар иң әүәл рәсәйлеләрҙе улар етештергән арзан тауарҙарҙы (шул иҫәптән, масс-медиа һәм мәҙәниәт продукцияһын) ҡулланыусылар йәмғиәте сифатында күрә. Әйҙә, тәмәке тартһындар, хәмер эсһендәр, төнгө клубтарҙа, казиноларҙа бушты-бушҡа ауҙарһындар, энергетик эсемлектәр, спайс һәм тағы әллә күпме үҙҙәре рекламалаған әйбер ҡолдарына әйләнһендәр. Көнбайыш либераль идеологияһы һәм мәҙәниәтенең рәсәйлеләр аңын томалай барыуы хәүефле түгелме ни? Үҙ булмышын, миллилеген юғалтҡан кеше Рәсәй өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер тормаясаҡ. Илде унитарлаштырырға тырышыу Рәсәй файҙаһына түгел. Ә Рәсәйҙә йәшәүсе милләттәр уртаҡ Ватаныбыҙҙың көслө һәм ҡеүәтле ил булыуын теләй. Башҡа илдәргә ҡотолғоһоҙ ихтисади һәм рухи бәйлелеккә дусар булған дәүләттә беҙгә үҙ мәҙәниәтебеҙҙе, үҙ милли булмышыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу ауырлашасаҡ. Милли республикалар Рәсәй берҙәмлеген яҡлаусы һәм һаҡлаусы көс булып ҡаласаҡ. Беҙ Рәсәй властарына ошо хәҡиҡәтте еткерергә тейешбеҙ, сөнки унитарлыҡ хөкөм һөргән дәүләттәрҙең үҙ суверенлығын һаҡлау иммунитеты кәсеҙәйә бара. III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында был хаҡта мотлаҡ фекер алышыу буласаҡ, сөнки был мөһим мәсьәләнең бер башҡорт милләтенең генә түгел, ә илебеҙҙең барса халыҡтарының мөнфәғәтенә туранан-тура ҡағылыуын онотмайыҡ.

Ҡоролтайға делегат булып һайланған милләттәштәребеҙ ошо ваҡиғаның тарихи һәм рухи асылын тәрән аңлап һәм кисереп, үҙе йәшәгән төбәк халҡының ихтыяждарын ҡоролтай аренаһына сығара алырға тейеш. Ҡоролтай делегатының төп бурысы - ҡоролтайға әүҙем әҙерләнеү, уның секциялары эшендә ҡатнашыу, ҡабул ителәсәк резолюцияға һәм башҡа документтарға тәҡдимдәр индереү, ғөмүмән, үҙен һайлаған 2000 кеше ихтыярын гәмәлгә ашырыу. Был үҙ иңенә оло яуаплылыҡ алыуға тиң, шуға күрә делегаттар араһында абруйлы, эшмәкәр, халыҡ киләсәге өсөн янып-дәртләнеп эшләргә әҙер булыусы шәхестәр күберәк булһын ине. Иң мөһиме - ошо ижтимағи-сәйәси эштән йәштәребеҙ ситтә ҡалмаҫҡа тейеш, шуның өсөн урындарҙан һайланасаҡ депутаттарҙың 30 проценты йәштәрҙән булыуы мотлаҡ. Халҡыбыҙ, Рәсәйҙә йәшәүсе барса ватандаштарыбыҙ өсөн йоғонтоло оло йыйынныбыҙҙы ойошҡан һәм юғары рухта әҙерләй һәм уҙғара алырбыҙ, тип ышаныс белдерәм.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓"Башҡортостан баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы -2010" ҡала конкурсы тамамланып килә. Быйыл конкурста 45 уҡытыусы ҡатнашты, уларҙың 26-һы - башланғыс класс һәм төрлө предмет уҡытыусылары, 19-ы - башҡорт теле һәм әҙәбиәте, татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары. 15 февралдә иң яҡшы йыл уҡытыусыһы билдәле буласаҡ.

✓Өфөлә электр транспорты тармағы хеҙмәткәрҙәренең төбәк-ара фәнни-техник конференцияһы булды. Башҡортостан троллейбус заводына 30 йыл тулыу уңайынан ойоштолған сарала Рәсәйҙең төрлө ҡалаларынан һәм Үзбәкстандан, Чехия һәм Германиянан ҡунаҡтар ҡатнашты. Башҡортостан троллейбус заводы етештергән транспорт Рәсәй баҙарында ҙур һорау менән файҙалана. Уның продукцияһы халыҡ-ара сертификатҡа эйә, техниканың заман талаптарына ярашлы булыуы патенттар һәм таныҡлыҡтар менән нығытылған.

✓Өфөлә "Алкоголизм һәм йәмғиәттең социаль-әхлаҡи ҡиммәттәре" тигән Халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция үтәсәк. Уны БР Фәндәр академияһы менән Башҡортостан урыҫтары соборы ойоштора. Конференция сиктәрендә Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда алкоголизм проблемалары тикшереләсәк, сирҙе дауалауҙың яңы алымдары тураһында һүҙ алып барыласаҡ.

✓Ҡаһирәләге Әл-Әзхар Халыҡ-ара ислам университетында бөгөн Башҡортостандан 50 студент уҡып йөрөй. Ошо көндәрҙә Башҡортостан мосолмандары диниә назараты был студенттар менән видеобәйләнеш ойоштороҙо, яңылыҡтар менән алмашты, йәштәрҙең хәлен белеште.

✓Был айҙа "Башфармация"ның 20 аптекаһына тонометрҙар ҡуйыласаҡ һәм һәр кем бында ҡан баҫымын үлсәтә аласаҡ. Бындай акция декабрь айында ла үткәйне һәм бер аҙна эсендә генә лә унда 28506 кеше белгестәрҙән ҡан баҫымын үлсәткәйне. Акция Өфөнән тыш Стәрлетамаҡ, Салауат, Сибай, Мәләүез, Нефтекама ҡалаларында ла үтә.

✓Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса Башҡортосан фәнни-тикшеренеү үҙәге белгестәре Кувейтҡа беренсе партия 500 кг бал оҙатты. Бынан тыш, был илгә бал нигеҙендә етештерелгән 25 төрлө косметик тауар ҙа ебәрелде.

*✓ Тел уҡытыуҙың маҡсаты - башҡорт телендә дөрөҫ яҙырға йәки уҡырға, һөйләшергә генә түгел, ә уҡыусыны тыуған теле менән ғорурланырға өйрәтеү, тыуған илгә хөрмәт тәрбиәләү ҙә.*



*БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШӘМ*

**Ватан, Башҡортостан, әсәй... Мәктәптә отҡан башҡортса һүҙҙәрен бала, әсәһенә ишеттерергә теләп, бер туҡтауһыҙ ҡабатлай. Унан хуплау һүҙе ишетмәгәс, үҙе һорауҙар бирә башлай. Теге йәки был һүҙҙең башҡортса тәржемәһен өйрәнергә ынтылған ҡыҙына әсә: "Мин белмәйем, иртәгә уҡытыусыңдан һорарһың", - тип, русса яуап бирә...**

# БАЛАҺЫНАН АЛДА...

## ата-әсәһе өйрәнһен тыуған телде

Ҡайһы бер ата-әсәнең балаһының тыуған телен өйрәнеүгә ынтылышын фәҡәт башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһына ғына ҡайтарып ҡалдырыуы бик үкенес. Әлеге ҡыҙыҡай кеүек, мәктәптән яңы өйрәнгән һүҙҙәре менән уртаҡлашырға ашығып, рухланып ҡайтҡан балаһын йыш ҡына өйҙә бер ауыҙ башҡортса һүҙ белмәгән атай-әсәй ҡаршы ала. Бындай ғаиләлә аралашыу ҙа руссаға ғына ҡоролған. Башҡортса телетапшырыу ҡарау, радио тыңлау, гәзит-журнал алдырып уҡыу бындай ғаиләлә ғәҙәттән тыш хәл кеүек. Уҡытыусы нисек кенә тырышмаһын, бындай мөхиттә үҫкән бала башҡортса һөйләшергә өйрәнмәйәсәк. Тел уҡытыуҙың маҡсаты - башҡорт телендә дөрөҫ яҙырға йәки уҡырға, һөйләшергә генә түгел, ә уҡыусыны тыуған теле менән ғорурланырға өйрәтеү, тыуған илгә хөрмәт тәрбиәләү ҙә. Был бурысты уҡытыусы уңышлы атҡара ла ул, тик ата-әсәләрҙең рухһыҙ булыуы, уҡытыусы менән бер төптән эш итмәүе тыуған телде өйрәнеүгә кәртә булып тора, был белем мәктәп сиктәренән ары үҫешмәй.

Тыуған телен, башҡорт халҡының данлы тарихын балаһы менән бергә өйрәнгән ата-әсәләр ҙә юҡ түгел. Яңыраҡ ҡына бер өләсәй ҡыуанысы менән уртаҡлашҡайны: балалар баҡсаһының башҡорт төркөмөнә йөрөгән ейәнсәре ата-әсәһен башҡортса өйрәтә икән. Быға тиклем тыуған теле менән ҡыҙыҡһынмаһалар ҙа, улар ҡыҙҙарының йоғонтоһона бирелеп, һүҙлектәр, Башҡортостан буйынса энциклопедик китаптар һатып ала башлаған. Тыуған телдең аралашыу ғына түгел, ә тәрбиә ҡоралы ла булыуын был йәш әсә менән атаның аңлауы маҡтауға лайыҡ.

Башланғыс синыфта уҡып йөрөгән улына уҡытыусыһы әйләнгән һайын башҡортса шиғыр ятларға биреүенә зарланды бер танышым. "Бер өндө лә дөрөҫ әйтмәгән бала нисек шиғыр ятлаһын инде?" - тип хәсрәтләнде ул. "Нәҡ шул шиғыр, тиҙәйткестәр ятлау баланың телмәрен үҫтерә лә инде", - тине мин. Минең менән килешмәне әсә, улын икенсе төркөмгә күсереүҙе яҡшыраҡ тип һananы. Өс йылдан һуң башҡорт синыфындағы балаларҙың шиғыр һөйләп, йырҙар йырлап концерт ҡуйғанын күргәс, хатаһын аңланы, етмәһә, ул балаларҙың тәрбиәлерәк, әҙәплерәк, итәғәтлерәк булыуын күреп, бик аптырағайны. Ҡала мәктәптәренең ҡайһыһына ғына барып инһәң дә, балалар өҫкә менеп килә, ә беҙҙең Мәләүездәге 9-сы башҡорт гимназияһында бөтөнләй икенсе мөхит. Уҡыусыларҙың барыһы ла сит кеше менән иҫәнләшә, үҙҙәрен әҙәпле, тотанаҡлы тота. Яҡшы тәрбиә алһын өсөн генә булһа ла балаларҙы башҡорт мәктәптәренә, үҙ тыуған мөхитенә уҡырға бирергә кәрәк, тигән фекерҙәмен мин.

Башҡорт теленең белем биреү учреждениеларында дәүләт теле булараҡ уҡытыла башлауына байтаҡ ваҡыт үтһә лә, быға ата-әсәләрҙең ҡарашы һаман төрлөсә. Башҡа милләттәрҙең башҡорт теленә кире мөнәсәбәтен аңлап булғанда ла, башҡорт кешеһенең ризаһыҙлығы бер ниндәй ҡалыпҡа ла һыймай. Тыуған телде белеү бер кемгә лә ҡамасауламай. Үҙенең телен, моңон, тарихын, йолаларын белгән бала бер ҡасан да юғалып ҡалмаясаҡ - йәш ата-әсәләр шуны аңлаһын ине. Һәр хәлдә, бындай бала икенсе милләт кешеһен тормош иптәше итеп һайламаясаҡ, һис юғында, ошо йәһәттән оторһоғоҙ. Уйланығыҙ.

**Лена АБДРАХМАНОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**




**ШУЛАЙ ИТЕП...**

"Киске Өфө" гәзите **"Башҡорт телендә һөйләшәм" тигән конкурс иғлан итте.** Конкурстың төп маҡсаты - балаларҙа, йәштәрҙә тыуған телдә матур итеп һөйләшеүгә, уйҙарынды, фекерҙәренде тейешле тәртиптә теҙеп, дөрөҫ һөйләмдәр ҡороп яҙырға өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу. Конкурс мәктәп уҡыусылары һәм студенттар араһында ойошторола. **Сарала ҡатнашыусылар беҙ биргән темаға ихлас, төплө, үҙенсәлекле фекерләүҙәр менән инша-мәҡәлә яҙа.** Беҙҙең конкурста ҡатнашыусы яҙмаһын үҙ аллы, ата-әсә йәки уҡытыусы ярҙамынан тыш башҡара - был конкурстың төп талабы. Сөнки быны тикшереү мөмкинлеге буласаҡ: иң яҡшы тип табылған эштәрҙең авторҙарын Өфөгә - "Киске Өфө" гәзите редакцияһына саҡырып, үҙ аллы яҙма эш буйынса йомғаҡлау ярышы үткәреп, еңеүсе билдәләнәсәк. Яҙмалар махсус төҙөлгән баһалама комиссияһы тарафынан тикшереләсәк. Ә конкурс һөҙөмтәләре буйынса йыл аҙағында редакция еңеүселәргә махсус бүләктәр - кеҫә телефондары тапшырасаҡ. Конкурсҡа дәртләндереүҙең башҡа төрҙәре лә булыуы ихтимал, был хаҡта беҙ аҙағыраҡ хәбәр итербеҙ. Шулай итеп, беренсе тема: **"Булыр илдең балаһы бер-береһенә "батыр" тиер, булмаҫ илдең балаһы бер-береһенә "бахыр" тиер"**. Ошо башҡорт халыҡ мәҡәлендәге аҡылдан сығып, батырлыҡ һәм бахырлыҡ тураһында уйланыуҙар, һығымталар, фекерҙәр сағылырға тейеш ҡатнашыусылар эштәрендә. Хаттар көтәбеҙ.

**Һәм тағы...**

**"Башҡорт телендә һөйләшәм" рубрикаһында үҙебеҙҙең өлкән уҡыусыларыбыҙға ла һүҙ бирергә кәрәктер, тигән фекергә килдек. Әлеге мәҡәлә авторы әйткәнсә, мәктәптә балаларҙы тыуған телгә өйрәткәнгә тиклем, уларҙың ата-әсәһенә был эштең әһәмиәтен аңлатаһы, уларҙың үҙҙәрендә тыуған телгә ҡыҙыҡһыныу уятаһы бар. Тыуған телдә һөйләшеүсенең тыуған телендә һөйләшә белмәүсегә ҡарағанда... бәхетлерәк тә, уңышлыраҡ та булыуы тураһында фекер алышайыҡ әле, хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## ЗАКОН БОҘОУ ЮҠ

**Пенсияла булһам да эшләп йөрөй инем. Ойошмала ҡыҫҡартыуҙар башланды: был исемлеккә иң тәүҙә пенсия йәшендәге хеҙмәткәрҙәр индерелде. Был дөрөҫмө?**

Бында бер ниндәй ҙә закон боҙоу юҡ. Дөрөҫөрәге, законда бындай сикләүҙәр ҡаралмаған. Штат ҡыҫҡартыуҙар процедураһы бөтәһе өсөн дә бер, ә эш, бәлки, бары шунда ғына: ҡыҫҡартыуға эләккән хеҙмәткәрҙәр был хаҡта яҙма рәүештә, ҡултамғалар ҡуйып, ике ай элек иҫкәртелергә тейеш. Шунан һуң уртаса айлыҡ эш хаҡы күләмендә пособие түләнә. Ә инде ике айҙан һуң икенсе эш таба алмаған хеҙмәткәргә тағы бер тапҡыр уртаса айлыҡ эш хаҡы түләнергә тейеш.

## ИКЕГЕҘ ҘӘ ХУЖА

**Беҙ ипотека буйынса кредитҡа бер бүлмәле фатир һатып алдыҡ. Кредит ирем исеменә яҙҙырылған. Әле килеп айырылышырға булдыҡ. Был осраҡта фатир бүлешеү ниндәй тәртиптә ҡаралған?**

Кредит ирегеҙ исемендә булыуға ҡарамаҫтан, торлаҡ, никах осоронда алынған башҡа төр мөлкәт кеүек үк, уртаҡ милек иҫәпләнә. РФ Ғаилә кодексының 34-се статьяһынан сығып, шуны әйтергә була: айырылышҡан осраҡта фатир икегеҙгә тигеҙ бүленә. Шул уҡ ваҡытта торлаҡтың әлегә банк аманатында булыуын иҫәпкә алһаҡ, был мәсьәләгә уның мөнәсәбәте лә ҙур әһәмиәткә эйә.

Бер бүлмәле булғанлыҡтан, фатирҙы бүлеүе ҡыйынлыҡ тыуҙырыр, шуға күрә һәр кем торлаҡҡа милек хоҡуғындағы өлөшөнә эйә булыр. "Ипотека тураһында"ғы Закон нигеҙендә милек өлөшө залог була алмай, шуға күрә банк кредит килешеүен үҙгәртә алмауы ихтимал һәм ирегеҙ бурыслы заемсы булып ҡаласаҡ. Ләкин ул һеҙҙән ипотека буйынса үҙ өлөшөгөҙгә ярашлы түләү хаҡын талап итеүе бар.

Айырылышырға ниәтләүегеҙҙе банкҡа алдан хәбәр итегеҙ, уның белгестәре бындай осраҡта һеҙгә мөлкәт бүлешеү һәм уның финанс-кредит эҙемтәләре тураһында эшлекле кәңәштәр бирер.

## ПАСПОРТ ЮҒАЛҺА

**Паспорт юғалғандан һуң уны яңынан алыу тәртибен аңлатһағыҙ ине?**

Паспорт алыу өсөн түбәндәге документтар талап ителә:

- ҡайҙа, ҡасан һәм ниндәй хәлдәрҙә юғалыуы хаҡында бәйән итеп, паспорттың юғалыуы хаҡында ғариза;
- 1П формаһындағы паспорт биреү хаҡында ғариза;
- тыуыу тураһында таныҡлыҡ (паспортты алмаштырған осраҡта - паспорт һәм алмаштырыу өсөн нигеҙ биреүсе документтар);
- РФ гражданлығын раҫлаусы документтар;
- паспортта тейешле билдәләр ҡуйыу өсөн кәрәкле документтар (хәрби билет, балаларҙың тыуыу таныҡлығы, никах тураһында таныҡлыҡ, никахты ғәмәлдән сығарыу хаҡында таныҡлыҡ, йәшәгән урын буйынса теркәүҙе раҫлаусы документтар).
- 35x45 мм ҙурлығында аҡ-ҡара йәки төҫлө ике фотография;
- дәүләт пошлинаһы түләү хаҡында квитанция (паспортты юғалтҡан, боҙған йәки ҡулланыуға яраҡһыҙ хәлгә килтергән өсөн - 150 һум).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

# МҮК ЕЛӘГЕ...

## яман шештән һаҡлар



**Ғалимдар мүк еләген (клюква) һаулыҡ өсөн файҙалы аҙыҡтар исемлегенә индерә.**

Мүк еләге составындағы ҙур күләмдәге антиоксиданттар организм күҙәнәктәрен иректе радикалдар зыянынан һаҡлай. АҠШ-ның Милли сәләмәтлек институты оҙайлы ваҡытта был емеште ҡулланыуҙың йөрәк, ҡатын-ҡыҙ сирҙәре һәм башҡа ауырыуҙарға ҡаршы яҡшы тәьҫир итеүен асыҡлаған. Был ваҡытта башҡа тикшеренеү үҙәктәре ғалимдары яман шеш, инсульт, мейенең ҡан әйләнеше боҙолоуы һәм вируслы инфекциялар менән көрәшеүҙә мүк еләген ҡулланыуҙың өҫтөнлөгөн асыҡларға тырышҡан.

**Тикшеренеү һөҙөмтәләре шуны күрһәткән:**

-Мүк еләге һутын ҡулланыу енси юлдар инфекцияһы барлыҡҡа килеүен һәм таралыуын булдырмай, сөнки мүк еләге һуты бактерияларға кеше күҙәнәктәрендә һаҡланып ҡалырға мөмкинлек бирмәй. Ҡатын-ҡыҙҙарға шәкәр ҡушылмаған мүк еләге һутын йышыраҡ эсергә кәрәк.

-Мүк еләгендәге проантоцианидин органик ҡушылмаһы тештәрҙе таш һәм юшҡындан таҙарта, шуға ла пародонтозды иҫкәртеү өсөн мүк еләге ҡулланыла.

-Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусыларға мүк еләге һутын бер нисә ай дауамында ҡабул итеү ашҡаҙан яман шеше йәки яҙваһы барлыҡҡа килтерә торған бактериянарҙан ҡотолорға ярҙам иткән.

-Көн һайын бер стакан мүк еләге һуты эсеү юғары тығыҙлыҡтағы липопротеиндарҙың, икенсе төрлө әйткәндә, "яҡшы" холестериндың артыуына, ә түбән тығыҙлыҡтағыларының кәмеүенә килтерә.

-Мүк еләге төрлө шештәр барлыҡҡа килеүҙе иҫкәртә.

***✓ Беҙҙең башҡорт теле шундай яғымлы һәм йомшаҡ. Уға һүгенеү һүҙҙәре көлепләшмәгән һымаҡ. Төнгө урамға сыҡһаң, был уйҙарың шунда уҡ тарала.***



ШАҢДАУ

# УРЫҪСА ҺҮГЕНЕҮГӘ...

## йәғни Һүгенгән баланың ауыҙына “һуғайыҡ”

**Яҡташыбыҙ, профессор Әхмәт ағай Сөләймәновтың "Киске Өфө" гәзитендә "Ни өсөн башҡорт кешеһе урыҫса һүгенә?" тигән һорауға яуабы миндә лә ҡыҙыҡһыныу уятты. Шуға үҙ фекерҙәремде яҙмай булдыра алманым.**

Мин Бөрйән районының Байғаҙы ауылында тыуып-үҫтем. Тиҙҙән, Алла бойорһа, 56 йәшем тула. Балалыҡ йылдарым хәтирәләргә бик бай булды. Әйткәндәй, беҙҙең ауылда бер урыҫ та йәшәмәне. Ауылдың үрге осо ла, түбәнге осо ла күренеп тора ине. Шуға күрә тотош ауыл бер ғаилә һымаҡ булды, һәр йортта кемдәр һәм нисек йәшәгәнен белеп-күреп үҫтек, тиергә мөмкин. Ауылға ситтән килеп төшкән һәр ҡунаҡ ҡәҙерле булды. Атай-әсәйҙәр ваҡ малдарының иң һимеҙен һайлай һалып һуйып, ҡунаҡ хөрмәтенә тиҙ генә оло мәжлес йыйып ебәрер ине. Әсәйем йүгергеләп йәрөп бишбармаҡ әҙерләй. Ҡунаҡтарҙың һанына ҡарап, бишбармаҡ ҡоштабаҡтарға һалына һәм өҫтөнә атай тураған ит тә өҫтәлә һәм табынға бер нисә урынға ҡуйыла. Баҙыян ағас ҡалаҡтар таратыла. Аш ваҡытында бер аҙ балбалынан да ауыҙ итәләр. Баҙыян сеүәтәләр менән ҡоротло һурпа һемерәләр. Бер-береһенә ит һоғондорошалар, йырлап-бейеп күңел асалар, йыраусының көйөн күтәрешәләр. Бер кем бер кемде һүкмәй, табын шулай матур ғына, ипле генә дауам итә.

Ниндәй эскерһеҙлек. Шул саҡтарҙы матур төш һымаҡ ҡына итеп хәтерләйем, гел һағынып иҫкә алам. Ауылда 1-2 ағай ғына ҡайһы берҙә эскән килеш күренгеләп ҡала. Улар ҙа кеше араһында һүгенеп йөрөмәне. Улар кемгәләр эш эшләп, шунан һуң ғына бер аҙ "тейәп" ҡайтып барыр булғандарҙыр инде.

1974 йылдың аҙағында район үҙәгенә һыу аша урынлашҡан Ағиҙел эшселәр ҡасабаһына килен булып төштөм. Күп тә үтмәй, мәҙәниәт йорто мөдире булып эш башланым. Был ҡасабала ситтән эшкә тип килгән һәр төрлө халыҡ йыйылғайны.Урыҫ, татар, башҡорт милләтлеләр берҙәм булып йәшәйҙәр. Төп кәсеп - урман эше: ағас ҡырҡыу һәм уны эшкәртеү. Ул йылдарҙа Бөрйән леспромхозы республика кимәлендә алдынғыларҙан һанала ине. Рус теле төрлө милләт халҡының төп аралашыу теле булды, мәктәптә лә уҡытыу шул телдә алып барылды.

Эштән һуң ир-егеттәр клубҡа бильярд, домино, шахмат уйнарға йыйыла, улар араһында эсмәгән килеш тә һөйләштәренә мәғәнәһеҙ урыҫса һүгенеү һүҙҙәре ҡыҫтырып ебәргәндәр булғылай. Минә 21-22 йәш самаһы ғына. Аптырап та, оялып та, китапханала эшләгән Роза апайға йүгереп инәм. Икәүләп сығып, теге ағайҙарға иҫкәтеү яһайбыҙ. Ысынлап та, шул иҫкәртеүҙәрҙең буйтым һөҙөмтәһе була торғайны, тип әйтә алам хәҙер.

1981 йылдан пенсияға сыҡҡансы балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләнем. Балалар менән эшләгәс, төрлө хәлдәргә тап булырға тура килә бит инде. Бәләкәстәр (күбеһенсә 2-3 йәшлектәр) бынамын тигән итеп һүгенеп тә ебәрә ҡайһы саҡ. Ата-әсәләре менән һөйләшһәң: "Эйе шул, әллә ҡайҙан ишетеп ҡайтҡан", - тип, кемделер ғәйепләп ҡуялар. Нимә генә тиһәк тә, балалар алдында был йәһәттән айырыуса һаҡ булыу фарыз шул. Сабыйҙар бит барыһын да отоп алырға ғына тора. Атай менән әсәй уларға төп үрнәк, абруй. Улар әйтә икән, тимәк, дөрөҫ, ҡабатлаһаң да ярай. Башта ҡыҙыҡ һымаҡ тойолһа ла, торабара ул һүҙҙәр баланың лексиконында тамырланып китеүе бар. Улар унын мәғәнәһенә төшөнгәс, һуң булып ҡуйыуы ла ихтимал.

Озонораҡ тәбәрәккә төшөп киттем, шикелле. Һүҙемдең һығымтаһы шул: йәштәребеҙ телмәрендә нығына бара бит ошо һүгенеү һүҙҙәре. Әлбиттә, улар төнө буйы телевизор аша "төнгө" кинолар, видеотаҫмалар ҡарай. Кәрәк икән, урам буйына сығып китеп, йәне телегән спиртлы эсемлек, һыра, самогон һатып алып эсә. Ошондай йәшәү рәүеше алып барған йәштәрҙе кем туҡтатыр? Ауыл ерендәге берҙәнбер мәҙәниәт усағының эшеме был? Әллә көн буйына балалар менән арыған уҡытыусыныҡымы?

Беҙҙең башҡорт теле шундай яғымлы һәм йомшаҡ. Уға һүгенеү һүҙҙәре көлепләшмәгән һымаҡ. Төнгө урамға сыҡһаң, был уйҙарың шунда уҡ тарала - беҙҙең телдә лә нисегерәк яңғырай әле ул һүгенеү һүҙҙәре. Кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырлаһың, тиҙәр. Беҙҙең урыҫтар ҙа, башҡорттар ҙа бер арбала хәҙер. Шулай булғас, "йырҙар" ҙа уртаҡ, күрәһең. Шул "уртаҡ йырҙар"ға ҡаршы бергәләп көрәшеү кәрәклеген иҫкәртә хөрмәтле Әхмәт ағайыбыҙ. Эйе, йәштәребеҙҙе урам йоғонтоһонан йолоп, яман ғәҙәттәрҙән арындырыу, тимәк, киләсәкте ҡотҡарыу - беҙҙең ҡулда. Битараф булмайыҡсы әле, кешеләр! Балаларыбыҙҙың, йәштәребеҙҙең һүгенеүенән башлана бит уларҙың артабанғы тәртипһеҙлектәре, алама ғәҙәттәре. Әйҙәгеҙ, фекер алышайыҡ ошо афәтте нисек туҡтатыу тураһында.

**Шәүрә СӘЛИХОВА.**
**Бөрйән районы.**



# ҠАЛЫП ИТЕКСЕГӘ ЛӘ...

## үҙебеҙгә лә хуш икән

**Редакциябыҙға Сибай ҡалаһынан, күптәнге әүҙем авторҙарыбыҙҙың береһе Рәүф ағай Бикташевтан хат килеп төштө. Ағайыбыҙҙың: "Киске Өфө"нө уҡыйбыҙ ҙа, таныштарға бирәбеҙ", - тиеүе үҙе үк күңелдәребеҙгә һары май булып яғыла. Был юлы ул Вәлиәхмәт Бәҙретдиновтың гәзитебеҙҙең 2-се һанында "Ҡалып итексегә хуш, ә ғаилә ижади ҡараш талап итә" тигән мәҡәләһен уҡығандан һуң тыуған фекер-кәңәштәре менән уртаҡлаша, тәрбиә һәм көнкүрештә башҡорт мөхитендә ҡабул ителгән ҡалыптарҙан сыҡмауҙы хуп күреүе хаҡында бәйән итә. Беҙ, журналистар, үҙебеҙҙә берҙән-бер хәҡиҡәт әйәләре, тип иҫәпләмәйбеҙ, киреһенсә, гәзитебеҙҙә баҫылған мәҡәләләребеҙ бәхәс тыуҙырһа, хатта тәнҡит ителә ҡалһа, икеләтә ризабыҙ: яҙмаларыбыҙҙың уҡыусы күңелендә фекер уятыуы үҙе үк ҡыуаныслы күренеш бит. "Сибай халҡына, Сибай ҡатындарына был гәзит аҙыраҡ "ҡалып" кейҙерһә лә, зыян итмәҫ", - тип тамамлай хатын Рәүф Бикташев. Һүҙ - уға.**

"Ҡалып итексегә хуш..." мәҡәләһе авторының ҡайһы бер фекерҙәре менән килешеп булмай. Беҙгә, мосолмандарға, ата-бабаларыбыҙ мосолманса йәшәр өсөн динебеҙҙе, йолаларыбыҙҙы, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе мираҫҡа ҡалдырған. Был - йәшәү өлгөһө, әммә ҡалып түгел. Кемдер ошоно ҡалыпҡа һанап, үҙен үтә "современный", йәғни "алдынғы һәм ирекле" тота икән, ул - боҙоҡлоҡ юлында. Барлыҡ боҙоҡлоҡ - ҡалыптан сығыу һөҙөмтәһе. "Ҡалыптан сыҡҡан бәндә!" - тип хурлайбыҙ аҙған-туҙғанды.

Ата-әсәләрҙең күптәре: "Бала үҙе теләмәгәс, уны ни эшләтәһең?" - тип, баланы үҙ яйына ҡуя. Ә ҡаты талаплы тәрбиә балаларҙың унынһында, хатта йәҙләбендә ытырғаныу уятһа ла, күбеһе өсөн зыянға түгел. Ғөмүмән, үҙе ҡушҡанды мотлаҡ үтәтергә тырышҡан ата-әсә ҡалдымы икән хәҙерге заманда? Тормошта кире күренештәр күберәк бит әле ул.

"Әгәр ғаиләлә шулай уҡ тик бер кешенең (ғәҙәттә, ир кешенең) өҫтөнлөгө хөкөм һөрһә ..." - тип яҙаһығыҙ. Атайҙар баҡсаһына таяҡ ташлайһығыҙ. Хәҙерге заманда күпме ғаиләлә ир кеше өҫтөнлөк менән файҙалана икән? Ҡырҡ йәшлектәр араһында йөҙ ғаиләнең иллеһендә ир бөтөнләй юҡ. Ни өсөн? Йә үҙ үлеме менән үлгән, йә ҡатынына ярай алмайынса, ғаиләһеҙ ҡалып, фажиғәгә тарыған, ҡайһылары хәҙерге заман һуғыштарынан тәне һәм йәне яраланып ҡайтып, һунынан өйөнән ҡыуып сығарылған, төрмәгә ебәрелгән... Йәҙәр, менәр төрлө сәбәп менән ғаиләлә ир юҡ (әлбиттә, башлыса ҡатын ғәйебе менән), булған хәлдә лә, ул "яңы атай" ролен башҡара. Балалар өсөн ошо "яңы атай"ҙар үҙҙәре ҡалыпҡа әйләнде түгелме һуң?

Ҡатыраҡ холоҡло ир заты алға ҡуйылған, атай абруйы ныҡ булған ғаиләнән боҙоҡ ҡыҙҙар, эш мәғәнәһен белмәгән улдар сыҡмай. Ир абруйы ҡатындан тора. Иренең балаһына ҡарата һәр талабына, һәр һүҙенә: "Йәҙәтмә баланы, теләге булғанда эшләр әле", - тип ҡаршы сығып торған әсә ғаилә конфликтын ҡотолғоһоҙ итә. Бороноғараҡ ирҙе ир яҡлаған, улар бер-береһен ғәйепләп тә бармаған. Ә хәҙер...

Бәҙретдинов иптәш, һеҙ ҙә "ир-атты ғәйепләүселәр" хорына ҡушылып киттегеҙ түгелме? Ниәтегеҙ изге булһа ла, һеҙ был мәҡәләгеҙ менән "аңныҙ" ҡатындар аңына: "Әһә, журналист та ир абруйын хупламай. Ирҙе өй эсендә лидер итеп ҡарарға ярамай икән. Ә мин ир ыңғайына берҙән-бер баламды тыям да торам", - тигән фекер һеңдерәһегеҙ. Әлбиттә, барыһы ла улай уйламаҫ, әммә ирен һанға һуҡмаҫҡа сәбәп эҙләгәндәр ҙә етерлек. Гәзит-журналдарҙа милләтебеҙҙең борондан килгән йолаларын пропагандалау, башҡорт ир-егеттәренең матур сифаттарын күрһәтергә тырышыу, ҡатын-ҡыҙҙың ирҙе ир итеп йәшәтә алыуҙағы яуаплылығын көсәйтеү маҡсаты алға ҡуйылһын ине. Ир-атка ихтирамлы ҡатын үҙ ғаиләһен тарҡатыуға бармаҫ, иренең дә юғалып ҡалыуына юл ҡуймаҫ. Ә хәҙерге ғаилә ҡанундарын ир-атты ситкә тибеү өсөн яҙылған, тип уйларға ерлек бар. Уларҙан иң элек башҡорт ирҙәре зыян күрә. Ир-атты хурлауҙы мәрйәләргә, Милявская кеүек урыҫ матурҡайҙарына ҡалдырайыҡ, уларға шул килешә. Бейек ағасты ел йыға, тиҙәр, ә ирҙәрҙең әҙәпле һәм эшсәнерәген хәҙерге ҡатындар батрак хәлендә генә тоторға әҙер.

Миненсә, ир балаларҙы өҫтөнлөклө хоҡуҡта тәрбиәләү кәрәк. Ҡыҙҙарҙа малайҙарға ҡарата бала саҡтан уҡ ихтирам тойғоһо, уларҙан оялыу тәрбиәләү, юл бирергә өйрәтеү дөрөҫ булыр: "Малай кеше - ир-ат затынан. Уның юлын ҡыйып үтеү - гонаһ".

"Ир хурлама - боҫторор!" тигәнде алға ҡуяйыҡ. Был ғаиләгә лә, сәйәсәт өлкәһенә лә берҙәй ҡағыла. Башҡорт ир-аты образын "батыр яугир" итеп кенә түгел, "ышанıслы, һүҙендә торосан, ҡырыҫ ҡиәфәтле, әммә тәрән киҫерешле тәбиғәт балаһы, моңло, ныҡлыш, көслө ихтыярлы, күп һөнәрле, бәһлеүән кәүҙәле һау-сәләмәт кеше" рәүешендә күҙ алдына килтерергә өйрәтәйек. Быны ошо "ҡалып"ҡа тап килерлек итеп тәрбиәләйек уларыбыҙҙы, ейәндәребеҙҙе!

**Рәүф БИКТАШЕВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

*АСЫЛЫБЫҘ - БАШҠОРТ!*

# ҺЕҘ КЕМ, КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ,

## йәки Тарихи документтар ни һөйләй?




**XIX быуаттың 30-сы йылдарындағы башҡорт хужалығы тураһындағы мәғлүмәттәр иғтибарға лайыҡ. Башҡорттар йәшәгән 19 өйәҙҙең (Хотин, Хвалын, Һарытау өйәҙҙәрендә йәшәгән һамар башҡорттарынан башҡа) 8-ендә (Бөрө, Бөгөлмә, Боғорослан, Быҙаулыҡ, Алабуға, Минзәлә, Уса, Сарапул) бар халыҡ ултыраҡ тормош алып барған, ер эшкәртеү менән шөғөлллләнгән. Был өйәҙҙәрҙә 520 башҡорт ауылы иҫәпләнгән. Тотош алғанда, бөтә өйәҙҙәрҙәге башҡорт ауылдарының 902-һендә ер эшкәртеү менән бәйле ултыраҡ тормошло хужалыҡтар өҫтөнлөк итһә, 912 ауылдың халҡы ярым күсмә тормош алып барып, мал аҫрау менән шөғөлләнгән.**

Ведомостарҙағы мәғлүмәттәр сиктәре аныҡ күрһәтелгән хужалыҡ райондарын билдәләү мөмкинлеген биреүе өсөн ҡиммәтле. Улар башҡорттарҙың һәм мишәрҙәрҙең ергә ҡарата милекселек мөнәсәбәттәрен  аныҡлау йәһәтенән дә әһәмиәтле. Ошо тарихи сығанаҡҡа ярашлы, аҫаба башҡорттар 1463 ауылда йәшәһә, 295 ауылда припущенник (килмешәк) башҡорт көн иткән. Ерһеҙ ҡалған башҡорттар припущенникҡа әйләнеп, VIII ревизия (1834 йыл) буйынса уларҙың һаны 66 меңдән артып киткән. Күреүебеҙсә,  ерһеҙ ҡалған башҡорттар туҡтауһыҙ арта барған, шулай ҙа был күренеш барса башҡорттарға ла хас булмаған. 19 өйәҙҙең 6-һында - Бөрө, Верхнеуральск, Алабуға, Уса, Сарапул, Шадринск өйәҙҙәрендә припущенник башҡорттар булмай.

Ведомостар мишәрҙәрҙең ер менән файҙаланыуы тураһындағы элекке ҡарашҡа төҙәтмә индерә. Ғилми әҙәбиәттә 1736 йылдың 11 февралендәге указдан һуң мишәрҙәрҙең аҫаба башҡорттарға ер менән файҙаланған өсөн түләүҙәрен туҡтатыуы хаҡындағы фекер киң таралған. Бындағы мәғлүмәттәр ошо ҡарашты раҫламай. Хатта XIX  быуаттың 40-сы йылдары башында ла 147 ауылдың мишәрҙәре (Бөрө өйәҙендә -71, Бәләбәйҙә - 56,  Стәрлетамаҡта - 18, Силәбелә - 2) припущенник хәлендә йәшәүен дауам итә, унан башҡа уларҙың 7 ауылы типтәр ерҙәрендә көн итә. 117 мишәр ауылы һатып алынған ер биләмәләрендә йәшәй; мишәрҙәрҙең 25 ауылы - ҡаҙна ерендә, 8  ауылы - урыҫ батшалары тарафынан бирелгән, 6-һы  башҡорт ихтилалсыларынан тартып алынған ерҙә көн итә.

Башҡорт кантон начальниктары ведомостарында һәр ауыл буйынса ике енескә ҡараған башҡорт кешеләре генә күрһәтелһә, мишәр кантондарында шулай уҡ 1834 йылға ҡарата мишәрҙәр иҫәбе теркәлгән. Типтәр ауылдары тураһында земство исправниктары тарафынан 1839-1842 йылдарҙа төҙөлгән ведомостарҙа типтәр командаларының һаны (бөтәһе 99), 1834 йылға ир енесенә ҡарағандарының иҫәбе, улар биләгән ер майҙаны һәм ошо ерҙәргә хоҡуҡтары хаҡында акттар теркәлгән. Беҙ тикшергән һәм өйрәнгән документтарҙа припущенниктар һәм типтәрҙәр хаҡында ла һүҙ барғас, ошо сословиеларҙы һәм уларҙың атамаларын билдәреүсе терминдарға ла иғтибар бүләйек.

Ҡағиҙә булараҡ, ғилми әҙәбиәттә типтәр институтының ерле сығышы тураһындағы мәсьәләне ситләтеп уҙалар. Уларҙы Башҡортостанға күсеп килгән крәҫтиәндәр менән бәйләп,  нигеҙһеҙ рәүештә крәҫтиәндәрҙең айырым социаль-этник төркөмөнә индерәләр һәм улар араһында башҡорттар булыуын инҡар итәләр. Тап шуның өсөн тарихсыларҙан һәм этнографтарҙан типтәр атамаһы һәм сословиеһының килеп сығышына һәм уларҙың этник-ара процестарҙағы роленә иғтибарлыраҡ булыу талап ителә.

Припущенник һәм типтәр институттары башҡорт йәмғиәтенең социаль-иҡтисади һәм сәйәси үҫеше һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән. Улар башҡорттарҙың үҙҙәре биләгән ерҙәргә аҫабалыҡ хоҡуғы  булыуы менән бәйле булып, Волга буйынан күскенселәр килә башлағандан байтаҡҡа алдараҡ барлыҡҡа килгән. Килмешәклек күренеше аҫабалыҡ хоҡуғы бөтөрөлөү менән юҡҡа сыға. Типтәрлектең Башҡортостандан башҡа ерҙәрҙә теркәлмәүе әлеге институттың ошо ерлектә барлыҡҡа килеүен дәлилләүсе факт булып, башҡорттарҙың урыҫ батшаларының жалованный грамоталары менән нығытылған аҫаба ерҙәренә килмешәктәрҙе индереүе (припуск) менән бәйле килеп сығыуын күрһәтеп тора. Аҫаба ырыу ерҙәренең бер өлөшө менән ирекле рәүештә эш итеү мөмкин була: уны һатыу йәиһә ҡуртымға биреү тыйылмай. Община ерҙәренә билдәле шарттарҙа ошо йәки башҡа олоҫтарҙан сыҡҡан килмешәктәрҙе индереү һөҙөмтәһендә припущенниктар сословиеһы барлыҡҡа килә.

Билдәле социаль-иҡтисади һәм сәйәси сәбәптәр арҡаһында ергә хоҡуғын юғалтҡан айырым башҡорттар ғына түгел, тотош олоҫ кешеләре припущенник булыуға дусар ителгән. Ихтилалдарҙа әүҙем ҡатнашыусылар аҫабалыҡ хоҡуғынан яҙҙырылған. Златоуст, Миәс, Һатҡы, Йүрүҙән-Ивановский һәм башҡа  заводтар тарафынан аҫаба ерҙәре тартып алынған ҡара- һәм барын-табын, һыҙғы, әйле һәм ҡыуаҡанлылырҙың бер өлөшө припущенниктар хәлендә ҡала. Оло ҡатайҙар хужалыҡ эшмәкәрлеге өсөн яраҡһыҙ булған һаҙлыҡлы һәм таулы аҫаба ерҙәрен ҡалдырып киткәс, түләүһеҙ генә Ҡатай һәм Бала-ҡатай  олоҫтарындағы  аҫаба ҡәрҙәштәре тарафынан ҡабул ителә.

Припущенник-башҡорттар төбәктең көнбайыш яғында бигерәк тә күп була. Был ярым күсмә тормош алып барыусы башҡорттарҙың ултыраҡ хәлгә күсеүе, ер эшкәртеүсе хужалыҡтар үҫеше менән дә бәйле. Ошо төбәктең башҡа халыҡтар һәм хөкүмәт тарафынан колонизацияланыуы ла ошо процестың көсәйеүенә килтерә. VIII ревизия буйынса Ырымбур губернаһының Бәләбәй, Бөгөлмә һәм Минзәлә өйәҙҙәрендә 22 595 припущенник иҫәпкә алынып, ерһеҙ ҡалған 65 мең башҡорттоң 34,2 процентын тәшкил итә.

Үҙ общиналарынан сығыусы ерһеҙ башҡорттар, түләү шартында (йылына 10-25 тин) аҫаба милләттәштәре тарафынан ҡабул ителеп, припущенниктар тип аталһа ла, ниндәй сословиеға ҡарауын (ясаҡ түләүсе, һуңынан хеҙмәти) һәм этник (башҡорт) исемен һаҡлап ҡалған. Аҫабалар припущенниктарҙы ебәрелмеш (припускать - ебәрелеү) йәки килмешәк (приходить - килеү), тип йөрөтә башлай. Припущенник булараҡ, ебәрелмеш ер менән файҙаланған өсөн аҫаба ҡәрҙәштәренә билдәләнгән кимәлдә түләү бурысын үтәһә, башҡорт булараҡ, ҡаҙна һәм үҙен ҡабул иткән община талап ителгәндә башҡарырға тейеш булған. Шулай итеп, аҫабалығын юғалтҡан һәм сит общинаның припущенниги булып киткән башҡорт  ясаҡ түләүселәр (XVI-XVIII бб.), һуңынанараҡ башҡорт хеҙмәти (1798-1865 йй.) сословиеһында иҫәптә торған.

Халыҡ колонизацияһы башланыу менән припущенниктар институты үҙ үҫешен дауам итә. Бының менән бергә припущенниктарҙың милли составы ла ҡатмарлаша бара. Башҡорт припущенниктары араһына ерһеҙ татар, мишәр, мари, мордва, удмурт һәм сыуаш крәҫтиәндәре вәкилдәре күпләп килеп инә. Үҙ общинаһынан сыҡҡан Волга буйы крәҫтиәндәре, Башҡортостанға күсеп килеп, башҡорт аҫабаларының припущенниктары булып китә. Татар припущенниктары бында үҙҙәре бер нисә сословиеға бүленә: хеҙмәти (служилое), сауҙа итеүсе, ясаҡ түләүсе, сумаҙанлы татарҙар. Мишәр припущенниктары хеҙмәти сословиеға ғына ҡарай.

Припущенниктар даирәһенән аҡрынлап типтәр сословиеһы барлыҡҡа килә. Припущенник - типтәр төшөнсәһенән киңерәк. Бөтә типтәрҙәр ҙә тиерлек припущенник булһа, припущенниктарҙың барыһы ла типтәр түгел.

XVII-XIX быуат типтәрҙәре урыҫ общиналарынан сығарылған йәки ҡыуылған кешеләрҙе (изгойҙарҙы) хәтерләтә. Изгой - ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында үҙ общинаһынан сығарылып, ясаҡ түләүҙән азат ителгән элекке смерд-общинник. Ирекҡә ебәрелгән ҡол да изгойға әйләнгән, сөнки ул үҙ мөхитенән һәм сословиеһынан сығарылған. Юридик яҡтан ирекле һаналған изгойҙарҙың үҙ аллы етештереү эшмәкәрлеге менән шөғөлләнеү өсөн бер ниндәй мөмкинлеге  булмай, һәм уларҙың феодалдарға эшләүҙән башҡа сараһы ҡалмай.

Башҡорт мөхите шарттарында көн иткән типтәрҙәрҙе лә изгойҙарға тиңләп була. Аҫабалыҡ хоҡуғынан яҙған башҡорт мохтажлыҡ арҡаһында үҙ теләге менән йәиһә мәжбүри рәүештә (тибелеп) үҙ общинаһынан да, сословиеһынан да сығарылған. Типтәрҙәрҙән айырмалы, припущенниктар үҙ сословиеһында ҡала алған. Шуға күрә типтәрлек йөкмәткеһе буйынса ижтимағи күренеш булып, уны аңлатҡан терминдың тибеү - тибелеү - типтереү - типтер - типтәр рәүешендә барлыҡҡа килеүенә ышаныуы ҡыйын түгел (бүлер - бүләр, күсер - күсәр һүҙҙәре менән сағыштырып була). Һеҙҙең иғтибарығыҙға "типтәр" терминының килеп сығышына ишара булырҙай башҡорт мәҡәлен тәҡдим итеү урынлы булыр:

Иле типкән - ир булмаҫ,<br>
Ташлап киткән - ер булмаҫ,<br>
Көтөү типкән - мал булмаҫ,<br>
Күңел типкән - йәр булмаҫ.

Шул уҡ ваҡытта әҙәбиәттә ошо атаманың фарсы телендәге "яҙыу, килешеү ҡағыҙы" мәғәнәһендәге "дәфтәр" һүҙенән килеп сығыуы хаҡында икенсе ҡараш та бар. П. И. Рычков, В. Н. Витевский, Ғ. Н. Әхмәров һәм башҡалар ошо ҡарашты раҫ, тип тапҡан. Г. Комиссаров сыуаштарҙа "типтер" һүҙенең түләнергә тейешле бурыс күләме һәм уның түләнгән өлөшө бысаҡ менән билдәләнә торған бирканы аңлатыуы тураһында яҙа. Ошо ҡарашты яҡлаусылар типтәрҙәрҙең үҙ атамаларын аҫаба башҡорттар менән килешеү шарттарын төҙөгәндән һуң ғына алыуын раҫларға тырыша. Әммә ысынбарлыҡта килмешәк-припущенниктар килешеү төҙөгәнгә тиклем дә, килешеү төҙөлгән мәлдә лә йыш ҡына типтәр, тип теркәлә алған. Билдәле лингвист Ә. Ә. Юлдашев Учалы районы типтәрҙәренең (элекке Верхнеуральск өйәҙенең бер өлөшө) көнкүрешен һәм һөйләшен өйрәнгәндә быға тәүләп иғтибар иткән. "Типтәр" терминын "дәфтәр" һүҙе менән бәйләүҙә бер ниндәй ҙә логика юҡ.

Тикшерелгән фараз тарихи ысынбарлыҡҡа тап килмәй. XIX быуат уртаһында 16 өйәҙҙә типтәрҙәр ҡарамағындағы 916 475 дисәтинә ерҙең 615 696 дисәтинәһе (64,4 %) аҫаба башҡорттарҙыҡы булып, улар менән килешеү нигеҙендә файҙаланылған. 224 902 дисәтинә ҡаҙна ере булһа ла, типтәрҙәрҙең ошо ер менән файҙаланыу тураһында айырым килешеүҙәре булмаған. Ҡалған ерҙәренең бер өлөшөн типтәрҙәр һатып алған, күпмеһелер уларға ҡасандыр урыҫ батшалары тарафынан бирелгән. Был осраҡта уларға кем менән булһа ла килешеү төҙөп, "дәфтәр"гә яҙылыуҙың бер кәрәге лә булмаған, ә улар барыбер типтәр исемен йөрөткән. Тимәк, башҡорт аҫаба биләмәләрендә, ҡаҙна һәм үҙ ерендә йәшәгән припущенниктарҙың ҙур өлөшө бер ниндәй айырмаһыҙ "типтәр" атамаһы менән нарыҡлана башлаған. Күрәһең,  хужалыҡ эшмәкәрлегенән етерлек килем алмаған припущенниктарҙың башҡорт сословиеһы мотлаҡ үтәргә тейеш булған бурысҡа көсө етмәгән. И. И. Кирилов  типтәр сословиеһы барлыҡҡа килгәнгә тиклем фәҡир припущенниктар тураһында "в казну ясаку ничего не плачивали", тип яҙа. Тәүге осорҙа типтәрҙәргә еңелерәк түләүҙәр һалынған. XVIII быуаттың 40-сы йылдарына тиклем типтәрҙәр араһында башҡорттарҙың сағыштырмаса күп булыуы ғәжәп түгел. Типтәрҙәр үтәргә тейешле бурыс-ғәмәлдәр тотороҡлана барып, ауырлаша төшкәс, башҡорт припущенниктары типтәр сословиеһына күсмәй башлай, тип әйтергә була. Шул уҡ ваҡытта типтәрҙәр составында үҙ общиналарынан сығып, элекке сословиелары менән бәйләнеше өҙөлгән татар, мари, удмурт, сыуаш күскенселәре ҡырҡа күбәйә.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**

**(Дауамы бар).**

***Хеҙмәткә һөйөү менән кешеләргә, тормошҡа һөйөү - икеһе йәнәш кенә торған төшөнсәләр. Һин әгәр ҙә тормошто, кешеләрҙе яратаһың икән, улар өсөн хеҙмәт тә итәһең.***



**Хәҙер хеҙмәткә мөнәсәбәт тамырынан үҙгәргән заманда йәшәйбеҙ. Элегерәк "намыҫлы хеҙмәт", "хеҙмәт дәрте", "хәләл ризыҡ", "тир түгеп табылған аҡса" тигән төшөнсәләр бар ине. "Биш йыллыҡтар" заманы үтеү менән был төшөнсәләр икенселәре менән алмашынды. Улар: "инвестицион күркәмлек", "кредит түләүгә һәләтлелек", "мобиллек" һ.б. Әлбиттә, бындай сифаттарҙы инҡар итеп булмай, шул уҡ ваҡытта совет осоро тип аталған дәүерҙең дә бик күп ыңғай күренештәрен оноторға ярамайҙыр, тип иҫәпләнелә. Хеҙмәтте ойоштороуҙоң һәм эшмәкәрлек итеүҙең ошондай һәм башҡа мәсьәләләре хаҡында "Салют" балалар санаторий-һауыҡтырыу үҙәге директоры Наилә УСМАНОВА менән "Ғәлиә" химик таҙартыу предприятиеһы директоры Рәйлә ФӘСХЕТДИНОВА әңгәмәләшә.**

# КУЛДАН КИЛМӘҪЛЕК

## уны эшләй алмаған

**► Хәҙерге заманда ҡыл да ҡыбырҙатмаған, арҡыры ятҡанды буй ҙа һалмаған кеше - бай, ә намыҫлы хеҙмәт иткән кеше, киреһенсә, ярлы булыуы ла бар. Шул уҡ ваҡытта фәнни-техник прогресс, яңы технологиялар, инвестициялар йәлеп итеү, баҙар иҡтисады мөмкинлектәре элеккегә ҡарағанда ун-ун биш тапҡырға күберәк килем алыу мөмкинлеге лә бирҙе. Ҡыҫҡаһы, хеҙмәттең характеры үҙгәрҙе хәҙер. Һеҙ үҙ биләмәгеҙҙә хеҙмәтте ойошторған кеше, етәксе булараҡ, хеҙмәткә мөнәсәбәттең үҙгәреүен нисегерәк баһалайһығыҙ?**

**Н. УСМАНОВА:** Беҙ ауылда тыуып үҫтек, шуға күрә сей елкәгә тейгән ауыр физик эштең ни икәнен яҡшы беләбеҙ. Әсәйҙәребеҙгә һыйыр ҙа һауыштыҡ, сөгөлдөр ҙә уташтыҡ, ауыл кешеһе башҡарған бар эште эшләнек. Сөгөлдөрҙө эрерәк үҫһә, әсәйебеҙҙең намыҫлы хеҙмәт емеше өсөн ҡыуандыҡ. Шул ваҡытта уҡ әсәйебеҙ беҙҙе: "Бына ҡул эшенең нисек ауыр икәнен күрҙегеҙ, белдегеҙ, балалар. Уҡығыҙ, уҡыһағыҙ, кеше булырһығыҙ, һәйбәт, аҡсалы эштә эшләрһегеҙ", - тип уҡырға өндәй торғайны.

Хәҙер, ысынлап та, хеҙмәттең тәбиғәте, уға ҡарата мөнәсәбәт үҙгәрҙе. Кеше хәҙер күберәк аҡылын, ихтыярын, нервыларын эшкә егергә тейеш. Барлыҡ белемеңде, тупланған тәжрибәңде, йыйған мәғлүмәтеңде бер маҡсатта, бер йүнәлештә эшләтә алһаң, бөгөн бик күп нәмәгә ирешеп була. Мәҫәлән, мин эшемдә ойоштороу һәләтемдән тыш, шәхси өлгөм менән дә хеҙмәт итергә бурыслымын. Әгәр ҙә мин илке-һалҡы ғына, сәғәткә ҡарап ҡына ултырһам, ҡул аҫтымда эшләүселәргә лә ошо ғәҙәтем күсәсәк. Ә инде ғәҙәттен холоҡҡа әйерелеүе өсөн бер аҙым ара ҡала.

Әле лә тир түгеп эшләүсе өлкәләр бар. Әйтәйек, ауыл хужалығы, төҙөлөш тармаҡтары шундайҙарға инә. Әммә ул тармаҡтарҙа ла хеҙмәтте техник яҡтан тәьмин итеүҙе камиллаштырыуға ҙур әһәмиәт бирелә, беләк көсө интеллектҡа күсә бара хәҙер. Әммә һин тир түгеп эшләйһеңме, тир түкмәйһеңме, намыҫлы хеҙмәт тигән төшөнсә әһәмиәтен юғалтмағандыр, тием. Сөнки кешенең донъяға ҡарашы үҙгәргән һайын, уның матди талаптары ла арта бит инде.

**Р. ФӘСХЕТДИНОВА:** Минең хеҙмәтләндереү-сәнәғәт тармағында эшләүемә ҡырҡ йылдан ашыу ваҡыт үтеп китте. Беҙҙең тармаҡта ҡара тир түгергә лә, берҙәй үк башыңды эшләтергә лә тура килә. Үҙебеҙҙең өлкәлә 90-сы йылдарҙа уҡ яңыса үҙгәртеп ҡороу эштәрен башламаған булһам, бөгөн мин етәкләгән "Ғәлиә" химик-таҙартыу предприятиеһы юҡҡа сыҡҡан булыр ине. Быға минең интуициям ярҙам иткәндер, тием. Элек тә, хәҙер ҙә әйтәм был турала: мин предприятиема өләсәйемдең исемен ҡушҡанмын, шуға күрә минә уның рухы ярҙам итә... Өләсәйем мине мөхәббәтле итеп тәрбиәләп үҫтерҙе. "Шул баланы иркәләп, боҙоп бөтәһегеҙ бит", - тип әйтеүселәр ҙә булған. Баҡтиһаң, яҡшылыҡтан, изгелектән, мөхәббәттән бер кем дә боҙолмай икән. Бары менән бергә минә әсәйем менән өләсәйем хеҙмәткә һөйөү ҙә тәрбиәләй алған бит. Өләсәйемдең "Кеше һинә таш менән атһа ла, һин аш менән ат", "Оятһыҙ һүҙ һөйләмә, оятһыҙ һөйләһәң, һинә теге донъяла ҡыҙған таба ялатаслар", "Ҡаратырыш бул, башлаған эшеңде ташлама" - тигән аҡыл-кәңәштәре, һабаҡтары күңелемә һеңеп ҡалды. Кешеләргә ышанысымды юғалтмауым, һәр саҡ оптимист булыуым, алдыма алған маҡсатыма ирешә белеүем минә ошо йәшемә бик күпкә өлгәшергә мөмкинлек бирҙе. Хеҙмәткә һөйөү менән кешеләргә, тормошҡа һөйөү - икеһе йәнәш кенә торған төшөнсәләр. Һин әгәр ҙә тормошто, кешеләрҙе яратаһың икән, улар өсөн хеҙмәт тә итәһең.



Шуға күрәлерме, тормошта хеҙмәттең әһәмиәте, уға мөнәсәбәт ҡырҡа үҙгәрһә лә, минең өсөн ул үҙгәрешһеҙ көйө ҡалды. Ни өсөн тигәндә, тормошобоҙҙа барған үҙгәрештәр үҙенән-үҙе минен дә ҡараштарымдың үҙгәреүен талап итеп, минән элеккегә ҡарағанда ла юғарыраҡ фиҙәкәрлек, өләсәйем әйткәнсә, ҡаратырышлыҡ талап итте. Тәүҙә арендаға күстек, аҙаҡ хосусилаштырыу, лицензиялау башланды. Бөгөн килеп, барлыҡ ҡаршылыҡтарҙы еңеп сығып, бинабыҙҙы, еребеҙҙе үҙебеҙҙеке итеүгә өлгәштек.

**► Беҙ, теләйбеҙме-юҡмы, элекке планлы иҡтисадтан яңыса эшмәкәрлек итеүгә күсәбеҙ. Икенсе төрлө әйткәндә, капиталистик хеҙмәт мөнәсәбәттәрен үҙләштерәбеҙ, йәғни план үтәмәй генә капитал туплай беләбеҙ. Тупланған капитал беҙгә киңәйергә, яңы технологиялар һатып алырға, инвестициялар йәлеп итергә, яңыса эш алымдарын үҙгәштерергә мөмкинлек бирә. Ошо юҫыҡта һеҙ етәкләгән предприятиеларҙа ниндәй үҙгәрештәр булды?**

**Р. ФӘСХЕТДИНОВА:** Минең биләмә иң башта кер йыуыу цехы ғына ине. Унда 46 кеше эшләй ине. Бер мәл беҙ клиенттарһыҙ тороп ҡалдыҡ. Ни эшләргә? Оҙаҡ уйлап торорға ваҡыт юҡ, яңы техника һатып алдыҡ та, мендәрҙәр, келәмдәр таҙарта, дөйөм ятаҡтар буйлап матрацтар йыйып, шуларҙы реставрациялай башланыҡ. Бының өсөн үҙебеҙҙең элекке СССР-ҙа эшләнгән технологияны файҙаландыҡ. Шунан әҙерәк аяҡҡа баҫтыҡ. 1997 йылда Көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү министрлығы бөтөрөлгәс, миңә Америкаға күргәҙмәгә саҡырыу килеп төштө. Рәсәйҙән барлығы 22 кеше барҙыҡ унда. Ундағы ҡоролмаларҙы күргәс, иҫ-аҡылыбыҙ ҡороно. Нисек булһа ла контракт алып ҡайтыу теләге уянды миндә, сөнки күргәҙмәлә һатып алған ҡоролмаға 25 процент ташлама яһала. Элек 8 йыл буйы химик таҙартыу цехтарында эшләп киткән кеше булараҡ, беҙҙә тиренән тегелгән кейемдәрҙе таҙартыу буйынса бер цехтың да булмауы иҫемә төштө. Италиялағы бер фирманан ҡорамал алырға контракт төҙөп ҡайттыҡ. Ҡайтҡас, аҡса эҙләргә тотондом. Бер ерҙә лә аҡса юҡ, булған ерҙә бирмәйҙәр. Элекке "Каризел", хәҙерге "Социнвестбанк" кредит бирҙе. Ҡоролманы алып ҡайттыҡ. Мәскәүҙән бер фирма хеҙмәткәрҙәре килеп уны ҡорҙо. Былар менән нимә әйтергә теләйем: эшләмәһәң - тешләмәйһең инде. Бер ваҡытта ла, бер кем дә һинең ҡулыңа килтереп тоттормай бер нәмәне лә. Барыһы ла үҙеңдән тора. Шунан һуң Мәскәүҙә һәм башҡа илдәрҙә үткән бер генә күргәҙмәне лә ҡалдырмай йөрөнөм, һәр ҡайһыһынан тиерлек ниндәйҙер яңы ҡоролма йә технология алып ҡайттыҡ. Хәҙер беҙҙә француз, ҡытай, япон, немец технологиялары бар. Ҡыҫҡаһы, беҙ ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында иң артта ҡалған тип иҫәпләнгән технологиянан замандың иң алдынғы ҡаҙаныштарына тиклем юл үттек, был өлкәлә "профессор"ға әүерелдек. Минеңсә, иң мөһиме шунда: әйтәйек, беҙҙең тармаҡта иң алдынғы таҙартыу алымдарына һәм ҡоролмаларына барып етер өсөн иң тәүҙә үҙеңдең мейеңде таҙартырға, фекерләүеңде үҙгәртергә тейешһең. Шулай итмәһәң, ярһыу заман йылғаһы хәҙер һине ҡаҡ ярына бырағытып китергә әҙер генә тора.

***Эшләмәһәң - тешләмәйһең инде. Бер ваҡытта ла, бер кем дә һинең ҡулыңа килтереп тоттормай бер нәмәне лә. Барыһы ла үҙеңдән тора. Шунан һуң Мәскәүҙә һәм башҡа илдәрҙә үткән бер генә күргәҙмәне лә ҡалдырмай йөрөнөм, һәр ҡайһыһынан тиерлек ниндәйҙер яңы ҡоролма йә технология алып ҡайттыҡ. Хәҙер беҙҙә француз, ҡытай, япон, немец технологиялары бар. Минеңсә, иң мөһиме шунда: әйтәйек, беҙҙең тармаҡта иң алдынғы таҙартыу алымдарына һәм ҡоролмаларына барып етер өсөн иң тәүҙә үҙеңдең мейеңде таҙартырға, фекерләүеңде үҙгәртергә тейешһең. Шулай итмәһәң, ярһыу заман йылғаһы хәҙер һине ҡаҡ ярына бырағытып китергә әҙер генә тора.***

**Н. УСМАНОВА:** Беҙҙең эштең үҙенсәлеге башҡасараҡ. Элек-электән шулай килде: балалар һәр ваҡыт дәүләт тарафынан ҡурсаулы булырға тейеш. Беҙҙең йәмғиәт менталитеты ла шулай формалашҡан, йәғни балаларға хөкүмәт ярҙам итергә бурыслы. Хатта балаларын үҙ аҡсаһын түләп ял иттерер мөмкинлеге булған байҙарҙа ла йәшәй был менталитет. Был сифат яңыса, заманса эшмәкәрлек итеүгә күскәндә ныҡ ҡамасаулай. Беҙҙең йыл әйләнәһенә эшләгән санаторий-һауыҡтырыу базаһы быға тиклем, асылда, Башҡортостан Республикаһы Социаль страховкалау фонды ярҙамында эшләп килде. Фонд республикабыҙҙағы предприятиелар, ойошмалар менән тығыҙ бәйләнештә эшләп, социаль һалым статьяһы буйынса беҙҙең базала балаларҙы ял иттереү өсөн путевкалар һатты. Әле килеп 2009 йылдың көҙөндә ул статья фондтан алып ташланды. Был хәл беҙҙең эштә проблемалар барлыҡҡа килтерҙе. Әле мәсьәлә ыңғай яҡҡа хәл ителеү өҫтөндә, хәл ителер ҙә. Шулай ҙа ошондай ситуация беҙгә бер хәҡиҡәтте аңларға ярҙам итте. Балаларын беҙҙә ял иттерергә теләгән бай кешеләр, аяғында ныҡлы баҫып торған бай предприятелар, ойошмалар ошо осраҡта ла иң тәүҙә дәүләттән түләнәсәк субсидиялар хаҡында белешә. Рәйлә ханымдың "үҙеңдең мейеңде таҙартырға, фекерләүеңде үҙгәртергә тейешһең", тигән һүҙҙәрен мин нәҡ ошолай аңлайым.

Ә яңы технологияларға, ысулдарға килгәндә, беҙҙең һауыҡтырыу базаһы бер туҡтауһыҙ үҙгәреп тора. Икенсенән, ниндәй генә технология булмаһын, әгәр ҙә бала күңелһеҙләнһә, һауыҡтырыуҙың һөҙөмтәлелеге кәмей. Был йәһәттән беҙ үҙебеҙҙең санаторийҙың пионер ойошмаһын барлыҡҡа килтерҙек. Галстугыбыҙ, үҙ девизыбыҙ ҙа бар. Әйткәндәй, элеккенән ҡалған был форма балалар тормошон йәнләндереүгә, төрлә яҡтан йыйылған балаларҙы дуҫлаштырыуға булышлыҡ итә. Шулай уҡ туҡланыу сифаты ла бала һаулығына ыңғай тәьҫир итә. Беҙгә килгән балалар бөтөнләй икенсе кешегә әүерелеп ҡайтып китә.

Беҙҙең балалар ғаиләлә барыбер ҙә ата-әсәнең иғтибарынан ситтә, бының өсөн атаәсәнең ваҡыты юҡ. Ана шундай балалар бында килгәс тә дөйөм иғтибар объектына әйләнә. Шуға күрә лә беҙ бында ундай балаларға ғаиләлә алып еткермәгән наҙҙы, иғтибарҙы бирергә, уларҙы тулыландырырға тырышабыҙ.

**► Һәр кеше ғүмер буйы үҙенең юғалтҡан ожмахын, йәғни бәхетен эҙләй, тиҙәр. Кешенең донъяға яралған саҡта ҡысҡырып илауы ла шул ожмахты юғалтыу һағышына бәйле. Үкенескә ҡаршы, төрлө объектив һәм субъектив сәбәптәр арҡаһында беҙ хатта балаларыбыҙҙы бәхетле баласаҡ хәтирәләренән мәх-**

✓ *Балалар санаторийы булһа ла, балаларға һатылған путевка иҫәбенә ул рентабелле йәшәргә тейеш, тип яңылышабыҙ. Әлбиттә, санаторийҙың өҫтәмә килем алыуы насар түгел.*



**рүм итәбеҙ. Әйтәйек, һеҙ етәкләгән "Салют" балалар санаторийы нигеҙендә беҙ балаларыбыҙға шундай хәтирәләрҙе бүләк итеүсе "Дисней ленд" төҙөй алмайбыҙмы? Ул бер үк ваҡытта әкиәт илен дә, мөғжизәләр, серҙәр һарайын да хәтерләтһен, унда башҡорт милли традициялары нигеҙендәге бүлектәр ҙә булһын, һ.б. Бының өсөн нимә талап ителә, тип уйлайһығыҙ?**

**Р. ФӘСХЕТДИНОВА:** Ҡулдан килмәслек эштәр булмай, уларҙы эшләй алмаған кешеләр генә була, тиҙәр. Мин практик булараҡ, бындай эште тик ҙур суммалағы сығымдар түгеп кенә атҡарып сығып булалыр, тип уйлайым. "Дисней ленд"тыҡы кеүек ҡоролмаларҙы, ундай технологияны тик һатып алып ҡына була.

# ЭШ БУЛМАЙ,

## кешеләр генә була...

**Н. УСМАНОВА:** Был - беҙҙең хыял. Беренсенән, Өфө шаулап торған мегаполис һәм унан саҡ ҡына ситкә тайпылһаң, ҙур йылға ярындағы урман араһындағы сәхрәлеккә - ожмахҡа барып юлыңғаһың. Аҡса булып, ошо урынды балалар өсөн әкиәт илендәй итергә ине, тип әйтеп алам йыш ҡына. Бала кеше шунда барып, бер мәртәбә генә ял итеүҙе бала сағының иң бәхетле мәлдәренә тиңләһен ине. Әлеге иҫке бараҡтар урынына үҙебеҙҙең милли архитектура стилендә биналар төҙөһәң ине, йылғаға төшкән юлда бәләкәй генә ағас өйҙәр, улар араһында йәйәү һәм атта йөрөй торған теренкурҙар булһын ине, ағас өйҙәрҙә атай-әсәйҙәр балалары менән килеп ял итһен ине, Ҡариҙелгә барып төшкән ерҙә шундай матур пляж булһын ине, иң мөһиме, баланың аҡылын, тойғоһон ижади яҡтан камиллаштырыу өсөн саралар комплексы булһын ине, тием. Былар барыһы ла беҙҙең ҡулдан килә торған эш. Әлбиттә, беҙҙә ошо хыялдарҙан саҡ ҡына ҡайтышыраҡ реконструкция планы ла бар.

Бар донъя практикаһы шуны күрһәтә: балалар иҫәбенә йәшәргә ярамай. Беҙ иһә, балалар санаторийы булһа ла, балаларға һатылған путевка иҫәбенә ул рентабелле йәшәргә тейеш, тип яңылышабыҙ. Әлбиттә, санаторийҙың өҫтәмә килем алыуы насар түгел, әммә был өлөш, минеңсә, санаторий базаһын яңыртыу өсөн ҡулланылырға тейештер.

▶ **Ҡыҙ-ҡатын үҙенең тәғәйенләнеше буйынса һаулығы еткәнсе бала табырға, үҙенең балаларын, ейән-ейәнсәрҙәрен тәрбиәләп, йорт усағын һаҡлап ултырырға тейеш. Һеҙ ҙә хәҙер өләсәй-картәсәй булып, ейән-ейәнсәрҙәрегеҙгә әкиәт һөйләп, уларҙы бәпләп ултырыр йәшкә еткәнһегеҙ, ә тормош, заман һеҙҙе ана ниндәй хәстәрҙәр менән йәшәргә мәжбүр итә. Ошо мәсьәләгә нисек ҡарайһығыҙ?**

**Р. ФӘСХЕТДИНОВА:** Был хәл совет осоронан башланды. Дөрөҫөн әйткәндә, ул осор тәғлимәте ҡыҙ-ҡатынды үҙ ғаиләһенән һыуындырҙы. Ирҙәр менән тигеҙ хоҡуҡ алыу, бәлки, дөрөҫ тә булғандыр, әммә тап шул осорҙа ирҙәрҙең роле бөтөүен, абруйы түбән төшөүен бер нәмә менән дә аҡлап булмай. Беҙҙең хоҡуҡтарҙы ирҙәрҙеке менән тигеҙләгәнсе, уларҙың абруйын күтәрә торған саралар кәрәк булғандыр. Ни өсөн тигәндә, ҡыҙ-ҡатын тәбиғәте уны былай ҙа һаҡлай һәм яҡлай, уларҙың структураһы башҡаса. Шулай итеп, ҡыҙ-ҡатындарҙың хоҡуғын ирҙәрҙеке менән тиңләү ир-атта ҡатынына һалынып йәшәү синдромын да барлыҡҡа килтерҙе. Таяҡтың ике башы була, тиҙәр бындай осраҡта.

**Н. УСМАНОВА:** Әлбиттә, ирҙәр ғаиләлә һәм йәмғиәттә юлбашсы, лидер булырға тейеш. Ундай ирҙәр, ундай ғаиләләр бик күп, һәм улар буласаҡ. Әммә йәшәгән заманыбыҙға, объектив һәм субъектив сәбәптәр, шарттар арҡаһында ҡыҙ-ҡатын лидер булып китә икән, был хәлгә лә тәбиғи итеп ҡарарға кәрәктер, тием. Сөнки тормош тәжрибәһе шуны күрһәтә: ир кеше тормош дилбегәһен ҡулынан ысҡындырыуы була, уны шундуҡ нәфис зат эләктереп ала, бынbackьһы инде диалектика ҡануны.

Бар нәмә ғаиләлә башлана. Үҙ ғаиләһендә баш була алмаған ир кеше эш урынында аҡыллы етәксе була алырына мин, мәҫәлән, шикләнеп ҡарайым. Лидер ғаиләлә тәрбиәләнә. Мәҫәлән, һәр саҡ әпәүләп тәрбиәләнгән малайҙан етәксе сыҡмайҙыр. Беҙ балаларыбыҙҙа күберәк үҙаллылыҡ тәрбиәләргә тейешбеҙҙәр. Тик үҙаллы булған кеше генә көслө була ала.

*Өфө шаулап торған мегаполис һәм унан саҡ ҡына ситкә тайпылһаң, ҙур йылға ярындағы урман араһындағы сәхрәлеккә - ожмахҡа барып юлығаһың. Аҡса булып, ошо урынды балалар өсөн әкиәт илендәй итергә ине, тип әйтеп алам йыш ҡына. Бала кеше шунда барып, бер мәртәбә генә ял итеүҙе бала сағының иң бәхетле мәлдәренә тиңләһен ине. Әлеге иҫке бараҡтар урынына үҙебеҙҙең милли архитектура стилендә биналар төҙөһәң ине, йылғаға төшкән юлда бәләкәй генә ағас өйҙәр, улар араһында йәйәү һәм атта йөрөй торған теренкурҙар булһын ине, ағас өйҙәрҙә атай-әсәйҙәр балалары менән килеп ял итһен ине, Ҡариҙелгә барып төшкән ерҙә шундай матур пляж булһын ине, иң мөһиме, баланың аҡылын, тойғоһон ижади яҡтан камиллаштырыу өсөн саралар комплексы булһын ине, тием. Былар барыһы ла беҙҙең ҡулдан килә торған эш.*

**Р. ФӘСХЕТДИНОВА:** Шулай шул: үҙебеҙ ҡыйынлыҡ аша үткәс, уларҙың тормошон әҙерәк еңеләйтергә тырышабыҙ ҙа, бөтөнләй эште боҙоп ҡуябыҙ.

▶ **Һуңғы ваҡытта "көрсөк" һүҙе иң күп ҡабатланып торған брендка әүерелде. Күп кенә етәкселәр үҙ ҡулы аҫтында эшләүселәргә эш хаҡы түләмәҫ өсөн, эшселәрен ҡыҫҡартыр өсөн дә ҡуллана был брендты. Үҙ биләмәгеҙҙә етәксе буларак, бөтә донъя көрсөгөнә мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

**Р. ФӘСХЕТДИНОВА:** Һуңғы ун йыл эсендә предприятиелар етәкселәренә эшләүе бик ауырлашты. Бар ерҙә лә эш урындары ҡыҫҡартылһа ла, эшләрлек кеше табып булмай. Бәхетиһәң, һуңғы бер нисә быуын балаларын эшкә өйрәтмәгәнбеҙ икән. Үҙҙәренең бер ниндәй һөнәре юҡ, киләләр ҙә ҙур аҡса талап итәләр. Хатта кисә генә махсус уҡыу йортон тамамлаусылар ҙа килә беҙгә. Уларҙың амбициялары, талаптары, аппетиттары иҫ киткес ҙур. Эшкә урынлашалар ҙа, шундуҡ эштән китеү тураһында ғариза яҙалар. Бәхетиһәң, ундайҙарға 2-3 ай буйына пособие түләнә, шуны алып йәшәп торалар ҙа, тағы ла яңы эш урыны эҙләп китәләр. Артабан был хәл тағы ла ҡабатлана. Был беҙҙә генә түгел, бөтә ил буйынса шул уҡ хәл. Шуға күрә аҙаҡҡы 3-4 йылда беҙҙең предприятие тик өлкән йәштәге эшселәр иҫәбенә эшләп килә.



**Н. УСМАНОВА:** "Мине эшкә алмаһағыҙ ҙа була, ғаризама билдә генә ҡуйһағыҙ", - тип киләләр беҙгә лә. Иҡтисади көрсөккә килгәндә, ун йыл элек беҙҙә уртаса эш хаҡы нисек булғанда ла, хәҙер күпме, сағыштырырлыҡ түгел. Беҙҙә иһә, минең ҡарашса, көрсөк юҡ, бары закондар ғына эшләмәй, булғандары ла камил түгел. Закондарҙың эшләмәүе хаосҡа килтерә. Бер туҡтауһыҙ үҙгәрә закондар, уларға индерелгән өҫтәмәләрҙе, төҙәтмәләрҙе өйрәнеп тә өлгөрмәйһең, бөтөнләй башҡаһы барлыҡҡа килә. Минеңсә, закон булғас, ул кәмендә 30-40 йыл эшләргә тейеш. Закондар беҙҙә депутаттарҙың кәйефенә ҡарап, үҙгәреп тик тора. Ул үҙгәрештәргә ҡарап, иң аҡыллы етәксе лә кәрәк мәлдә тейешле саралар күреп өлгөрмәй. Закондарҙан, уларҙың камил булмауынан киләләр тип уйлайым көрсөгө лә.

**Р. ФӘСХЕТДИНОВА:** Беҙҙә, мәҫәлән, нигеҙе бармы-юҡмы, йылына 4-5 тапҡыр газға, йылыға, һыуға хаҡ күтәрелә. Ишетеүебеҙсә, беҙҙә газ, һыу, йылылыҡ менән тәьмин итеүселәрҙең эш хаҡы ла бик юғары. Шундай һорау тыуа: тик уларҙың эш хаҡын күтәреү өсөн генә хаҡтар күтәреләме? Ә беҙ иһә, көнкүреш хеҙмәте өсөн хаҡтарҙы күтәрә алмайбыҙ. Монополияға ҡаршы комитет ҡайҙа ҡарайҙыр инде?

**Н. УСМАНОВА:** Хәҙер уҡыған, махсус белеме булған кешенең ҡәҙере, баһаһы юҡ. Уҡытыусылар, табиптар, фән кандидаттары, докторҙары йән аҫрарлыҡ ҡына хеҙмәт хаҡы ала. Ә кем күберәк ала? Әлбиттә, йылғырҙар, заманса итеп әйткәндә, ҡыл да ҡыбырҙатмайынса, мутлыҡ юлы менән байығыусы "продвинутыйҙар". Беҙҙә хеҙмәт хаҡын билдәләү системаһы бөтөнләй дөрөҫ түгел. Ҡайһылыр урында дилбегә ҡулдан ысҡынды ла, уны йылғырҙар эләктереп өлгөрҙө һәм улар үҙҙәренә яраҡлы закондар сығарта башланы. Закондарҙың көн һайын үҙгәреп тороуы ла ошонан киләләр ул.

▶ **2010 йыл Рәсәй Федерацияһы буйынса - Уҡытыусылар, Башҡортостан Республикаһы буйынса Республика йылы. Быйыл беҙҙә III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, Рәсәй Федерацияһы буйынса халыҡтың иҫәбен алыу сараһы уҙасаҡ. Беҙ ҡайҙа ғына, кем генә булып эшләһәк тә, барыбер ҙә үҙебеҙҙең республикабыҙ, милләтебеҙ өсөн иң беренсе нәүбәттә энтузиазм менән эшләргә бурыслыбыҙ. Милләтте, республиканы һаҡлаған, яҡлаған өсөн, тип эшләһәк, һәр ҡайһыбыҙҙа ошондай аңлау йәшәһә, барлыҡ маҡсаттарыбыҙға өлгәшер инек, тип уйланыла. Шулай түгелме?**

**Н. УСМАНОВА:** Ысынлап та, беҙгә ҡайһылыр урында, ниндәйҙер хеҙмәтебеҙ өсөн түләп еткермәүҙәре мөмкин. Ләкин беҙ үҙебеҙҙе республиканың төп хужалары итеп тойоп, һәр эшебеҙҙе республикабыҙ, милләтебеҙ өсөн башҡарырға тейешбеҙ. Хеҙмәт урынында ғына түгел, үҙ ғаиләңде ҡарау ҙа, балаларыңа дөрөҫ тәрбиә биреү ҙә шул маҡсатта башҡарыла бит. Сөнки балаһыҙ ғаилә, ғаиләһеҙ - милләт, милләтһеҙ - дәүләт, дәүләтһеҙ республика, ил юҡ бит. Беҙгә бит Башҡортостанды һаҡларға кәрәк, уны һаҡлаған өсөн кемдәндер аҡса талап итә алмайбыҙ бит. Был - йөрәк эше.

**Р. ФӘСХЕТДИНОВА:** Беҙҙең предприятие баш ҡалабыҙҙың көньяғын хеҙмәтләндерә. Уның урынын ҡулға төшөрөргә теләүселәр Канар утрауҙарында йорт һатып алып, ғүмеремдең аҙағынаса байҙамайҙа йөҙөп йәшәргә етерлек аҡса ла тәҡдим итеп ҡараны. Риза булманым. Ни өсөн тигәндә, был химик таҙартыу предприятиеһы баш ҡалам халҡына, милләтемә, республикама кәрәк. Донъяла аҡса менән иҫәпләп булмай торған төшөнсәләр, ҡиммәттәр барлығын да беләм. Мин бында эш ала алмаһам да, эшләй алам. Әле килеп беҙҙең махсус цех өсөн төҙөлгән котельныйҙы һүтергә теләйҙәр. Тоттом да, Президентыбыҙға хат яҙҙым. Уның күрһәтмәһе буйынса тағы ла йөҙ метр зонаға проект эшләнек. Йырып сығып барабыҙ...

▶ **Әйткәндәй, беҙ ана шундай ғәҙелһеҙлеккә осрағанда, иң ауыр мәлебеҙҙә яҡлау эҙләп, республикабыҙ етәксеһенә - Президентыбыҙ Мортаза Рәхимовҡа мөрәжәғәт итәбеҙ. Сөнки уның, республикабыҙҙы үҫтереү, яҡлау һәм һаҡлау буйынса энтузиазм менән янған ил ағаһының, иң ауыр мәлдә беҙҙә ярҙамға килеренә ышанабыҙ. Уңайҙан файҙаланып, уны тыуған көнө менән ҡотлай алаһығыҙ.**

**Н. УСМАНОВА:** Мортаза Ғөбәйҙулла улы республикабыҙ менән етәкселек итә башлаған осорҙа тыуған балалар бөгөн үҫеп етеп, оло тормош юлына баҫа. Уларҙы тәрбиәләүгә күп көс һалған хөрмәтле Мортаза Ғөбәйҙулла улының исеме күңелдәрендә алтын хәрефтәр менән яҙылып ҡаласаҡ. Беҙ, "Салют" балалар санаторий-һауыҡтырыу үҙәге хеҙмәткәрҙәре, үҙебеҙҙә ял итеүсе меңәрләгән балалар һәм уларҙың ата-әсәләре исеменән хөрмәтле Президентыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлайбыҙ, ныҡлы һаулыҡ һәм республикабыҙ өсөн башҡарған фиҙаҡәр хеҙмәтенең оҙон-оҙаҡ йылдар буйы әһәмиәте юғалмауын, дауам иттереләүен теләйбеҙ!

**Р. ФӘСХЕТДИНОВА:** Мортаза Ғөбәйҙулла улының: "Эшләргә кәрәк!" - тигән бик ҡыҫҡа һәм үтә аңлайышлы бер һүҙе бар. Үҙ эшен асырға теләүселәр, ғөмүмән, хеҙмәт кешеһе өсөн үтә иғтибарлы беҙҙең Президент. Аллаһы Тәғәлә уға һаулыҡ бирһен һәм халҡыбыҙға, республикабыҙға һәм илебеҙгә оҙон-оҙаҡ йылдар хеҙмәт итеүен теләйем!

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Әллә һәр саҡ янымда йөрөткән гастрофармдың берәй таблеткаһын эсергәме, тип уйлаған мин дарыу тураһында йәнә оноттом. Ғәжәп, дарыуһыҙ һис тә тынысланмай торғайны бит бығаса минең ашҡаҙан...***




**Булмағанды бар тип яҙған өсөн Аллаһы сөбхана үә Тәғәлә алдында тәүбә итәм. Шул уҡ ваҡытта хәҙистәрҙең береһендә "Яҡшылыҡ өсөн алдаған кеше алдаҡсы булмай", тип тә яҙылған.**

**Автор.**

- Ни өсөн улай ваҡытһыҙ отпуск алырға булдың? - тине дуҫым невропатолог Миңлеғәле Ишбулатович. - Йәй айҙарында ял итеү күңеллерәк түгелме?

- Яҙ етһә, ашҡаҙан язваһы йонсота, - тинем дә, тәмәкемде ҡабыҙып, ординаторскийҙың креслоһына аяҡтарымды һуҙып ултырып алдым. - Үҙең дә беләһең бит инде, ҡайҙа ғына дауаланып ҡараманым. Хатта Мәскәүгә лә ҡалдырманым. Операция яһатҡы килмәй. Ашҡаҙандың өстөн бер өлөшөн киҫеп алып ташлаясаҡтар бит. Әллә, мәйтәм... - мин тәмәкемдең көлөн пепельницаға төшөрөп, Миңлеғәле Ишбулатовичҡа ҡараным. Нимә әйтер икән, тигәндәй, ул да миңә ҡыҙыҡһыныулы иғтибарын йүнәлтте:

- Нимә? - тине әлегә бер ни ҙә аңламаған дуҫым.

- Мәйтәм, әллә ошо арала отпуск алып, берәй яҡшы имсе табып, шунда дауаланып ҡарайыммы икән?

- Тартыуыңды ташла, дуҫҡай, - тип, Миңлеғәле ҡул сәғәтенә ҡарап алды. Унан аҡ халатын сисеп, шифоньерға элеп, кейенә башланы.

- Күпме мәртәбә ташлап ҡараным инде - булмай...

- Ә һин теге Шәһит бабай тураһында ишеткәнең бармы? - тине инде кейенеп алған Миңлеғәле сығыу яғына ҡарай ыңғайлап. - Шуға күренеп ҡара, тәмәкеңде лә ташлатыр, язваңды ла бөтөрөр...

Дуҫымдың ярым шаяртып әйтеүен нисектер етди кәңәш итеп ҡабул итеүемә үҙем дә ғәжәпләндем. Шәһит бабай тураһында, ысынлап та, һуңғы ун-ун биш йылдар тирәһе төрлө легендалар йөрөй. Ашҡаҙандың сей яраһын ғына түгел, хатта ҡуянсыҡ сирен дә бик уңышлы дауалай, тип һөйләйҙәр уның тураһында. Тирә-яҡ райондарҙан ярҙам һорап килгән кешеләр уның йортонан өҙөлмәй, тиҙәр. Ҡасандыр йәш сағында үҙе лә ҡуянсыҡ сире менән хафаланған Шәһит бабайҙы ни өсөндөр "Шүлгән бабай" тип тә йөрөтәләр...

Отпускымдың өсөнсө көнөндә үк машинама етерлек яғыулыҡ ҡойоп алдым да, кәрәгенсә әҙерләнеп, утыҙ биш саҡырымда ятҡан Күлйорт ауылына юлға сыҡтым. Юлда тирә-яҡ тәбиғәт күренештәрен байҡай-байҡай барҙым. Шундай матур урман-тауҙар араһында әҙәм балаһының ҡулы тейгән урындар әллә ҡайҙан күренеп ята. Ул ҙур-ҙур майҙанлап киҫелгән ҡарағай урманы, йәиһә, урын-урыны менән аҡтарылып, мәңге уңалмаҫ сей яраны хәтерләткән тау биттәре. Тауҙы аҡтарып ниҙәр эҙләгәндәрҙер инде? Ана, алыҫта Биләрит заводтарының нисәмә тиҫтәләгән йылдар инде ҡуйы ҡара төтөн сығарып ултырған торбалары күренде. Елһеҙ көн булғанға, күрәһең, әллә нисә торбанан сыҡҡан төтөн бергә ойошоп, ҡәҙимге бер болот барлыҡҡа килтергән. Кешеләрҙең үҙҙәренә, уларҙың киләсәк быуынына ҙур зыянлы төтөн болото. Әҙәм балаһы йыһанды үҙләштерә, океан төбөнә төшә, ҡатмарлы компьютер системалары яһай. Ә шул тирә-яҡ мөхиткә сығарып ташлана торған төтөндө берәй нисек зарарһыҙландырыу ысулын таба алмаймы икән? Төтөн тигәндәй, организмға шулай уҡ зарарлы булған тәмәкемде ҡабыҙҙым. Бына бит, үҙенә-үҙе зыян итә торған күпме нәмә уйлап сығарған әҙәм балаһы!

Стратегик ракета частарының береһендә хеҙмәт иткән сағымды иҫләнем. Шыйыҡ яғыулыҡлы ракета боеголовкаларын "заправлять" иткәндә, табип булараҡ, һәр саҡ ҡатнаша торғайным. Танауҙы, күҙҙәрҙе әсетерлек гептил еҫе һаман да хәтеремдә... Хатта, эш ваҡытында, ОЗК-һы (общевойсковой защитный костюм) тишек булыу сәбәпле, бер офицер ағыуланып та үлгәйне. "Головастиктарҙың" (ракетаның баш яғы - боеголовкаға яғыулыҡ ҡойоусы) ғүмере ҡыҫҡа була, тиҙәр ине шул. Ул саҡтағы офицерҙарҙың күптәре был донъяла юҡ инде. 50-60 йәштәр самаһында йә ҡан ауырыуы, йә икенсе берәй төрлө сир менән харап булалар. Әгәр ҡайһы бер офицерҙарҙың яҙмышы ундабында ишетелеп торһа, үкенескә ҡаршы, илебеҙҙең төрлө төбәктәренән килгән меңәрләгән ябай һалдаттарҙың артабан нисек көн итеүен белеү мөмкин түгел. Ике йыл хеҙмәт иткәс, уларҙың һәр ҡайһыһы тыуған яғына ҡайтып китә. Әлбиттә, "головастик" һалдаттарҙың һаулығына гептил үҙенең эҙен ҡалдырғандыр инде. Кем белә, минең сей ярам да, бәлки, шуның касафатылыр.

Шулай уйлана-уйлана килә торғас, Күлйорт ауылы күренде. Ҡайын ҡатыш ҡуйы ҡарағай урманлы тауҙар араһында ятҡан был ауыл әллә ни ҙур ҙа түгел. Ауылдың гел иҫкерәк йорттарҙан ғына торғанлығына ҡарап, бында күбеһенсә ҡарттар йәшәйҙәр, тигән уйға киләһең. Көйәнтәләп һыу алып ҡайтып килгән бер әбейҙән Шәһит бабайҙың өйөн һорашып алдым.

- Шүлгән бабай ныҡ ҡартайған бит инде, улым, - тине әбей һыу тулы биҙрәләрен ергә ҡуйып, - хәҙер ауырыуҙарҙы әллә ни ҡабул итмәй ул. Әллә, улым, барып ҡара...

Бабай өйҙә ине. Бөхтә итеп келәмдәр, төрлө төҫтәге матур-матур ҡорамаларҙан тегелгән буй юрғандар йәйелгән урындыҡта өйлә намаҙы уҡый. Уны ваҡытһыҙ бимазалауыма уңайһыҙланып, ҡабаттан тышҡа сығып торорға булдым. Эскәмйәлә тәмәкемде көйрәтеп бөтөүемә, бик оло булыуына ҡарамаҫтан, еңел генә атлап, Шәһит бабай үҙе үк килеп сыҡты.

- Һай, улым, торбаң яман икән, - тине ул минең менән күрешә-күрешә. - Борон тәмәке тартҡан кешене ауылға ла индермәгәндәр. Э-эй, заманаһы хәҙер шуға ҡалған бит инде, ни хәл итәһең...

- Ғәфү ит, олатай, уйламағанмын, - тинем мин тәмәкемдең төпсөгөн һүндереп, пачкаһына кире һалдым.

- Әллә ни уйламайбыҙ шул беҙ йәш саҡта, - тине бабай мине өйөнә әйҙәп, - әйҙә, улым, үт. Алыҫтан килгәнгә оҡшайһың. - Ул миңә баштан-аяҡ күҙ йүгертеп сыҡты.

- Ней йомош менән йөрөйһөң? - тине ул бер аҙҙан урындыҡҡа йәтешләп аяҡтарын бөкләп ултырып алғас, сал һаҡалын һыйпай-һыйпай.

Табиптарға мөрәжәғәт иткән һымаҡ итеп, мин ҡыҫҡаса үҙемдең йомошомдо һөйләп бирҙем.

- Ни менән кәсеп итәһең? - тине ул да хас та табиптар һымаҡ.

- Врач, хирург...

Бабай бер аҙ көләмһерәп, ғәҙәтенсә, һаҡалын тағы бер һыпырып алды ла:

- Ошоғаса миңә йомош менән табип килгәне юҡ ине, - тип ҡуйҙы. - Үҙегеҙҙең хәҙер әллә ниндәй дауалау ысулдарығыҙ күп бит, әмәл итеп ҡараманыңмы ни?

- Ҡараным, олатай, ярҙам итмәй...

Әллә юлдан бер аҙ асығып килгәнгә, әллә бабай алдында тулҡынланыуҙан, ашҡаҙан тапҡыры тағы ла һыҙлай башланы.

Минең бер аҙ йөҙөм сирылғанын байҡап алды шикелле бабай:

- Ҡана, улым, ошонда һуҙылып ят әле, ҡарап ҡарайым, - тине урындыҡ ситенә түшәлгән буй юрғанға күрһәтеп. - Мин үҙем дә хәҙер олоғайғанмын, әллә ни кешеләрҙе ҡарарлыҡ хәлдә лә түгелмен. Әммә враш улым килгән икән, ҡарамай хәлем юҡ. - Ул йомшаҡ ҡына гөрләгән тауыш менән һөйләнә-һөйләнә мине тикшерә башланы. Иң тәүҙә ауыҙымды астырып, телемде ҡараны. Унан усын уҫҡа бер аҙ ышҡып алды ла эсемде баҫҡыларға тотондо. Ошоғаса инде ныҡ ҡына ауырта башлаған эсем, уның ҡулы тейеү менән, әкренләп тыныслана башлағандай булды, ә унан бөтөнләйгә әрнеүҙән туҡталды. Әллә һәр саҡ янымда йөрөткән гастрофармдың берәй таблеткаһын эсергәме, тип уйлаған мин дарыу тураһында йәнә оноттом. Ғәжәп, дарыуһыҙ һис тә тынысланмай торғайны бит бығаса минең ашҡаҙан...

Бер аҙ эсте баҫҡылағандан һуң бабай күҙлеген кейеп алды ла, ҡәләм алып, аҡ ҡағыҙға ғәрәп хәрефтәре менән ундан һулға ниҙер яҙғыларға тотондо. Яҙып бөткәс, күҙлеген сисеп, миңә:

- Мә, улым, ошо бетеүҙе һәр саҡ янында йөрөт. Хәҙергә, Аллаһы Тәғәләгә шөкөр, һыҙланыуың баҫылды. Бер аҙҙан сей яраның ни икәнен дә онотороһоң, - тине көләмһерәп.

- Бибисара, анна, улыма сәй ҡайнат, - тине түрбашта шым ғына ниҙер эшләп йөрөгән әбейенә.

- Самауыр ни, ҡайнаған ул. Хәҙер сәй ултыртам, - тине Бибисара инәй биҙәкле таҫтамалға ҡулын һөртә-һөртә.

Мин өйҙән алып килгән күстәнәстәремде сумкамдан сығарып, урындыҡҡа йәйелгән ашъяулыҡ өҫтөнә һалдым.

- Әй, улым, быныһы булмаһа ла ярар ине, - тине бабай. - Өйҙә ризыҡ күп, Аллаға шөкөр. Беҙгә ни, әбей менән бабайға, күп нәмә лә кәрәкмәй...

Сәй эскән арала мин, уңайһыҙыраҡ булһа ла, бабайға әллә ҡасан уҡ үҙемде ҡыҙыҡһындырған һорауымды бирҙем:

- Олатай, ни өсөн ҡайһы берәүҙәр һине "Шүлгән бабай" тип йөрөтә?

Сынаяҡ аҫтынан бер-икене шөрөлдәтеп сәй һурып алғас, Шәһит олатай берсә Бибисара инәйгә, берсә миңә алмаш-тилмәш ҡарап алды ла:

- Әй, улым, - тине тамағын ҡырып, - һөйләй башлаһаң, уның тарихы бик оҙон ул. Ул ғына ла түгел, ошо көнгә тиклем мин һөйләгәнгә ышанған кеше булманы...

Бер аҙ яҙған кеше лә булараҡ, Шүлгән ҡарттың серен астырыу теләгем уянды һәм мин ни булһа ла унан шул "тарихты" һөйләп биреүен үтендем.

- Йә, ярай, улай булғас, улым, һиңә ҡыҫҡаса һөйләп бирәйем. Етмәһә, минең өйгә тәүге мәртәбә табип кеше үҙе килгән, - тип бер аҙ тамағын ҡырып алды ла бушаған сынаяғын түңкәреп, этәреп ҡуйҙы. Унан күҙҙәрен ярым йомған килеш ниҙер иҫенә төшөрөргә тырышҡандай, ҡулдарын ҡаушырып, бер аҙ өнһөҙ ултырҙы.

- Мең дә туғыҙ йөҙ ҙә ҡырҡ икенсе йыл бара ине. Ул ваҡытта миңә ун һигеҙ йәш кенә тулғайны, - тип башлап алып китте бабай үҙенең хикәйәтен. - Бала саҡтан ҡуянсыҡ сире менән яфаланыуым сәбәпле, мине һуғышҡа ла алманылар. Урманда колхоз һыйырҙарын көттөм. Көндәрҙән бер көндө бер һыйыр көтөүҙән айырылып, ҡайҙалыр юҡ булды. Ул саҡта юғалған бер баш мал өсөн башың төрмәлә серере һәр кемгә асыҡ. Етмәһә, һыйыр быуаҙ ине. "Ике баш мал өсөн яуап бирәсәкһең!" - тип яНаны "бәлшәүик" колхоз рәйесе Сәлимә .

Һыйырҙы эҙләп, тауҙар араһында ятҡан Шүлгәнташ мәмерйәһе яғына табан юл алдым. Ул ваҡыттағы мәмерйә хәҙерге һымаҡ теге музей-һәзейгә лә әйләндерелмәгәйне. Һаҡсылар ҙа юҡ. Мәмерйәгә иғтибар итеүселәр ҙә һирәк ине. Ҡыҙыу һуғыш мәлендә ҡайҙа ул мәмерйә ҡайғыһы. Шулай итеп, Урал тауының итәгендә ҡара урман, ҡаялар араһында ятҡан тау тишегенең ауыҙына килеп еткәнемде һиҙмәй ҙә ҡалғанмын...

Ҡарттың шундай матур итеп һөйләй башлаған хикәйәтен бик ҙур иғтибар менән тыңлап, уны кинофильмдағы кеүек тулыһынса күҙ алдыма килтереп ултырҙым...

* * *

...Мәмерйә ауыҙына килеп еткәс, Шәһит алдан әҙерләп алып килгән сыраһын саҡматаш менән тоҡандырып та ебәрҙе. Хәйер, ҡараңғы мәмерйә эсендә нимә ҡараһын инде һыйыр малы. Бик тә серле булып тойолған был тау ҡыуышлығына йәш егеттең ҡыҙыҡһыныуы бик көслө ине. Шуға күрә лә ул юғалған мал тураһында бер аҙға онотто кеүек. Сыраһын яҡтырта-яҡтырта мәмерйә эсенә инеп китте. Тау ҡыуышы ҙур ғына. Ҡараңғыла бер-нисә тармағы ла күренә. Шомлораҡ булһа ла йәшлек ҡыҙыҡһыныусанлығы үҙенекен итте. Мәмерйәнең киңерәк тармағын һайлап алып, шунда табан йүнәлде. Бына тағы киңерәк бер урын. Һулдараҡ бәләкәй генә бер күл йылтырай, ә күлгә ҡайҙандыр үрҙән шишмә шылтырап ағып төшөп тора. Ләкин күлдән ағып сыҡҡан һыу күренмәй. Күрәһең, ҡайҙалыр ер аҫтына китеп юғала. Шәһит ҡулын һыуға тығып ҡараны. Боҙ кеүек һалҡын. Мәмерйә эсендә төпһөҙ күлдәр булыуын, унда ниндәйҙер һуҡыр балыҡтар йәшәй имеш, тигәндәрен ишеткәне бар Шәһиттең. Таянып барған ике метр самаһы оҙонлоҡтағы таяғы менән күлдең тәрәнлеген үлсәп ҡарамаҡсы булды, ләкин таяҡ буйламай, күл, ысынлап та, бик тәрән, буғай. Үҙенең сирләгәнен дә онотҡан егет, тағы ла әллә нисә тармаҡты тикшерергә ниәтләп, һыу ситендә сүкәйеп ултырған еренән торҙо. Шул саҡ кинәт бар донъя "аҫты өҫкә әйләнеп" китте.

Шәһит аңын юғалта башланы, үҙ-үҙен тота алмай, һыуға йығылды. Ҡуянсыҡ сиренең сираттағы өйәнәге ине ул. "Бәлки, һуңғыһылыр", - тип уйлап ҡына өлгөрә алды һыуға батып барған Шәһит...

...Аңына килгәндә, бығаса таныш булмаған ғәйәт ҙур бер бинала ятҡанын аңланы. Һулаған һауаһы ла шундай саф, бөтөнләйгә икенсе тойолдо. Бер ниндәй тауышһыҙ йөрөгән бик сәйер кейенгән кешеләр ҙә күренгеләй. Бына уның янына бик сибәр бер башҡорт ҡыҙы килеп йөгөнөкләп ултырҙы. Эйе, башҡорт ҡыҙы... (Ни өсөндөр, Шәһит үҙенсә шулай тип фараз итте). Сираттағы өйәнәктән һуң, ғәҙәттәгесә, башы шаулай, бөтә тәне ауыр һымаҡ. "Хәҙер һиңә еңел буласаҡ, туғаным", - тигән һымаҡ булды янында ултырған ҡара сәсле, ҡыйғас ҡара ҡашлы сибәр ҡыҙ. Ләкин ҡыҙҙың ирендәре ҡыбырҙаманы.

"Ҡайҙа ятам мин? Өнөммө был, төшөммө?" - тип уйлап та өлгөрмәне Шәһит. "Урал тауы эсендә һин, егет, үҙ кешеләрең араһында", - тигән яуап ишеткәндәй булды. Вазифа исемле сибәр (ни өсөндөр егет уның исеме тап шу-

*✓ Хоҙай Тәғәләнең рәхмәте тап ошо Уралда урынлашҡан кешеләргә генә төштө: икһеҙ-сикһеҙ океанға күмелмәйенсә, тик Урал тауы ғына һаҡланып ҡалды.*

лай тип уйланы) ҡулы менән унының башынан бер-ике һыйпауы булды, баш шаулауы ла баҫылды, тәне лә еңеләйеп ҡалды. "Төш түгел, Шәһит, был - өнөң, - тине Вазифа тағы ла өнһөҙ генә. - Әле күптән түгел Шүлгән күленә батып барған ерҙән беҙҙең кешеләр һине тотоп алған..."

Хаж ҡылырға барғандағы кеүек ап-аҡ туҡымаға уранған был сибәр ҡыҙҙы, ғәҙәти өйгә лә оҡшамаған бүлмә эсен күреп, Шәһит үҙенең ҡайҙа икәнлеген барыбер яҡшылап төшөнә алманы. Өнгә лә оҡшамаған был ғәжәп кисереш яңынан-яңы һорауҙар тыуҙырҙы егеттә. Бүлмә эсендә әллә ни йыһаздар ҙа юҡ, ә шул уҡ ваҡытта барыһы ла бар һымаҡ... Аҡ мәрмәр ташынан яһалған стенаның тәҙрәгә оҡшаған уйпатыраҡ дүрткел урынында ер өҫтө тәбиғәте һымаҡ һүрәттәр. Бәй, һүрәттәге кешеләр ҡыбырҙайҙар түгелме?.. Эйе, эйе, хатта һөйләшәләр ҙә!.. Шәһит яҡыныраҡ барып, "тәҙрәнән" тышҡа баҡмаҡ булды. Ләкин ул уҡталыуға, "тәҙрәлә" бөтөнләй икенсе күренеш хасил булды: кемдәрҙер атыша, ниндәйҙер ҡолаҡ тондорғос шартлауҙар...

Баянан бирле тын ғына күҙәтеп ултырған Вазифа Шәһиттең уйын белгәндәй:

- Тәҙрә түгел ул, егет, ә - телекүрһәткес, - тине тағы ла уйы менән. - Тыштағы Ер йөҙө цивилизацияһы хәлдәрен беҙ ошо күрһәткес аша һәр саҡ күҙәтеп, белеп барабыҙ. Бөтә Европа һәм Азияны ҡап урталай бүлеп ятҡан мөһабәт Урал тауының һәр төрлө минералдарына бай ҡатламы үҙенә күрә ғәйәт ҙур антенна ролен үтәй.

- Нимә ул антенна?

- Хәҙер, егет, һиңә ул турала аңлатыу мөмкин түгел, сөнки һеҙ үҙегеҙҙең аң үҫеш кимәле буйынса ундай нәмәләргә барып етмәгәнһегеҙ. Шулай уҡ телекүрһәткес тә әлегә һеҙҙең өсөн - ят.

- Ҡасан беҙ күрәсәкбеҙ ундай нәмәләрҙе?

- Тап һеҙҙең быуын кешеләре уйлап сығарасаҡ уны. Һәр хәлдә, ундай нәмәләр берәй ҡасан һинең үҙеңдең өйөңдә лә буласаҡ...

- Ни өсөн тауышланып һөйләшмәйһегеҙ? - тип һораны Шәһит Вазифанан.

- Телепатия ярҙамында һөйләшәбеҙ, - тине ҡыҙ. - Әле һин дә мине шулай уҡ аңлайһың.

"Телепатия" һүҙенең ни икәнен белмәһә лә, Шәһит унының мәғәнәһенә бер аҙ төшөнә башланы.

Ҡыҙ дауам итте:

- Һеҙҙә, ер өҫтөндәге цивилизацияла кешеләр тауыш ярҙамында һөйләшә. Был - һуңғы дәүер кешеләренә Аллаһы Тәғәлә тарафынан ебәрелгән аңлашыу ысулы. Һеҙ бер-берегеҙгә әйткән һүҙҙәрҙе генә ишетә алаһығыҙ. Шул уҡ ваҡытта үҙегеҙ уйлап та, нимәнелер әйтмәй, йәғни сер итеп тота алаһығыҙ. Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе, йәғни беҙҙән һуңғы цивилизация кешеләрен һынау өсөн ана шул ысулды ҡуллана. Күңелендә булған нәмәне кешеләр башҡаларҙан йәшереп, әйтмәй ҡалдырыуға ла һәләтле. Бер-береһен алдай ҙа алалар. Тик һүҙ ярҙамында ғына мәғлүмәт ала алған кешеләрҙең ябай, бер ҡатлыраҡтары, башҡаларға ышанып барыусандары ни ишетһә - шуға ышана... Ә ҡайһы бер насар күңелллеләре шунының менән файҙалана. Ә бына һеҙҙең донъяла яңы тыуған сабый әле һөйләшә белмәй, ләкин ул башҡаларҙы тап ана шул телепатия ярҙамында аңлай. Әлбиттә, был турала һеҙ белмәйһегеҙ...

Вазифаның һөйләгәндәренә Шәһит таң ҡалып ултырҙы. Ысынлап та, яңы тыуған сабый әле бер ни ҙә белмәй һәм аңламай, тип уйлай бит кешеләр...

- Ата-әсәнең үҙ-ара мөнәсәбәтен, башҡа кешеләрҙең ни уйлауын бер ҡарауҙа уҡ аңлай сабый... Бәлки, иғтибар иткәнең дә барҙыр: өйгә яҡшы кеше инһә, сабый илап ятҡан еренән шунда уҡ тынyслана, ә инде ҡулына алһа - йылмая башлай. Яман кеше ҡулға алғанын яратмай. Бар нәмәне аңлай сабый. Тик ололар ғына унын ни теләгәнен аңлап етмәй... Башҡалар менән тауышланып һөйләшергә өйрәнә башлағас та, сабыйҙың телепатия үҙәге әкренләп һүнә. Тик бик һирәк кешеләрҙә генә ғүмерлеккә һаҡланып ҡала ул. Әлеге ваҡытта һеҙҙән алыҫ түгел ерҙә Мөжәүир исемле бик яҡшы кеше йәшәй. Тап ана шундай кешеләрҙең береһе инде ул...

Һеҙҙең заман кешеләрен Хоҙай Тәғәлә ана шулай итеп һынай. Арағыҙҙа яҡшы кешеләр күп, әммә насар әҙәмдәр ҙә аҙ түгел.

Ҡасандыр, ошо Урал тауы тирәһендә йәшәгән халыҡҡа, алыҫ ҡына булыуға ҡарамаҫтан, Ғәрәп илдәре яғынан Ислам дине тиҙ арала үтеп инеүе һәм таралыуы - Аллаһы Тәғәләнең рәхмәте. Иң дөрөҫ диндең Урал халыҡтарына килеп етеүе, башҡорт кешеләренең ошоғаса ябай, бер ҡатлы, әҙәпле, рәхимле, яҡшы кешеләр булып һаҡланып ҡалыуына сәбәп булып тора. Тик һуңғы осорҙа, башҡаларға эйәреп, юлдан яҙып барыусыларығыҙ күп. Әлеге ваҡытта һеҙҙә дингә ҡаршы бик көслө көрәш бара. Кешеләрҙең аңына көсләп динһеҙлек һеңдерелә. Үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, әҙәм балалары хаҡ юлдан ситкә тайпыла. Үкенескә ҡаршы, башҡорт кешеләренең дә күптәре шундай насар йоғонтоға бирелгән. Ләкин, шулай булыуға ҡарамаҫтан, кешеләрҙең күпселегенең күңелендә иман һаҡланып ҡалған...

Быңдай хәлдә үҙен бер ҡасан да тоймаған Шәһиткә шундай рәхәт, еңел. Вазифаның һөйләгәндәренең барыһы ла унын аңына инеп урынлашып бара. Әле "Кемдәр һеҙ?" - тигән һорауҙы бирергә ниәтләнеп ултырған егеткә:

- Уныһына әле барып етербеҙ, - тип дауам итте ҡыҙ. - Хәҙерге ваҡытта Ер өҫтөндә ғәйәт ҙур һуғыш бара. Быға са һеҙҙең цивилизация кешеләре белмәгән һуғыш. Сит ил динһеҙҙәре һеҙ йәшәгән бына ошо Ер шарының иң матур, гүзәл, изге төбәгенә килеп хужа булып алырға ниәтләгән һуғыш. Ошо Урал тауҙарына, унын икһеҙ-сикһеҙ байлығына ҡул һалырға, унын халҡын ҡол итергә, ошо ергә хаким булырға ниәтләгән кешеләрҙең (уларҙы "кеше" тип атарға хатта күңел дә тартмай), әлбиттә, уйҙары тормошҡа ашмаясаҡ. Был - һеҙҙең халыҡ өсөн тағы бер ҙур һынау.

- Урал тауы тирәһен генә алырға хыялланмай бит Гитлер, ә бөтә Ер шарын...

- Урал - Ер шарының елеге. "Һеҙ кемдәр?" - тигән һорауҙы бирергә ниәтләнә инең егет, хәҙер тап ана шуға яуап биреү ваҡыты етте.

Ҡасандыр, бынан миллионлаған йылдар элек, Ер йөҙөндә бөтөнләй башҡа заман ине. Кешеләр ҙә бөтөнләй икенсе ине. Кешелек донъяһы шундай ныҡ үҫешкәйне. Әлеге ваҡытта һеҙҙә яңы етештерелә башлаған техника, ҡорамалдар - алдынғы фән емештәре барыһы ла бик юғары кимәлдә ине. Әммә тап ҡайһы бер һеҙҙең заман кешеләре кеүек, күптәр юлдан яҙып, динен, тәңреһен бөтөнләйгә онота, донъяла аҙғынлыҡ һәм боҙоҡлоҡ хөкөм һөрә башлағас, Хаҡ Тәғәлә ул цивилизацияны юҡ итте. Ер йөҙөндә туфан һыуын ҡалҡытты. Бөтә донъя һыу эсендә ҡалды. Һыуҙағы тереклектәр, үҫемлектәр генә имен көйө һаҡланып ҡалды. Хоҙай Тәғәләнең рәхмәте тап ошо Уралда урынлашҡан кешеләргә генә төштө: икһеҙ-сикһеҙ океанға күмелмәйенсә, тик Урал тауы ғына һаҡланып ҡалды. Ул заман кешеләре барыһы ла телепатия ярҙамында һөйләшә-аңлаша ине. Кешелек донъяһының фәнни асыштар үҫеше кимәле хәҙерге һеҙҙең дәүергә ҡарағанда меңәр йылдарға алға киткәйне. Аллаһы Тәғәлә беҙгә, бик аҙҙарыбыҙға ғына, Ер йөҙөнән китмәҫкә рөхсәт бирҙе, һәм беҙ рәхимлеләрҙән рәхимле Хаҡ-Тәғәләнең рәхмәте менән ошо Урал-тауҙың эсенә инеп урынлаштыҡ. Ғәйәт ҙур был тау ҡыуышлығын яһау беҙҙең өсөн ҡатмарлы булманы.

- Тау эсенән сығарған ташты ҡайҙа ҡуйҙығыҙ?

- Унының соҡолған береһен тау өҫтөнә өйә барҙыҡ. Хәҙер беҙ йәшәгән тау аҫты донъяһы - һеҙҙән алда булған замандың ҡомартҡыһы. Майҙаны - хәҙерге һеҙ йәшәгән башҡорт иленән ике-өс мәртәбәгә күберәк.

Ҡыҙҙың һөйләгәндәрен башына ла һыйҙыра алмай тыңлап ултырған Шәһит яңынан-яңы һорауҙар бирҙе:

- Тауҙы нимә ярҙамында ҡаҙҙығыҙ? Эш ҡоралдарығыҙ, машина, тракторҙарығыҙ ҡайҙа? Бынауынса ҙур ҡыуышлыҡты ябай ҡул менән эшләп булмай ҙа...

- Эйе, бар техникабыҙ Хоҙай тарафынан бирелгән ер аҫты минералдарынан яһалғайны, беҙ уларҙың барыһын да ҡабаттан минералға әйләндереп, тау ҡатламына һала барҙыҡ. Нисегерәк эшләүебеҙҙе аныҡ ҡына һөйләп аңлатып биреү мөмкин түгел, сөнки әле һеҙҙең кимәлегеҙ быны аңларлыҡ кимәлгә үҫешеп етмәгән. Бында бер ниндәй тылсым да юҡ, тик бик алға киткән фән үҫеше генә...

Вазифаның хас башҡорт ҡыҙына оҡшаған мөләйем сырайлы, сибәр йөҙөнә ҡарап, Шәһит:

- Үҙең башҡорт милләтенә оҡшағанһың, исемең дә Вазифа - тап башҡортса, - тине.

- Дөрөҫ әйтәһең, егет, - тине ҡыҙ, йөҙө бер аҙ алһыулана төшөп, - Уралда йәшәгән халыҡ борон да тап һеҙҙең һымаҡ башҡорт халҡы ине. Яңы, йәғни һеҙҙең заман кешеләрен дә Хоҙай шулай итеп яратты. Хаҡ Тәғәләнең күңеленә хуш килгән һындар һеҙ... Әле тел ярҙамында аңлаша башлағас та, һеҙҙең телегеҙ - башҡорт теле - иң матур яңғыраусы тел ине! Тик күптәрегеҙ шундай гүзәл телдән үҙ теләге менән мәхрүм булып, башҡа телгә күсәсәкһегеҙ, үкенескә ҡаршы...

- Беҙҙең киләсәгебеҙҙе алдан күреп әйтәһең, Вазифа һылыу. Аллаһы Тәғәлә күрәҙәселекте хупламай, ахырыһы. Алда ни буласағын Хаҡ Тәғәлә үҙе генә белә. Яҙмышты алдан юрап булмай...

- Дөрөҫ, һеҙҙең заман кешеләренә Хоҙай күрәҙәселек ҡылырға ҡушмаған. Хатта ҙур гонаһ һанала ул. Һәм шул әмерҙе үтәйәсәкһегеҙ. Сөнки һеҙгә күрәҙәселек итеү хоҡуғы һәм мөмкинселеге бирелмәгән. Кемдәрегеҙҙер күрәҙәсе булырға маташасаҡ та. Ләкин уларҙың һөйләгәне бер ҡасан да дөрөҫкә сыҡмаясаҡ. Алда ни булырын белеү теләге бар кешеләргә лә хас. Шулай ҙа яҙмыш - ул әҙәм балаһы алдан белеүе мөмкин булмаған төшөнсә. Һеҙҙән, ер кешеләренән айырмалы рәүештә, Аллаһы Тәғәлә беҙгә күрәҙәселек итеү һәләте лә биргән...

**(Дауамы бар).**

*МИН ҺУҒЫШТЫ КҮРАЛМАЙЫМ...*

# НӘҪЕЛ ТАРИХЫМДЫ ЕРГӘ КҮМГӘН,

## хәтирә йомғағын өҙгән өсөн...



**Бала саҡта минең өсөн иң ҙур байрамдар "Ураҙа ғәйете" һәм "Еңеү көнө" була торғайны. Тәүгеһе - өй беренсә байрамсылап йөрөү - йылына бер генә була торған мөғжизәгә тиң ине. Бигерәк тә ҡарт-ҡоролар өйөнә инергә ярата инек. Уларҙың ҡот, нур бөркөп торған йорттары беҙгә башҡа бер ерҙә лә булмаған йылылыҡ өләшә кеүек ине. Барып инеүең була, инәйҙәр әйҙүкләп ҡаршы ала, һандыҡ төбөнән ҡәҙерле ҡунағына тип һаҡлап ҡуйған кәнфит-перәниктәрен сығарып, һинең муҡсаңа һала ла, арҡаңдан тупылдатып һөйөргә лә өлгөрә. Шулай көнө буйы байрамсылап йөрөп, муҡсаң тәмлекәстәр, ә күңел донъяң бөтмәҫ-төкәнмәҫ хис-тойғоларға, нурға, йылылыҡҡа күмелеп ҡайтып инелә ине...**

Еңеү көнө лә түҙемһеҙлек менән көтөп алына ине. Ошо оло байрамға арналған шиғырҙар ятлайбыҙ, йырҙар әҙерләйбеҙ, ҡырға сығып сәскәләр йыйып алып ҡайтабыҙ. Ниһайәт, ул көн килеп етә. Иртәнән һәр ерҙә байрамса кәйеф. Мәҙәниәт йортонан тулҡынландырғыс йырҙар ағыла. Урам буйлап түштәренә миҙалдар таҡҡан ветерандар бер-бер артлы клуб яғына ыңғайлай. Бына ул олатайҙар, ирҙәре һуғышта һәләк булып, тол ҡалған инәйҙәр обелиск эргәһендәге эскәмйәгә теҙелешә. Араларында минең ҡартатайым да бар. Ана тағы Хөпбулла олатайым, Ильяс олатайым ултыра. Улар барыһы ла беҙҙең шәжәрә тамырын йәйелдереүсе Яҡшыбаевтар нәҫеленән. Ошондай күңелле мәшәҡәт-күренештәр тулҡынында ғорурлыҡ хисе артҡандан-арта. Ана бит минең олатай-ҡартатайҙарым ғәзиз еребеҙҙе яуыз дошмандарҙан, немец фашистарынан ҡотҡарған, беҙгә азатлыҡ бүләк иткән. Мин бер ҡосаҡ гөлләмәмде ҡартатайыма алып барып тотторам, олатайҙарымды ла буш ҡалдырмайым. Эргәмдә торған әхирәтемдең тәғәйен генә сәскә тотторор кешеһе лә юҡ. Унын да ҡартатаһы һуғышта ҡатнашҡан, тик уларға күрешергә генә насип булмаған. Шуға ла ул яҡын күргән олатайҙарҙың береһенә ҡәҙер күрһәтә. Аҙаҡ беҙ, бөтә балалары, ейән-ейәнсәрҙәре, ҡартатайымдың йортона байрам сәйенә йыйылабыҙ. Ҡартатайым түшендәге һәр миҙалының нимә өсөн бирелгәнен тәфсирләп һөйләй, һуғыш хәтирәләренә бирелеп китә, шунан бер аҙ шымып ултыра бирә лә, тағы ла һүҙен дауам итә... Әммә мин быларҙың береһен дә хәтерләмәйем, бәләкәйерәк булып ҡалдым шул. Ҙурайырға, унын фәһемле аҡыл-кәңәштәрен алып ҡалырға өлгөрмәнем. Хәҙер ҡартатайым тере булһа, мин унын һәр һүҙен ынйы-гәрәбәләргә тиң итеп күңел хазинама йыйнаған булыр инем. Дошман пуляһы һалған яра ҡартатайыма оҙаҡ йәшәргә бирмәне. Эйе, нәҫелемә ҡот биреүсе олатайҙарым бер-бер артлы беҙҙең менән хушлашты...

Хәҙер инде үҫеп буй еткәс, сабый аҡылын һүткәс, ауылым ветерандары теге донъяға күсеп бөткәс, Еңеү көнө яҡынлашһа, һуғышҡа ҡарата нәфрәт тойғоһо тоҡана. Ни хоҡуғы бар ине һуғыштың ауылыбыҙҙың матур-матур ҡатындарына ғүмерлеккә толлоҡ мөһөрөн һуғырға? Бүтәндәр ҡартаталары ҡосағына атлыҡҡанда, ҡулындағы сәскәләрен тотоп, етемһерәп ҡалған әхирәтемдең ни ғәйебе бар ине? Ауылыма ҡот биреп тороусы тауҙарҙың береһе - Яҡшыбай тауға баҡҡан һайын, был тойғо тағы ла көсәйә. Миңә билдәле билдәһеҙ Яҡшыбайтауҙың серен асҡым килә. Ул серҙәр минең нәҫелемдән сыҡҡан бик күп ир-егеттәр менән һуғыш яланында ятып ҡалған. Мырҙабай ҡартатайым да, Хөпбулла, Ильяс олатайҙар ҙа беҙҙең заттар тураһында күп белгән, тик уларҙы тыңлап, яҙып ҡалырға ғына өлгөрөлмәгән. Күпме аҡыл, күпме тарих миңә килеп етмәгән. Ата-бабалалар тарихын миңә еткереүсе хәтирә йомғағын тап шул һуғыш ғәрәсәте өҙгән дә инде. Бына шуның өсөн дә мин һуғышты күрә алмайым...

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

✓ *Башҡорттарҙан торған республика хөкүмәте менән большевиктарҙан торған ВКП(б) Өлкә комитеты етәкселәре араһында был көрәш айырыуса киҫкен төҫ ала.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# БЕРҘӘМ ДӘҮЛӘТ ИМТИХАНЫНДА...

## тағы ла үҙгәрештәр

■ Рәсәйҙә март - апрель баштарында шәкәргә хаҡтар күтәреләсәк, тип белдерә Аграр баҙар конъюнктураһы институты белгестәре. Эксперттар фекеренсә, шәкәргә хаҡ 2009 йылдың декабрендә күтәрелә башлап, йыл аҙағында 1 килограмы 27 һум 50 тингә еткән. Был илдә үҫтерелгән шәкәр сөгөлдөрө запасы эшкәртелеп бөтөүе һәм август айынан импорт шәкәр сырьеһы һатып алынмауы менән бәйле. Бынан тыш, 25 ғинуарға донъя баҙарында котировкаларҙың фунтына 30,10 центҡа тиклем үҫеше лә (FOB-порт экспортер шарттарында тоннаһына 664 доллар) хаҡтар күтәрелеүенә килтерҙе. Етмәһә, Һиндостан һәм башҡа экспортер илдәрҙә етештереү көстәре кәмей, был да шәкәрҙең ҡиммәтләнеүенә килтерәсәк. Аналитиктар белдереүенсә, Шәкәр буйынса халыҡ-ара ойошма (ISO) биргән баһа буйынса, 2009-2010 йылдарҙа донъя шәкәр дефициты 7 млн тоннаға етәсәк ( етештереү - 159,89 млн тонна, ҡулланыу - 167,13 млн тонна). ИКАР мәғлүмәттәренә ярашлы, Рәсәйҙә ғинуарҙың беренсе аҙнаһында шәкәрҙең килограмы 29 һум 80 тингә күтәрелгән. Ай аҙағына хаҡтар 29 һум булһа ла, "Финмаркет" белдереүенсә, февраль-март айҙарында шәкәрҙең килограмын 31 һумға ала башлаясаҡбыҙ.

■ Рәсәйҙә бөгөнгө көнгә 2,5 млн наркотик ҡулланыусы иҫәпләнә. Уларҙың өстән ике өлөшө 30 йәшкә тиклемге йәштәр. Һуңғы ун йыл эсендә Наркотиктар әйләнешен контролдә тотоу федераль хеҙмәте, хоҡуҡ һаҡлау органдары һәм йәмәғәт ойошмалары эшмәкәрлеге көсәйеүгә ҡарамаҫтан, наркоманлыҡ менән яфаланыусылар һаны 60 процентҡа артҡан. Был хәл менән көрәшеү маҡсатында Дәүләт наркотиктарға ҡаршы көрәш комитетына Дмитрий Медведев дәүләт наркотиктарға ҡаршы сәйәсәт стратегияһы проекты эшләргә тәҡдим иткәйне. Был проект стратегияһын дәүләт етәксеһенең 2010 йылдың беренсе кварталында раҫлауы көтөлә.

■ Быйыл БДИ-ла тағы ла үҙгәрештәр көтөлә. Үҙгәрештәр, башлыса, математика һәм йәмғиәтте өйрәнеү фәненә ҡағыла. Хәҙер алгебра һәм анализ башланғысына геометриянан мәсьәләләр өҫтәләсәк. Бынан тыш, математика буйынса БДИ-нан "А" өлөшө алып ташланды, практик мәсьәләләр күбәйҙе. Йәмғиәтте өйрәнеү буйынса БДИ тапшырырға теләүселәрҙе түбәндәге үҙгәрештәр көтә: яуап һайлау кәрәк булған мәсьәләләрҙең иҫәбе 30-ҙан 24-кә ҡалдырылған, "В" өлөшөндә, элекке кеүек, схеманың ғына түгел, ә таблицаның төшөп ҡалған элементын тултырырға тура киләсәк. Яңы С8 мәсьәләһе индерелгән, уның буйынса бирелгән темаға тулы яуап планы төҙөргә кәрәк. Мини-сочинение буйынса баһалау критерийҙары үҙгәрҙе һәм хәҙер уның өсөн биш балл алырға була. Башҡа фәндәргә килгәндә, 2011 йылдан информатиканан имтиханды компьютерҙа тапшыра башлау көтөлә.

■ Быйыл вуздарға уҡырға инеү яңыса ойошторолаsаҡ. РФ Мәғариф министрлығы әҙерләгән документҡа ярашлы, мәктәпте тамамлаусылар вузға тик БДИ һөҙөмтәләре буйынса ҡабул ителә. Һәр вуз уҡырға инеү өсөн кәрәкле булған БДИ һөҙөмтәләренең минималь балын иҫәпләп сығара ала, был һанды ҡабул итеү тамамланғансы үҙгәртергә ярамай. Бөтә Рәсәй олимпиадаларының йомғаҡлау этабы еңеүселәре һәм бүләкләнеүселәре, халыҡ-ара олимпиадаларҙа ҡатнашыусылар, Олимпия, Параолимпия, Сурдоолимпия уйындары чемпиондары вузға имтиханһыҙ ҡабул ителә. Етемдәр, I һәм II төркөм инвалидтары, өс йылдан ашыу контракт буйынса хәрби хеҙмәттә булғандар һ.б. конкурсһыҙ уҡырға инә ала. РФ Мәғариф министрлығы ҡарары буйынса, 1 февралдән барлыҡ юғары уҡыу йорттары ла үҙҙәренең сайттарында уҡырға инеү ҡағыҙәләрен урынлаштырҙы.

*КЕМ БАЛАҺЫ, ТИЕП ҺОРАРҘАР...*

**XX быуаттың 60-сы йылдарында, Совет власының ҡеүәтле заманында, әҙәбиәт юлына аяҡ баҫҡан шағир, прозаик, драматург, публицист, тәржемәсе Ғәзим Ғәзиз улы Шафиҡовты, кәрәк ваҡытта халыҡ бәхете өсөн көрәшкә күтәрелгән шәхес тип атаһаҡ, һис тә яңылышмабыҙ кеүек. Уның ижадының ҡиммәте - башҡорт милләтенең тормошон, көнитмешен рус телендә кәүҙәләндереүендә, йәғни үҙ милләтенең йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, көнитмешен, яу мәлендә күрһәткән ҡаһарманлығын донъя кимәленә сығарып, башҡа халыҡтарға һөйләп биреүҙә. Был тәңгәлдә Ғәзиз Шафиҡов башҡарған эштәр үлемһеҙ.**



# АТАЙЛЫҠ ҠАҺАРМАНЛЫҒЫ...

## улдарҙы ла ҡаһарман итә

Әҙиптең ошондай үлемһеҙ ижады менән танышҡан һәр кемдә, һис шикһеҙ, шундай һорау тыуасаҡ: милләте өсөн мәңгелек мираҫ ҡалдыра алған шәхесте кем тыуҙырған, кем тәрбиәләгән икән? Ошо һорауға яуап алған кеше, һис шикһеҙ, тағы шуға ғәжәпләнер: үҙ иленән ситтә донъяға килгән, балалығы ят ерҙәрҙә үткән Ғәзим Ғәзиз улы нисек итеп шулай үҙ милләтенең патриоты булып ҡалған, телен, мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен онотмай, уларҙы йөрәгендә һаҡлай алған?

Ғәзимдең атаһы Ғәзиз Хафиз улы Шафиҡов хәҙерге Ауырғазы районы Абдулла (башҡорт Салихы) ауылында 1896 йылда крәҫтиән ғаиләһендә донъяға килгән. Кесе йәштән үк ауыл тормошонда ҡайнап, төрлө эштәр башҡарып үҫә. Мәҙрәсәгә уҡырға йөрөп, заманына күрә ярайһы ғына ғилемгә эйә була. Ғәзизгә 18 йәш тулған мәлдә Беренсе бөтә донья һуғышы башланып китә. Бәлиғ булған Ғәзиз үҙенең тиҫтерҙәре менән дөрләп янған ут эсенә барып инә. Окоп тормошонда һыуыҡҡа ла, эҫегә лә күнегеп, аслы-туҡлы көн күреп, өс йыл Бессарабия, Румыния ерҙәрендә фронт тотоп, бер-ике тапҡыр йәрәхәтләнеп, иҫән-һау тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта.

Рәсәйҙә 1917 йылғы февраль буржуаз, көҙөнә пролетариат инҡилабы булыу сәбәпле, тыуған төйәгендә лә тыныслыҡ булмай. Башҡа халыҡтар кеүек, уның милләттәштәре лә ирек, именлек, ер даулай. Ғәзиз Хафиз улы 1917 йылдың май айында Мәскәү ҡалаһында асыласаҡ Бөтә Россия съезына делегат итеп һайлана.

Съезда ҡатнашҡан башҡорт делегацияһы үҙҙәренең аҫабалыҡ ер биләү хоҡуғын бөтөрөүгә юл алған съезд ҡарары менән килешергә теләмәй. Ошо айҡанлы Мәскәүҙә үткән съезда ҡатнашҡан делегаттар (50 кеше) 1917 йылдың 17 майында Ырымбурҙа ойоштороу кәңәшмәһенә йыйылып, Беренсе башҡорт съезын йыйырға ҡарар итә. Беренсе бөтөн Башҡорт съезы Ырымбур ҡалаһында 1917 йылдың 20-27 июлендә үтә. Съезд Башҡортостан республикаһын милли-территориаль федератив башланғыстарҙа демократик республика итеп иғлан итеүҙе яҡлап сыға.

Ер мәсьәләһенә ҡағылып, съезд шундай ҡарарға килә: "Башҡорт халҡынан ғәҙелһеҙ тартып алынған барлыҡ ерҙәр хужаһына кире ҡайтарылырға һәм тик башҡорт халҡының ерһеҙ һәм аҙ ерле кешеләренә бүленергә тейеш". Беренсе башҡорт съезында үҙ халҡының ер мәсьәләһендәге тәҡдимдәрен аңлатып, Оло Үтәш (хәҙерге Ғафури районы) ауылы имам-хатибы Мансур Халиҡов доклад яһай. Ғәзиз Шафиҡов та ошо тәҡдимдәрҙе яҡлап сыға. Һуңынан Ғәзиз Хафиз улы съезда доклад яһаған зат менән дуҫлашып китә.

1920 йылда Ғәзиз дуҫы Мансурҙың димләүен кире ҡаҡмайынса, уның һеңлеһе Мөкәрәмәгә өйләнә. Ҡатыны Мөкәрәмә шулай уҡ Сәйетбаба ауылында Сабир хәҙрәт мәҙрәсәһен тамамлап, ҡыҙҙар уҡытҡан зат була. Һүҙ араһында шуны ла әйтеп үтәйек: үҙенең яҙып сығыуына ҡарағанда, башҡорт яҙыусыһы Шакир Насиров мөғәллимә Мөкәрәмәнең шәкерте булған. Мөкәрәмәнең атаһы Хатип хәҙрәт Оло Үтәштә мәҙрәсә төҙөтә. Халыҡ шағиры М. Ғафури ҙа белемдең тәүге хәрефтәрен ошо мәҙрәсәлә таный.

1917 йылдың ноябрендә башҡорт халҡы күтәрелешенең башында торған зыялылар башҡорт территориаль автономияһын иғлан итеп, башҡорт ғәскәрҙәре төҙөүгә тотона. Беренсе бөтә донъя һуғышы фронтында сынығып ҡайтҡан Ғәзиз Шафиҡов ил эсендәге яңынан тоҡанып киткән һуғыштан ситтә тороп ҡала алмай, башҡорт ғәскәрҙәре сафына баҫа. Әйтергә кәрәк, унда ул ябай һалдат ҡына түгел, ә полк муллаһы (беҙҙеңсә әйткәндә - полк комиссары) вазифаһын башҡара. Башҡорт ғәскәрҙәре менән Польша ерҙәрен азат итеү һуғыштарында, Петроградты һаҡлау бәрелештәрендә ҡатнашып, имен-аман тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайта. Ошо һуғыштар барған мәлдә башҡорт ғәскәрҙәре командующийы Муса Мортазин, баш командующий Зәки Вәлиди менән яҡындан таныша.

Ике һуғышта әүҙем ҡатнашҡан Ғәзиз Хафиз улы ауырлыҡтар алдында баҙап ҡалмай, эшкә урынлашып, үҙ хужалығын рәткә килтереүгә ныҡлап тотона. Үҙенә алты мөйөшлө йорт төҙөй (йәшәгән ауылы дала ерендә булғанлыҡтан, төҙөлөш материалы башлыса ҡаҙып алынған таштарҙан ғибарәт), малдары ла ишәйеп китә, ике баш һыйыр малы, ике-өс ат, ваҡ малдары үрсеп, аҙбары йәнләнеп, шатлыҡ өҫтәй. Һуғыш мәлендә Бессарабия ерҙәрендә күреп өйрәнеп ҡайтҡан тәжрибәһенә таянып, ауылы эргәһендәге йылғаны быуып, тирмән ҡороп ебәрә. Ошо мәлдә уның тиҙ арала шулай байып китеүен күрә алмаған кешеләр ҙә табыла. Ауыл магазиндарын тауар менән тәьмин итеүсе Шафиҡовтың эшен тикшерергә ревизия килеп төшөп, уның өҫтөнә булмаған ғәйепте өйөп ташлайҙар. Ғәзиз ғәйепләүҙе инҡар итеп, төрлө раҫлау документтары күрһәтеп ҡарай, әммә уға иғтибар ҙа итмәй, эшең прокуратураға ебәреләсәк, тип китәләр. Ни эшләргә, тигән һорау килеп баҫа Ғәзиз алдына. Ул саҡта Кесе Башҡортостан хөкүмәте Стәрлетамаҡ ҡалаһында урынлашҡан була. Башҡортостан Советтарының Үҙәк башҡарма комитетының рәйесе Муса Мортазинға барырға кәрәк, тигән уйға килә Ғәзиз. Муса Лутович уны ҡолас йәйеп ҡаршы ала, хәл-әхүәлен һорашҡас, ниндәй йомош төшөүе хаҡында белешә. Ғәзиз һөйләп бирә, Муса Мортазин уны тынысландырып, "Бар, Ғәзиз, ҡайт, бер нәмә лә булмаясаҡ", - тип ҡайтарып ебәрә.

Яңынан үҙенең бығаса эшләп килгән эшенә тотона Ғәзиз Хафиз улы. Әммә илдә лә, Башҡортостанда ла синыфтар көрәше ҡыҙғандан-ҡыҙа ғына бара. Ул юғары ҡатлам заттар араһында ла ныҡ һиҙелә. Башҡорттарҙан торған республика хөкүмәте менән большевиктарҙан торған ВКП(б) Өлкә комитеты етәкселәре араһында был көрәш айырыуса киҫкен төҫ ала. 1922 йылда Зәки Вәлиди хөкүмәте, бер төрлө лә ыңғай һөҙөмтәгә килә алмайынса, эш ташлап тарала. Хөкүмәт башында тороусыларҙың күбеһе сит илдәргә сығып китә.

Зәки Вәлидиҙе яҡлап йөрөгән 20-25 башҡорт егете үҙҙәренең юлбашсыларын һаҡлап, Урта Азияға китергә һүҙ ҡуйыша. Ошо төркөм менән Ғәзиз Шафиҡов та ҡуҙғалыр-

ға тейеш була. Әммә уға был ниәтен тормошҡа ашырыу насип булмай: бер ҡыҙы ныҡ ауырып китә, шуны ерләп йөрөп, һуңлап ҡала. Ә әлеге төркөмдөң яҙмышы үтә лә фажиғәле тамамлана. Улар араһында бер хыянатсы табыла, төркөмдөң ҡасан юлға сығасағын Советтарға хәбәр итә. Ҡыҙыл гвардия юлдың бер уңайлы урынында көтөп тороп, уларҙың барыһын да юҡ итә.

1929 йылда бер артелдә хисапсы булып эшләгән Ғәзиздең энеһе Исхаҡты ҡулға алып, атырға хөкөм итәләр. Үҙенә лә ҡурҡыныс янауын һиҙенгән Ғәзиз Хафиз улы 1930 йылдың бер төнөндә ҡатынын һәм ике ҡыҙын алып, үҙ ҡулдары менән төҙөгән йортон да, малдарын да, тирмәнен дә ҡалдырып, сит-ят ерҙәргә китергә мәжбүр була. Оҙаҡ дауам итә уларҙың сәфәре. Юлда Ләлә исемле ҡыҙы сирләп китеп, Ҡырғыҙстанға барып еткәс, вафат була. Әммә бик күп һуғыш нужаларын күргән, сәйәси эштәрҙә ҡатнашҡан Ғәзиз яңы урында юғалып ҡалмай, эшкә урынлаша.

Әһәмиәткә эйә булған шөғөлө шунда: хужа үҙенең ғаиләһендә шундай тәртип урынлаштыра - тик башҡорт телендә аралашырға, башҡорт китаптары уҡырға һәм Өфө радиоһы тапшырған йырсыларҙы, спектаклдәрҙе ҡалдырмай тыңларға. Берҙән -бер көндө Урта Азияға мәшһүр йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың килеүе билдәле була. Ғәзиз Хафиз улы мәңәр саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Ташкентҡа барып, үҙенең аҙашының йырлауын тыңлап, оло шатлыҡ кисерә.

Ғәзиз Хафиз улы артабан уҡып белем алыу хаҡында хыяллана. Ошо уйын ғәмәлгә ашырыу йөҙөнән Ҡырғыҙ педагогия институтының әҙерлек курсына инә. Курсты тамамлап, институттың студенты булып китә. Институтта уҡыған дәүерҙә үҙе кеүек алыҫ Ҡырғыҙстан ерҙәренә килеп урынлашҡан элекке Башҡортостан хөкүмәте ағзаһы Шәриф Манатов, Башҡортостан мәғариф халыҡ комиссары Ғ. Сәғәдиев менән дуҫлаша. Манатов тарих буйынса лекция һөйләһә, Шафиҡов студент хәлендә ошо лекцияларҙы тыңлай. Ғәзиз Хафиз улы институтты ударник булып тамамлай. Уны Ҡырғыҙ педагогия училищеһы директоры итеп тәғәйенләйҙәр. Ике йылдан һуң (1936 йыл) Талас өлкәһендә "Башланғыс институт" исеме йөрөткән өлгөлө мәктәп асыла. Унда Ҡырғыҙстандың иң һәләтле балаларын йыйлар. Ошо "институт"тың директоры булып Шафиҡов эшләй. Әйтергә кәрәк, ул мәктәптә тамамлаған уҡыусылар һуңынан төрлө юғары уҡыу йорттарын тамамлап, оло етәксе урындар биләп эшләй.

Башҡортостандан сығып китеүҙәренә байтаҡ ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, Ғәзиздең яҡташтары уның өҫтөнән ялыу яҙыуын дауам итә. Ҡырғыҙстандың эске эштәр наркоматы, прокуратура эшендә эшләгән заттар был ялыуҙарға әллә ни иғтибар бирмәй, ғәйепле кешене, белемле, зыялы булғанлыҡтан, яуаплылыҡҡа тарттырыуға тиклем эш асмайҙар. Берҙән бер көндө Ғәзиз Хафиз улы йәшәгән йортҡа бер таныш булмаған зат килеп инә. Бер аҙҙан хужа үҙе лә ҡайтып инә һәм бер аҙ ғәжәпләнеп-керәп, таныш булмаған кеше менән күрешә. Әҙәм балаһы һөйләшеп таныша, тигәндәр бит боронғолар. Шул асыҡлана: әлеге зат юридик институт (Мәскәүҙә) тамамлап, бында Ҡырғыҙстанға эшкә (прокуратураға) ебәрелгән Башҡортостан кешеһе булып сыға. Әбйәлил районында тыуып үҫкән Ғәйнуллин икән. Яҡташтар төнө буйы һөйләшеп, һыйланып ултыралар. Ғәйнуллин бөтә килгән ялыуҙарҙы үҙендә һаҡлауы, бынан һуң да уларҙы үҙендә тотоп, архивҡа тапшырасағы тураһында әйтеп ҡайтып китә.

Ғәзиз Хафиз улы балалары үҫкәндән һуң ҡайһылайыраҡ йәшәйәсәген алдан хәстәрләй. Оло ҡыҙы Гөлиә институттың IV курсына етеп, уның тирәһендә ҡырғыҙ ир-егеттәре урала башлауын һиҙенеү менән, уны Башҡортостан медицина институтына күсереү сараһын күрә. Бөйөк Ватан һуғышы тамамланып, донъяла бер ни тиклем һиллек урынлашҡас, Шафиҡовтың ғаиләһе тыуған илгә ҡайтыу мәсьәләһен ғәмәлгә ашырыуға ныҡлап тотона. Шафиҡовтар үҙҙәре Ҡырғыҙстанда ҡалып, кесерәк балаларын да (Диләрә менән Ғәзимде) Башҡортостанға уҡырға ҡайтаралар. Үҙҙәре Башҡортостанға 1951 йылда ғына ҡайталар.

Уларҙың ҡайтыуы август айы аҙағына тура килә. Шафиҡовтарға алыҫ райондарҙың береһе булған Хәйбулла районында төпләнергә тәҡдим итәләр. Улар һис икеләнмәйенсә шул тарафҡа юл ала. Ялыу яҙыуға ҡулдары ҡысыған яҡташтарынан алыҫтараҡ булыу өсөн дә уңайлы булып сыға был яҡтарҙа төпләнеү. Ғәзиз Хафиз улы Аҡъяр урта мәктәбенең директоры итеп билдәләнә, ҡатыны башланғыс класс уҡыусыларын уҡыта (Мөкәрәмә Хатиповна Ҡырғыҙстанда уҡытыусылар институтын тамамлай). Ошо йылдарҙа Аҡъяр мәктәбендә уҡыған үҫмерҙәр әле булһа тарих уҡытыусыһы Ғәзиз Хафиз улы дәрестәрен һағынып иҫкә алып һөйләйҙәр.

50-се йылдар аҙағында Ғәзиз Шафиҡовты Һаҡмар йылғаһы буйында урынлашҡан үтә лә йәмле ерҙәге Әбеш ауылы урта мәктәбенә директор итеп күсерәләр. Ошо ауылда бер нисә йыл эшләгәндән һуң, пенсияға сығып, балалары йәшәгән Өфө ҡалаһына күсеп килә Шафиҡовтар. Ғәзиз Хафиз улы - 1963 йылда, ғүмер юлдашы Мөкәрәмә унан һуң сирек быуат йәшәп, 1987 йылда вафат булды.

**Ошо мәҡәләбеҙҙә ир-аттың ни тиклем ауырлыҡ-яфалар күреүен, шуға ҡарамаҫтан, көрәшеп, һаман да алға ынтылыуын, иң мөһиме, ошондай ауыр шарттарҙа ла үҙенең балаларын (уларҙы ғына түгел!) милләткә тоғро ҡалып, уның ғөрөф-ғәҙәттәрен, йолаларын, телен, мәҙәниәтен һаҡлауға, патриот булып ҡалыуға өндәп, ысын күтәренке рухлы заттар тәрбиәләй алған шәхес тормошон тасуирланыҡ. Бигерәк тә ошондай ауыр шарттарҙа халҡыбыҙҙы үҙенең әҫәрҙәре менән юғарыға күтәреүгә өлгәшкән шәхесте - Ғәзим Ғәзиз улы Шафиҡовты - тәрбиәләгән ошо ғаилә алдында баштарыбыҙҙы эйәбеҙ.**

**Рамазан ҠОТОШОВ,**
**һуғыш һәм хеҙмәт ветераны,**
**Рәсәй һәм Башҡортостан**
**журналистар берлеге ағзаһы.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Үткән эш үткән инде

**Бер ваҡыт ике дзэн-буддист монахы баҙарға китеп барышлай ҙур күләүеккә тап була. Бер нисек тә үтеп булмаған күләүек янында бысранмайынса ғына нисек сығырға белмәй аҙапланып торған ҡыҙҙы осраталар. Был проблеманы хәл итер өсөн монахтарҙың береһе уны күләүек аша күтәреп алып сығырға тәҡдим яһай. Был ғәмәле менән ул, ҡатын-ҡыҙ менән бер ваҡытта ла һөйләшмәҫкә һәм уға ҡағылмаҫҡа, тигән монах нәҙерен боҙа.**

Күләүек аша бысранмайынса ғына сыҡҡас, ҡыҙ монахҡа рәхмәтен әйтә лә, үҙ юлын дауам итә. Монахтар иһә баҙарға ҡарай китә, әммә көн аҙағына тиклем бер-береһенә бер һүҙ ҙә ҡушмай. Монастырға ҡайтҡас, иптәше күләүек аша ҡатын-ҡыҙҙы күтәреп сыҡҡан монахты көфөрлөктә һәм мәсхәрәлә ғәйепләй. Был асыулы ғәйепләүҙәр оҙаҡ ҡына дауам итә. Ниһайәт, изге эш башҡарған монах дуҫына боролоп ҡарай ҙа, былай ти: "Мин, әлбиттә, ҡатын-ҡыҙҙы бысраҡ күләүек аша күтәреп сығып, нәҙеремде боҙҙом, әммә шунан һуң уны ергә төшөрҙөм дә, үҙ юлым менән киттем. Ә һин һаман уны күтәргән килеш барыуыңды дауам итәһең".

Тормошобоҙ хаҡында уйлана китһәң, беҙ ҙә үткәндәрҙәге ауыр йөктө һаман да артмаҡлап китеп барыуыбыҙҙы тоя алабыҙ. Беҙ ҡасандыр дуҫыбыҙҙың хыянат итеүен онота алмай, шул күңелһеҙ тойғоларҙы үҙебеҙҙә йөрөтәбеҙ. Яратҡан кешебеҙҙең тәнҡитләүен күтәрә алмай, үпкәләп йөрөйбөҙ. Оҙайлы ваҡыт бындай тойғоларға бирелеп йөрөүҙе йәйәү китеп барғанда аяҡ кейемемә эләккән таш валсығы менән сағыштырырға ла мөмкин булыр ине. Һин туҡтап, ул ташты ҡағып төшөрә алаһың, йә иһә уға аяғыңды өйкәргә юл ҡуя алаһың. Ошо уҡ рәүешле һин асыуыңды һәм үпкә тойғоһон күңелеңдән алып ташлай алаһың.

Кемгәләр ҡарата әсе тойғолар йөгөн күңелеңдә һаҡлайһың икән, был тормошоңдо тамуҡҡа әйләндереүе лә бар. Бәләкәй генә ҡара болоттоң һауа торошоноң боҙолоуы тураһында иҫкәртмәй ҡалған сағы бик һирәк була. Киләһе юлы үҙеңдә асыулы һәм үпкәле итеп тойғанда, барыһы ла үҙ урынына ултырыуын бер аҙ көт һәм аҙаҡтан һинең асыуыңды килтергән сығанаҡҡа мөрәжәғәт итеп, был ҡаршылыҡты шымартырға тырыш. Ғәҙәттә, бындай саралар һинең тәкәбберлегеңде самаларға һәм кем хаҡ, кем хаҡ түгеллеген онотоорға ярҙам итә. Шулай иткәндә, өҫтәмә кире тойғолар йөгөн кисермәйенсә, тормош юлын тыныс дауам итә алаһың. Шекспир әйтмешләй: "Үткән эш үткән инде!" Һинең үҙеңдән дә, йә иһә бүтән берәйһенең дә булған эште яңынан үҙгәртерлек көсө юҡ. Һиңә ҡарата хыянат иткәндәрҙе ғәфү ит һәм шуның артынса уҡ онот.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**

*АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО*

## ТЕЛЕВИЗОР "ҠОРБАН" БУЛДЫ

Ислам менән Сабира һәүетемсә генә йәшәп ята. Ире үҙе тәпәш, үҙе йыуан, ә бисәһе оҙон, ябыҡ, шуға уны Таҡта Сабира, тип йөрөтәләр. Бер көндө былар икәүләп кенә телевизорҙан кино ҡарайҙар: унда һылыу ҡыҙҙар, һомғол егеттәр ҡатнаша. Ислам: "Эх, бынау ҡыҙҙың сибәрлеге, һин түгел инде", - тип ысҡындыра. Ҡатын да бирешмәй: "Ә мин анау егетте ҡосаҡлап үбер инем, һин лупшыҡҡа әүрәп, әрәм булдым", - тип ебәрә. Ир һикереп тора, ireш, һуғыш китә... Ир һаман: "Һин бит таҡта, кипкән тараҡан!" - тип һамаҡлай. Ҡатын балта индереп, телевизорҙы һуғып ярғыслай. Бер-береһен кәмһетеү көсө телевизорға төшә. Ауыл буйлап "Теге таҡта лупшыҡты еңмәгәс, телевизорҙы ватҡан" тигән хәбәр китә. Ике көнсөл, ике сәмсел бергә булһа, яу ҡуба, һуғыш сыға, кемдер, нимәлер ҡорбан була шул.

## ҺАЙ, МӘҒНИТ ҮҪКӘН БИТ

Хөснә апай Магнит ҡалаһына ауылдашына ҡунаҡҡа бара. Өй иркен, иҙәндән түбәгә тиклем етеп торған көҙгө эленгән. Апай үҙен көҙгөлә күрә, ләкин үҙе тип белмәй. Сәйгә ултырғас, Хөснә апай: "Төпкө өйҙәге ҡоҙағый сәй эсмәйме ни?" - тип һорай. Хужабикә кеше юҡлығын аңлата, эштең нимәлә икәнен белеп, көлөшәләр. Һуңғараҡ апай ҡала буйлап йөрөп килергә була, аҙаҡтан ауылдашы йәшәгән йортто таныр өсөн ишеккә ҙур бер сыбыҡ һөйәп китә. Тик аҙаҡтан сыбыҡлы ишекте тапмай, йонсоп бөтә. Был оҙаҡлағас, эҙләргә сығалар һәм арыған, әлһерәгән Хөснәне саҡ табалар. Тын алғас, апайыбыҙ: "Һай, Мәғнит үҫкән, көҙгөләге шәүләңде үҙгәртә, ишектәге сыбыҡ та юҡ була, бер хикмәте барҙыр ул", - тип һөйләнә. Тормош яңылыҡтар менән тула, ғүмер юлында күргәндәрҙең күбеһе артта ҡала, юғала, онотола. Апай ҙа үҙенең элекке күргәндәрен күҙ алдына килтергәндер инде.

## ҒӘЛИМӘ ЕҢГӘ ЭСӘК БЕШЕРӘ

Ҡыш мәле, һуғымдар һуйылған, тултырмалар яһалған, инде йәйләп һыйланырға ла була. Бер көндө Ғәлимә еңгә лә туҡ эсәк бешермәксе була. Еңгә үҙе әрпеш кенә. Эсәк йыуғанда кәрәге бөткән бер сепрәкте лә ҡушып йыуа һәм ҡаҙанға һала. Аш өлгөртәр мәл еткәс, "эсәк"те тартҡылап ҡарай, өҙөлмәй, тағы ҡайната был. Ҡыҙҙары ғына ҡаҙанда эсәк менән бергә сепрәк бешкәнен белеп ҡала. Ашау ҡайҙа ул ашты! Әле лә берәйһе эсәк ашарға саҡырһа, сепрәк бешермәнеңме, тип көлөшәләр. Һәр эштә йыйнаҡлыҡ та, күҙ ҙә кәрәклеген еңгә онотҡан инде.

## "ТӘМЛЕ АШ"

Күршелә генә Хәлфә бабай ғаиләһе менән йәшәй. Бер көн абыстай ит бешерергә һала, тоҙон да сумыра. Хәлфә намаҙға ултыра, шул саҡ өлкән ҡыҙының инеп, ҡаҙанға тоҙ төшөрөүен шәйләй. Бер аҙҙан бәләкәй ҡыҙ усаҡты рәтләй ҙа, ҡаҙанға бер ҡалаҡ тоҙ һала. Хәлфә быныһын да күрә, әммә намаҙын өҙмәй. Намаҙ уҡып бөткәс, барыбер ашап булмай, тип, хәлфә лә ҡаҙанға тоҙ өҫтәй. Аш өлгөрә, ултыралар, бабай мыйыҡ аҫтынан ғына йылмая, ашамай. Ҡалғандар ашты тәмләү менән төкөрөнә башлай. Бабай: "Өйҙә ҡатын-ҡыҙ күп булһа, аштың йәме-тәме булмай, тигән мәҡәлде онотмағыҙ", - тип һабаҡ бирә. Берҙәмлекте лә оноторға ярамай.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

СОБХАНАЛЛАҺ!

# ҺӘР БАЛА - ҮҘ РИЗЫҒЫ МЕНӘН

**Атай-әсәйҙе һайлап булмаған кеүек, беҙ ҙә баланың малай, йә ҡыҙ булырын, ҡасан тыуырын һорап ала алмайбыҙ. Аллаһы Тәғәлә кемде һәм ҡасан насип итһә, шул ваҡыт үҙ тауышын бирә сабый. Ә шулай ҙа ниндәйҙер ҡеүҙлектән сығып ҡарағанда, баш ҡалала Яңы йыл төнөндә тыуған балалар өлөшлөләр иҫәбенән һанала. Бына ун беренсе йыл рәттән Өфө ҡала округы хакимиәте 31 декабрҙән 1 ғинуарға ҡарай тыуған балаларҙың ата-әсәләрен тантаналы рәүештә ҡотлап, бүләктәр тапшыра.**



Быйыл Яңы йылдың тәүге көнөндә 27 ғаиләлә 14 ҡыҙ һәм 14 малай тыуған. Был бындай тантананың тәүге йылы менән сағыштырғанда ике тапҡырға тиерлек күберәк, ул йылда 17 ғаиләгә тәү башлап бүләк тапшырыла. Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, былтыр Башҡортостанда 55 меңдән ашыу бала тыуһа, быйылғы йыл башынан 4 меңдән артыҡ бала тыуған да инде.

Ата-әсәләрҙе был ҡыуаныслы ваҡиға менән ҡотлап, ҡала башлығы Павел Качкаев, сабыйҙарҙың әсәләренә тәүәккәллектәре һәм ҡыйыулыҡтары өсөн айырыуса рәхмәт әйтте, Өфөлә лә, Башҡортостанда ла тағы ла күберәк балалар тыуырына өмөт белдерҙе. Уның әйтеүенсә, һуңғы йылда баш ҡалала тыуым артыуының ныҡлы үсеше күҙәтелә. Былтыр Өфөлә 13619 сабый тыуған, был 2008 йыл менән сағыштырғанда 459-ға күберәк.

- Өфө - Рәсәй Федерацияһындағы миллионлы ҡалалар араһында халыҡтың тәбиғи үсеше буйынса тәүге урында тора, - тине ҡала башлығы.

Тантанала ҡатнашыусы атай-әсәйҙәр араһында йәштәр өҫтөнлөк алһа ла, өлкән йәштәгеләр ҙә юҡ түгел. Әйтәйек, залда ултырыусы ғаиләләрҙең 16-һында тәүге бала, һигеҙендә - икенсе, берәһендә - өсөнсө һәм тағы ла береһендә алтынсы бала тыуған. Ә бер ғаилә был көндә ике малайлы булған. Шулай уҡ Өфөлә 2002 йылдан алып өс игеҙ бала тыуған ғаиләләргә айырыуса иғтибар бүленә. Баш ҡаланың 25 ғаиләһе фатирлы булған да инде. Быйыл өс бүлмәле фатир асҡысы ике ҡыҙ һәм бер малайлы Лариса һәм Илдар Ғәбдрәхимовтар ғаиләһенә тапшырылды.

Ысынында, сабый яҙмышын Яңы йыл төнө билдәләмәй. Бала шатлығы, ҡасан һәм кем булып тыуыуына ҡарамаҫтан, атай-әсәйендең мөхәббәт емеше булып көтөп алынып тыуыуҙан башланалыр. Хөкүмәт ярҙамын тойоп йәшәү, әлбиттә, ғаиләләргә бала ишәйтергә ышаныс өҫтәй, әммә һәр бала үҙ ризыҡы менән тыуа, тиҙәр. Аллаһы Тәғәлә биргән һәр баланы иң ҙур бүләк итеп ҡабул итергә һәм уларҙы лайыҡлы шәхестәр итеп тәрбиәләргә кәрәк. Атай-әсәй иңенә һалынған бурыс шулдыр.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# АВТОМОБИЛЬ ҺАЛЫМДАРЫ...

## биш тапҡырға артты

**Быйыл юл ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штрафтар элеккесә ҡала ла, автомобиль хужалары өсөн күңелһеҙ үҙгәрештәр юҡ түгел. 29 ғинуарҙан алып ЮХХДИ буйынса дәүләт һалымдарының күләме уртаса алғанда биш тапҡырға күтәреләсәк.**

Әйтәйек, автомобиль дәүләт номеры хаҡы дүрт тапҡырға тиклем артасаҡ. Уны алыр өсөн элекке 400 һум урынына хәҙер 1500 һум түләргә тура киләсәк. Мотоцикл, прицеп, үҙйөрөшлө машина өсөн номерҙар 200 һум урынына мең һум торасаҡ. Транзит номерҙарына ла хаҡ артасаҡ. Металдан эшләнгән теркәү билдәһе мең һумға (400 һум ине), ҡағыҙҙан торғаны - 100 һумға (50 һум ине) баһаланған. Транспорт сараһы паспорты 100 һум урынына 500 һум, ә транспорт сараһын теркәү тураһында танытма 300 һум торасаҡ. Транспорт сараһы паспортына үҙгәртеүҙәр индергән өсөн 20 һум урынына хатта 200 һум түләргә тура киләсәк. Быға тиклем бушлай эшләгән урындарҙа транспорт сараларын ваҡытлыса теркәү хеҙмәте 200 һум буласаҡ. Милли водитель танытмаларының 100 һәм 200 һум урынына ҡағыҙҙан торғаны - 400, пластиктан торғаны 800 һум торасаҡ. Халыҡ-ара танытмаға 100 урынына 1000 һум хаҡ ҡуйылһа, автомобиль йөрөтөүгә ваҡытлыса бирелгән рөхсәт 60 урынына 500 һум буласаҡ. Ә бына автомобилдәрҙе техник тикшереү ун тапҡыр артасаҡ: уны үтеү талоны 30 түгел, 300 һум торасаҡ. Дөйөм алғанда, яңы автомобилде ЮХХДИ -ла теркәү өсөн кәрәкле булған тупланма - дәүләт номеры алыу, транспорт сараһы паспорты, теркәү тураһында танытма һәм техник тикшереү талоны - 630 һум урынына 2600 һумға барып баҫасаҡ.

Күңелле яңылыҡтар ҙа бар. Техник тикшереү актын биреү, водитель танытмаһына теоретик һәм практик имтихан ҡабул итеү һәм был танытманы алыуҙы дәлилләүсе справка өсөн хәҙер һалым түләтелмәйәсәк. Шулай уҡ транспорт сараларына ауыр йөк ташыуға рөхсәт һәм халыҡ-ара юл хәрәкәтенең ҡатнашыусыһын айырыу билдәһе бушлай буласаҡ.

**Ун һумлыҡ тимер аҡсаларҙың тәүге партияһы Башҡортостанға килде лә инде. Быйылдан Рәсәйҙә 10 һумлыҡ ҡағыҙ аҡсалар сығарыу туктатылды. Был купюралар әкренләп әйләнештән сығарып бөтөрөләсәк. Уларҙың тимер "алмашсы"ларына тулыһынса күсеү 2012 йылда планлаштырыла.**




# ҠАҒЫҘҘЫ...

## тимерҙәре алмаштырасаҡ

Яңы аҡсалар быға тиклем ҡулланылышта булған 10 һумлыҡ тимер аҡсаларҙан айырыла. Яңы тимер аҡсалар күләме буйынса бәләкәй һәм еңелерәк. Ул еҙ менән ялатылған ҡоростан эшләнгән, ауырлығы буйынса 5,6 грамм тарта, диаметры - 22, ҡалынлығы - 2,2 миллиметр. Тимер аҡсаның бер яғында ике башлы бөркөт - Рәсәй банкыһы эмблемаһы төшөрөлгән, - икенсе яғында аҡсаның номиналы - 10 һум күрһәтелгән. Аҡсаның камиллаштырылған һаҡлаусы үҙенсәлеге бар.

Ҡағыҙ ун һумлыҡтарҙы тимер аҡсаларға алмаштырыу ҡарары тәү сиратта экономиялау маҡсатынан ҡабул ителә. Әгәр 10 һумлыҡ ҡағыҙ аҡса бер йыл тирәһенә сыҙаһа (50 һумлыҡтар ҙа бер йылда, 100 һәм 500 һумлыҡтар ике йылда туҙа, ә 1000 һәм 5000 һумлыҡтар биш йылға сыҙай), тимер аҡса 25-30 йыл хеҙмәт итә. Тимер аҡса һуғыу ҡағыҙ аҡсаларҙы баҫыуға ҡарағанда ҡиммәтерәк булған осраҡта ла, сығым барыбер ҙә әҙерәк була. Тимер аҡсаларҙың әйләнештә оҙайлы ваҡыт йөрөүен иҫәпкә алғанда, 10 йыл эсендә 18 миллиард һум тирәһе аҡса экономиялауға өлгәшеләсәк.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры



**9 февралдә** М.Кәримдең **"Ауыл адвокаттары"** спектакле.

**10 февралдә** Т.Дәүләтбирҙинаның **"Минең ғаиләм"** мелодрамаһы.

**11 февралдә** К.Кизиның **"Кәкүк ояһы"** психологик триллеры урынына **"Мулла"** спектакле ҡуйыла!

**12 февралдә** тамашасылар һорауы буйынса Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына 90 йылға арналған театрлаштырылған байрам концерты.

**13 февралдә** Ф.Бүләковтың **"Мөхәббәт ҡарағы"** музыкаль комедияһы.

**14 февралдә** М.Буранғоловтың **"Шәүрәкәй"** романтик-музыкаль драмаһы

**Бәләкәй сәхнә**

**12 февралдә** Башҡортостандың халыҡ, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, режиссер, педагог, драматург **Вәли Ғәлимовтың** тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған хәтер кисәһе.

**13 февралдә** Ф.Бүләковтың **"Һөйөү сәғәте һуҡҡанда"** комедияһы.

**КЕМ АЛЫҠ?**

**Түбәндәге һорауҙарға тәүгеләрҙән булып дөрөҫ яуап биреүсе ике кеше театр тамашаларына сәҡырыу ҡағыҙы менән бүләкләнәсәк. Йәғеҙ, кем алыҡ?**

1. Вәли Ғәлимов Мәжит Ғафуриҙың ниндәй әҫәрен сәхнәләштергән?
2. Вәли Ғәлимов нисәнсе йылда тыуған?

**Телефон: 8-937-3419192**

## Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**9 февралдә** Т.Миңнуллиндың **"Йәнкисәккәйем"** музыкаль комедияһы.

**10 февралдә** М.Кәримдең **"Беҙҙең өйҙөң йәме"** спектакле.

**11 февралдә** А.Володиндың **"Биш кистә - бер ғүмер"** драмаһы.

**12 февралдә** 10.00, 12.00 сәғәттә балалар өсөн Р.Ураҡсинаның **"Сыңҡылдаҡ себен"** әкиәте.

**12 февралдә** Т.Миннуллиндың **"Алты ҡыҙға бер кейәү"** моңһоу комедияһы.

## Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 февралдә** Башҡортостандың халыҡ артисы **Роза Аккучукованың** юбилей кисәһе уҙасаҡ. **"Алтын балдаҡ..."** тамашаһында Нәзифә Ҡадирова, Фәрүәз Урманшин, Резеда Әминева, Азат Айытколов, Редик Фәсхетдинов,Нурия Абдуллина, Фирҙәт Ғәлиев, Зөлфиә һәм Рөстәм Ҡудашевтар, "Любизар", "Ҡыҙыҡ-Мәҙәк" төркөмдәре ҡатнаша.

ИҒЛАН

Казенное предприятие РБ Редакция журнала "Аманат" сообщает, что по результатам состоявшегося "26" января 2010 года аукциона по продаже государственного имущества РБ, автомобиля ВАЗ-21124, 2004 года выпуска, государственный регистрационный номер С 565 ВА 02, находящегося в оперативном управлении КП РБ Редакция журнала "Аманат" продан Ахмадуллину Ильгаму Алексеевичу (г.Уфа) по цене 73950 (семьдесят три тысячи девятьсот пятьдесят) рублей.

* * *

19 февралдә Нефтселәр мәҙәниәт һарайында Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты сығарылыш уҡыусыларының осрашыу кисәһе үткәрелә. Башлана 16.00 сәғәттә.

**"Башҡорт энциклопедияһы" ғилми нәшриәте**




**"Башҡорт энциклопедияһы"ның (рус телендә) 1,2,3,4-се томдарын; "Салауат Юлаев" энциклопедияһын; "Башҡорт теленең орфографик һүҙлеге"н һәм башҡа китаптар һата. Адрес: Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 55. Телефондар: 250-00-56; 250-03-92.**

*✓ Яралы төлкө ҡорбан булған ҡоҙғондар һәм һайыҫҡандар менән туҡланып, тағы бер нисә көн ағас төбөндә ята. Үҙе шулай тип ҡабатлай: "Көслөләр дошманлашып үҙ-ара ыҙғышҡанда, көсһөҙҙәр көс йыя..."*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



# ТӘҮӘКӘНДӘ "СӘҢКЕМ"ДӘР

## йыр-бейеүгә әүҙемдәр

**Тәүәкән ауылы Күгәрсен районының көнбайышында таулы, урманлы ерҙә урынлашҡан. Был ауылдың халыҡ араһында йөрөгән боронғо исеме - Сәңкем. Бында сәңкем-ҡыпсаҡ ырыуына ҡараған башҡорттар йәшәй.**

Тәүәкән ауылы мәҙәниәт йортоноң "Сәңкем" фольклор ансамбле 2002 йылдың 24 сентябрендә барлыҡҡа килә. Ансамбль ағзалары - 30 йәштән 74 йәшкә тиклемге ҡатын-ҡыҙҙар. Улар ауылда һәм районда үткәрелгән бөтөн сараларҙа әүҙем ҡатнаша. "Сәскә ат, Башҡортостан!" тигән смотр-конкурста абруйлы урын биләһә, 2004 йылда уҙғарылған "Тере шишмәләр" республика халыҡ ижады фестивалендә I дәрәжә лауреат исеменә лайыҡ була "Сәңкем"дәр. Ҡурайсы Ишмулла Дилмөхәмәтовтың юбилейын билдәләгәндә туй йолаһын күрһәтеп, Йылайыр районында өсөнсө урын яулайҙар. Ошондай әүҙем һәм ижад ҡомарлы "Сәңкем" коллективына 2008 йылдың 14 ғинуарында "Халыҡ фольклор ансамбле" исеме бирелде.

Ансамбль йәштәрҙең никахлашыу тантанаһында, мәктәп уҡыусылары алдында төрлө йолалар сәхнәләштерә. Йыл һайын төрлө йолаларҙы иҫкә төшөрөп һәм өйрәнеп, репертуарҙы яңыртыу өҫтөндә эшләйҙәр. Репертуарҙарында халыҡ йырҙары, таҡмаҡтар, һуғыш осоро таҡмаҡтары, ҡобайырҙар, мөнәжәттәр һәм башҡа ауыҙ-тел ижады әҫәрҙәре бар, шулай уҡ данлыҡлы ауылдаштары Президентыбыҙ Мортаза Рәхимовты данлаған йыр, таҡмаҡтар ҙур урын алып тора. "Беҙҙең Президентыбыҙ маҡтап йырлауға лайыҡлы ил ағаһы булып танылды. Атанан күргән - уҡ юнған, тигәндәй, Президентыбыҙҙың атаһы Ғөбәйҙулла Зәфәр улы заманында колхозды күтәрһә, Мортаза Ғөбәйҙулла улы бөтә Башҡортостанды алғы сафҡа сығарҙы. Унын етәкселегендә Башҡортостаныбыҙ сәскә ата", - ти улар.

Әлеге ваҡытта "Сәңкем" халыҡ фольклор ансамблен ошо ауылда тыуған, юғары белемле, һәләтле ойоштороусы Гөлдәр Мөхтәр ҡыҙы Әбдрәхимова етәкләй. Бөгөн коллектив Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығын һәм Күгәрсен районының 80 йыллыҡ юбилейын билдәләргә әҙерләнә.

**Фирғәт ӘБДРӘХИМОВ.**






АТЫҢ КЕМ?

# БЕЙЕШ БАТЫР ХӨРМӘТЕНӘ

Фотоһүрәттәге матур малайҙың исем-шәрифе Бейеш Хәсәнов булыр. Бейешкә әле ун бер йәш, ул юлбарыҫ йылында тыуған. Ул Өфөнөң Фатима Мостафина исемендәге 20-се башҡорт гимназияһында уҡый. Бейештең атаәсәһе Рушан менән Гөлгөнә Ҡыҙыл һыуын һыулаған Ҡырҡты, Ирәндек буйҙарынан - Әбйәлил районынан. Бейеш йәйге каникулдарында ошо районың Үтәгән йә Тәпән ауылдарында өләсәйҙәрендә булырға ярата. Улдары киләсәктә батыр йөрәкле, рухлы, кешелекле, тәүфиҡлы шәхес булып үҫһен, тиеп, атаәсәһе данлыҡлы яҡташтары - Бейеш батырҙың исемен биргән уға.



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, ныҡымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨСЛӨЛӘР ТАЛАШҠАНДА...

## көсһөҙҙәр көс йыя

Көслө ырыу хан ҡуйыр, үсле ырыу ҡан ҡойор.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Атайҙарҙың тәп хатаһы - балалары улар менән ғорурланһын, тип тырышыуҙа.

**(Бертран Рассел).**

Ҡырҡ йәш - йәшлектең ҡартлығы, илле йәш - ҡартлыҡтың йәшлеге.

**(Виктор Гюго).**

Бөйөклөктән ҡурҡмағыҙ: кемгәләр ул тыумыштан бирелә, кемдер уны эштәре менән яулай, кемгәлер ул... бүләк ителә.

**(Вильям Шекспир).**

Тормош - ул беҙгә бөйөк эштәр атҡарһын тип ҡуртымға бирелгән ҙур булмаған биләмә ул.

**(Д. Мередит).**

Азатлыҡты һөймәгән кеше юҡ. Ләкин ғәҙел кеше уны - барыһы өсөн дә, ғәҙел булмаған кеше үҙе өсөн генә талап итә.

**(К.Л. Берне).**

Вазифаһына күрә күтәрелмәй кеше, ә бына вазифа кешеһенә күрә оло һәм изге була ала.

**(А. Джами).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡоҙғондар һәм һайыҫҡандар һәр табышты уртаҡ бүлергә тип килешкән. Бер ваҡыт улар бер ағас төбөндә һунарсылар яралаған төлкөнө күреп ҡала һәм барыһы ла уның янына йыйыла. Һайыҫҡандар: "Беҙ төлкө ҡаүҙәһенең алғы яғын үҙебеҙгә алабыҙ",- ти. "Улайһа, артҡы өлөшөн беҙ алабыҙ", - ти ҡоҙғондар. Шул саҡ һүҙгә төлкө ҡушыла һәм: "Мин, ҡоҙғондар булмышы менән һайыҫҡандарҙан өҫтә тора, шуға ла минең ҡаүҙәмдең башым, мейем, башҡа тәмле ағзаларым булған алғы өлөшө уларға тейә, тип уйлағайным", - ти. "Әйе шул, - ти ҡоҙғондар, - беҙ тап шулай итәбеҙ ҙә, төлкөнөң алғы өлөшөн үҙебеҙгә алабыҙ". "Юҡ инде, - ти һайыҫҡандар, - алдан һөйләшкәнсә, төлкөнөң алғы өлөшө беҙҙеке". Бәхәсләшеүселәр араһында ысын һуғыш башлана, әллә күпме ҡош ҡорбан була, тере ҡалғандары көскә ҡасып ҡотола. Яралы төлкө ҡорбан булған ҡоҙғондар һәм һайыҫҡандар менән туҡланып, тағы бер нисә көн ағас төбөндә ята. Үҙе шулай тип ҡабатлай: "Көслөләр дошманлашып үҙ-ара ыҙғышҡанда, көсһөҙҙәр көс йыя..."**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:** Гөлфиә ЯНБАЕВА.

**Мөхәрририәт:** Әхмәр ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Ләйсән НАФИҠОВА, Динара ЯҠШЫБАЕВА, Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес: 450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
**Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru**
**E-mail: info@kiskeufa.ru kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673 (льготалы)

Тиражы - 6423
Заказ 424